ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

2-8 май (һабанай)

2025

№17 (1161)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

Улың менән биш йәшенә саҡлы батша һымаҡ,
ун биш йәшкә саҡлы - хеҙмәтсе һымаҡ, ун биш йәштән һуң
дуҫ һымаҡ күреп аралаш.
(Боронғо һинд аҡылы).

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Әҙәм асылы - хеҙмәттә**



6

**Өфө данын һөнәрмәндәр...**

бар донъяға тарата



8-9

**Кемдәр икән...**

юғалыуға дусар һөнәрҙәр исемлегендә



11

**Бәхет сере ябай:**

тәмле ризыҡ ей һәм сәйәхәттәрҙә ял ит!



12-13

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

БАЙРАМ МЕНӘН!

# ЙӘШӘҮ - УЛ ХЕҘМӘТ




Ҡадир ДАЯН

**Йәмле майҙың беренсе көнө ай календарында "Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы. Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнө" тип билдәләнгән.**

Эйе, Беренсе май - тәбиғәттең уяныуын, яңырыуын һәм кеше хеҙмәтенең ошо яңырыуға бәйле тантанаһын билдәләүсе дата. Белеүегеҙсә, тәү башлап боронғо римляндар был көндө уңыш Алиһәһен хөрмәтләп, хеҙмәт емештәренең ишле, бай булыуын теләп, байрамға әйләндергән. Байрамдың икенсе бер тарихы 1886 йылда 1 майҙа Чикаго эшселәренең, 8 сәғәтлек эш көнө талап итеп, урамдарға сығыуына бәйле. Шунан башлап иһә ул көн Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнөнә әйләнгән. Ҡыҫҡаһы, Яҙҙың һәм Хеҙмәттең тантанаһы булып ҡабул ителә Беренсе май.

Гәзитебеҙҙең был һанын тап ошо Хеҙмәт темаһына арналған шиғыр менән асмаҡсы булып, китаптар аҡтарҙыҡ, яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен барланыҡ. Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙер был темаға яҙмайҙар икән. Уның сәбәптәрен һанап тормайбыҙ, был темаға ишаралар, кинәйәләр былай ҙа баҫылып тора гәзит биттәрендә. Нисек кенә булмаһын, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның:

*Йәшәү - хеҙмәт, көрәш, үҫеш бит ул.*
*Унан башҡа тормош юҡ миңә.*
*Ҡул ҡаушырып түрҙә ултырырға*
*Килмәнем бит, донъя, мин һиңә,* - тигән юлдарын күңелендә йөрөткәндәр, хеҙмәт ҡәҙерен белгәндәр бөтмәгән әле. Бөтмәҫ тә!

Әйткәндәй, өлкән быуын яҙыусыларыбыҙҙың өлкән быуынға бик тә билдәле тағы бер шиғыр юлдарын уҡып үтәйек әле. Ҡадир Даяндың ошо шиғыр юлдарындағы һүҙҙәр менән хеҙмәткә дан йырлайыҡ, уның тормош асылы икәнен иҫкә төшөрәйек.

## БЕҘҘЕҢ БӘХЕТ - ХЕҘМӘТТӘ

*Еңел килгән мал ҡәҙерһеҙ,*
*Ләззәте лә аҙ була.*
*Тәмле һәм ҡиммәт була*
*Эшләп тапҡан мал ғына.*
*Нимә ауыр, нимә еңел,*
*Үҙең табып, бел, бала.*
*Хеҙмәт менән ғүмер итеү -*
*Иң ҙур бәхет донъяла.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

**Өфө Рәсәйҙә беренсе булып "Бөтөн донъя һөнәрселек ҡалаһы" исеменә лайыҡ булды. Ысынлап та, лайыҡлы баһа, сөнки республиканың баш ҡалаһында талантлы һөнәрмәндәр бихисап. Уларҙың бер нисәһенә үҙҙәренең эшмәкәрлеге тураһында һөйләүҙәрен һорап мөрәжәғәт иттек.**

***Сажиҙә МУЛЛАҒОЛОВА, балаҫ һуғыу оҫтаһы, Өфө ҡалаһы Һупайлы биҫтәһенең 159-сы мәктәбе башланғыс синыф уҡытыусыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы:*** Бөгөнгө көндә яратып башҡарған шөғөлөм, кәсебем балаҫ һуғыуға мин яйлап килдем, тип әйтергә кәрәк. Мәләүез районы Ҡотлобулат ауылында тыуып үҫтем. Ҡартинәйемдең өйҙә балаҫтар һуғып ултырыуын, уның бәләкәй, ыҡсым ғына туҡыу станогын 5 йәштәр сағымдан уҡ иҫләйем. Уның оҫта ғына итеп, бер көйгә һалып алып ҡына төрлө биҙәкле матур-матур балаҫтар һуғыуын ҡарап, эй күҙем ҡыҙа торғайны. "Эх, мин дә шундай балаҫтар һуға алһам ине", - тип хыялланғаным иҫтә. Ошо хыялым мине ғүмер буйы оҙатып килде. Ләкин хыялым оҙаҡ йылдар бары тик хыял ғына булып ҡала



килде, донъяуи мәсьәләләр менән ғүмер үтә торҙо. Өфө ҡалаһына килеп эшләй башлағас, бер танышыма балаҫ һуғырға өйрәнергә теләүем, станок эҙләүемде һөйләнем. Ул миңә интернеттан ошондай станоктар эшләп һатҡан оҫталарҙың сайтын табып бирҙе. Беренсе өҫтәл станогымды шул сайт аша яҙҙырып алдым. Был 2012 йыл ине, ошо ваҡыттан алып ныҡлап ҡыҙыҡһынып, йайлап өйрәнеп, әлеге мәлдә балаҫ һуғыу яратҡан шөғөлөмә, кәсебемә әйләнде...

Өфөлә беренсе булып мин ҡалала үткәрелгән төрлө саралар ваҡытында үҙемдең аҫалы балаҫтарымды алып сыҡтым. Теләге булғандарға оҫталыҡ дәрестәре бирҙем, хәҙер балаҫ һуғыу буйынса оҫталыҡ дәрестәре генә түгел, ә марафондар ҙа үткәрәм. Бөгөнгө көнгә 3 марафон үткәрҙем, хәҙер Башҡортостандың төрлө төбәгендә минең уҡыусыларым бик күп.

Ошо йылдар эсендә төрлө биҙәкле һәм төрлө ҙурлыҡтағы әллә күпме балаҫ, шулай уҡ әллә күпме шәл, таҫтамал, палантин, шарфтар һуҡтым. Һәр бер һуҡҡан балаҫым минең өсөн ҡәҙерле.

Минең Өфөлә туҡыусылар мәктәбе (школа ткачества) асырға тигән теләгем бар. Унда теләге булған һәр кем шөғөлләнә алыр, шулай уҡ ул балаҫ һуғыу менән ҡыҙыҡһынған, балаҫ һуғыусыларҙың йыйылып һөйләшер, тәжрибә уртаҡлашыр урыны, халҡыбыҙҙың матур кәсебен үҫтереү үҙәге булыр ине. Өфөнөң "Бөтөн донъя һөнәрселек ҡалаһы" исемен алыуы минең кеүек күп оҫталарҙың ошондай ниәт-хыялдарын тормошҡа ашырырға ярҙам итер, тип өмөтләнәм.

12+

БЫЛ АЙҘА...

# ЕҢЕҮ! БЕР КҮҘЕНДӘ ШАТЛЫҠ НУРЫ ҺИБЕЛӘ...



## Бер күҙендән әсе йәш тама

**Байрамға бай май айы ла килеп етте. Элгәре яҙҙың һуңғы айы һабанға төшөү, һабантурғай йыры, сәскәләр, ләйсән ямғыры, тәүге күкрәү кеүек күренештәре менән йәлеп итһә, бөгөн уның күп кенә сифаттарын үҙҙәренә алып, майҙың башҡараһы бурыстарын уңған, өлгөр "ағалары" - март менән апрель эшләп тә ҡуя башланылар, үәт! Апрель урталарында уҡ ер йөҙөн йәм-йәшел сәхрә ҡаплай, ағастар бөрөгә тулыша, тиҙҙән иртә яҙ символы муйыл менән сирень сәскәгә төрөнөр.**

Уңыш нигеҙе - баҫыусылыҡ эштәре лә көттөрмәй. БР Ауыл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, республиканың 13 районы игенселәре апрель башында уҡ баҫыуҙарға сыҡты. Улар дым ҡаплау, күп йыллыҡ үләндәрҙе һәм ужым арышын ашламалау кеүек агротехник эштәрҙе башлап ебәрҙе. Ужымдар һәйбәт ҡышлаған. Россельхозбанк быйыл Башҡортостан хужалыҡтарына миҙгел эштәрен күтәрмәләү маҡсатында 1,6 млрд һум йүнәлткән дә инде, был былтырғыға ҡарағанда 53 процентҡа күберәк. Майҙы көтөп тормай, сәсеүҙе лә теүәлләп ҡуя торған әле алағарай, Хоҙайҙың көнө генә булһын. Һуң, шулай булмайынса, майҙың үҙенең байрам мәшәҡәттәре күп бит! **9 май -** Бөйөк Еңеү юбилейы үҙе генә ни тора! "1941-1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына әҙерлек һәм үткәреү тураһында"ғы Указға РФ Президенты Владимир Путин 2023 йылдың 31 июлендә үк ҡул ҡуйғайны инде. Унда Бөйөк Еңеүҙең бөтөн донъяуи-тарихи әһәмиәте һыҙыҡ өҫтөнә алына, сөнки хәтерен юйған бәғзе бер Европа илдәре үҙҙәрен фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарыусы Совет Армияһы һәм ҡаһарман халҡына бурыслы икәнен онотҡанға һалышып маташа бит.

...Ул көндө, ә дөрөҫөрәге, төндө, икһеҙ-сикһеҙ илебеҙ халҡы йоҡларға ятмай: радио аша 1418 көн һәм төн буйына зарығып көткән мөһим хәбәр хаҡында белһәләр ҙә, уны үҙ ҡолаҡтары менән ишетергә теләйҙәр. Бөтөн союз радиоһы дикторы Юрий Левитан шулай тип хәтерләй: "Кисен беҙ бөгөн радионың таңғы дуртҡә тиклем эшләйәсәге хаҡында бер нисә тапҡыр ҡабатланыҡ, һәм халыҡ нимә тураһында хәбәр ителәсәген шундуҡ төшөндө". Ниһайәт, 1945 йылдың 9 майында төнгө сәғәт 02 лә 10 минутта мәшһүр Левитандың бәғерҙәрҙе иретерлек ҡеүәтле тауышы яңғырай. Ул Берлин янындағы Карлсхорст ҡаласығында Германияның һис һүҙһеҙ капитуляцияға бирелеүе хаҡында актҡа ҡул ҡуйылыуы һәм Бөйөк Ватан һуғышының тамамланыуы хаҡында хәбәр итә. Хәбәрҙең тексын ҡулға тотҡас, тулҡынланыуҙан йөҙрөҡтарын ҡыҫа, ләкин үҙен ҡулға ала һәм ниндәй генә хәлдә булыуына ҡарамаҫтан, һәр ваҡыттағыса, рух күтәргес ихтыярлы, ышаныслы һәм ҡеүәтле тауыш менән уҡый башлай: "Мәскәү һөйләй! Советтар Союзының бөтөн радиостанциялары эшләй! Һуғыш бөттө! Германия тулыһынса ҡыйратылды!" Был ваҡытта урамдарға йыйылған халыҡтың алҡышланыуын күрһәгеҙ ине: кемдер көлә, кемдер йырлай, кемдер илай, ҡосаҡлашалар, бейейҙәр, тип хәтерләй аҙаҡ легендар диктор Юрий Левитан ошо мәл хаҡында иҫтәлектәрендә. Тәүге Еңеү көнө бөтөн ҡала-райондарҙа тантаналы митингтар, концерттар, халыҡ байрамдары рәүешендә үтә, тора-бара Еңеү көнөнөң үҙенә генә хас традициялары барлыҡҡа килә: Тынлыҡ минуты, Салют, Мәңгелек ут, Үлемһеҙ полк һәм, әлбиттә, күҙ йәштәрен тыйып булмаҫлыҡ тулҡынландырғыс хәрби Парад. Ул ил йөрәге Мәскәүҙең Ҡыҙыл майҙанында үтә һәм унда тамаша ҡылыу өсөн илебеҙ халҡы ғына түгел, сит ил ҡунаҡтары ла ете диңгеҙ, ете тау аръяғынан килеп етә.

Быйыл Еңеү байрамы йөкмәткеһенә айырыуса ҙур мәғәнә һалына: Рәсәйҙе, уның ҡаһарман халҡын бер ҡасан да еңеп, теҙләндереп булмаясаҡ! Быны хәҙер Көнбайышта баш күтәреп ағыуын сәсә башлаған нацизм һәм фашизм ҡалдыҡтары ла, Европа ғына түгел, НАТО блоғы ла төшөндө: Рәсәйҙе бойһондороу мөмкин түгел, уның менән фәҡәт тыныс күршеләрсә килешеп йәшәү хәйерле икәнен белделәр. Быны шуны төшөндөрҙө һуғыш суҡмарҙары һәм террористарға ҡаршы иғлан ителгән Махсус хәрби операция. Сөнки ил азатлығын ҡурсып, бөгөн был фронтта Бөйөк Ватан һуғышы батырҙарының улдары һәм ейәндәре тора һәм улар ата-бабаларының хәрби данын лайыҡлы дауам итә. Әйткәндәй, Бөйөк Еңеүҙең Ҡыҙыл майҙанда үтәсәк 80 йыллыҡ юбилей парадында быйыл Махсус хәрби операция геройҙарынан торған парад расчеты ла ҡатнашасаҡ. Был үҙенә күрә Еңеү тантанаһы символына әүерeләсәк һәм яугирҙарыбыҙҙы МХО алышында ла фәҡәт еңеүселәр булып ҡалырға рухландырасаҡ. Еңеү парадында бөгөн Махсус хәрби операцияла дошмандың ҡотон алыусы легендар "Орешник" ракета комплексы ла күрһәтеләсәк. Байрам йәме - дуҫтар менән: 9 Май тантанаһын уртаҡлашырға Рәсәйгә дуҫ илдәр - прогрессив донъя лидерҙарының да килеүе көтөлә.

Был айҙа, шулай итеп, **1-4 май**, **8-11 май** байрам көндәре булып, өҫтәүенә **17, 18, 24, 25, 31 май** шәмбе һәм йәкшәмбе ҡәҙимге ял көндәре көтә беҙҙе. Майҙағы тағы бер тарихи дата - ул Яҙ һәм Хеҙмәт байрамы. Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара теләктәшлек көнө **(1)**, Совет ғәскәрҙәре тарафынан фашистик Германияның баш ҡалаһы - Берлинды алған көн **(2 май, 1945)** шулай уҡ йәмәғәтселектә киң билдәләнә. Һабанай календарында башҡа иҫтәлекле һәм байрам көндәре: Бөтөн донъя матбуғат азатлығы, Бөтөн донъя Ҡояш **(3)**, Совет матбуғаты, Инвалидтар хоҡуғы өсөн халыҡ-ара көрәш **(5)** көндәре, Радио һәм бөтөн элемтә тармаҡтары байрамы, Рәсәй Ҡораллы Көстәрен булдырған көндәр **(7)**, Икенсе донъя һуғышында һәләк булғандар хәтерен иҫкә алыу һәм килешеү көндәре **(8, 9)**, Берлин янындағы Карлсхорсте ҡалаһында фашистик Германия-

СЕТЕРЕКЛЕ...

# АЙЛЫҒЫМ - БАЙЛЫҒЫМ,

## фәҡирлегем - мәңгелегем...



**Баймаҡ районы Икенсе Эткол ауылының 82 йәшлек аҡһаҡалы, Рәфҡәт хажи Ишбулатов Баймаҡ ауыл хужалығы техникумында уҡығандан һуң колхозда зоотехник булып эшләгән. Хәҙерге көндә хаҡлы ялда булыуға ҡарамаҫтан, намаҙлыҡҡа текәлеп кенә тик ултырмай, тулы ҡанлы тормош менән йәшәй, һыйыр, йылҡы малдары тота, игенселек менән дә шөғөлләнә. Арбанды ҡыш, сананды йәй әҙерлә тигәндәй, мин уны ихатаһында комбайнын ремонтлап йөрөгән сағында тап иттем, һүҙ араһында үҙенә бер нисә һорау ҙа бирҙем.**

➔ **Рәфҡәт ағай, намыҫлы хеҙмәт тигән төшөнсә хәҙерге ваҡытта бармы ул?**

- Һорауыңа бихисап һорауҙар менән яуап бирәм:

Бөтә нәмә байығыуға, аҡсаға ҡоролған заманда кеше нимә өсөн намыҫ менән хеҙмәт итергә тейеш һуң?

Дини күҙлектән ҡарағанда ла, тик шәхси мәнфәғәтең өсөн башҡарылған ғәмәлең, нәфсеңде ҡәнәғәтләндерер өсөн атҡарылған эшең намыҫлы була аламы?

Шул уҡ ваҡытта ғаиләңде ҡарар, балаларыңды туйындырыу, кейендереү һәм тәрбиәләү өсөн башҡарылған хеҙмәтеңде намыҫлы тип әйтеп буламы?

Ҡапыл ғына был һорауҙарға яуап биреп тә булмай. Беҙ, мәҫәлән, социализм осоронда йәшәүселәр, хеҙмәт итеүселәр намыҫлы хеҙмәт итеүҙе тир түгеп алдыңа ҡуйылған бурысты атҡарыу тип аңланыҡ һәм илебеҙ мәнфәғәте өсөн хеҙмәт иттек.

Юғары сифат менән башҡарылған эшең генә намыҫлы хеҙмәт күрһәткесе була алды ул заманда. Хәҙер сифат күрһәткесе бөтөнләй юҡ, уның ҡарауы, хеҙмәт түкмәйенсә генә төрлө банк операциялары, тауарҙы арттырып һатыу ярҙамында, йәғни хеҙмәт итмәйенсә, ҡыҫҡа ваҡыт эсендә күберәк аҡса эшләү баһалана. Икенсенән, намыҫлы хеҙмәт итеүселәрҙән бөгөн "колхозник" тип көлөп ҡарайҙар.

➔ **Коммунистик идеологияға ғына бәйле булдымы икән намыҫлы хеҙмәт итеү?**

- Намыҫлы хеҙмәт - социаль төшөнсә, элек байҙар ваҡытында ла намыҫлы хеҙмәт булмағандыр. Тамаҡ, көн хаҡына хужаһының мәрхәмәтенә генә өмөт итеп, ялланып эшләүсе нисек намыҫлы хеҙмәт итһен инде!

➔ **Бына һин үҙең, Рәфҡәт ағай, бөгөн һис тә эшһеҙ тора алмайһың. Бер көнлөк хеҙмәтең нимәнән ғибәрәт?**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы указы буйынса ойошторолған Креатив индустрияларҙы үҫтереү буйынса советтың беренсе ултырышы үтте. Яңы стратегик майҙансыҡта идеялар менән алмашыу, аныҡ проекттарҙы һәм башланғыстар тикшереү, илебеҙ һәм республикабыҙ өсөн мөһим булған яңы өлкәне үҫтереү ҡарарҙарын ҡабул итеү планлаштырыла. Хәбәр ителеүенсә, был эште Иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министрлығы координациялай. Терәк ойошма итеп Башҡортостан Республикаһының Стратегик эшләнмәләр үҙәге ҡарамағындағы Креатив индустрияларҙы үҫтереү дирекцияһы билдәләнә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә Премьер-министр Андрей Назаровты 55 йәшлек юбилейы менән ҡотланы һәм уны "Хеҙмәт ҡаһарманлығы өсөн" миҙалы менән бүләкләү тураһында указға ҡул ҡуйыуын белдерҙе һәм уға ошо награданы тапшырҙы. Андрей Назаров Радий Хәбировҡа уның хеҙмәтен юғары баһалағаны һәм тыуған республикаһы мәнфәғәтенә эшләү мөмкинлеге өсөн рәхмәт әйтте.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай йортонда Еңеүҙең 80 йыллығы уңайынан Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан БАССР-ҙың Юғары Советы депутаттары хаҡында фотоэкспозиция асылды. "Беҙҙә 184 фронтовик-депутат, улар араһында 11 Советтар Союзы Геройы һәм бер Дан орденының тулы кавалеры бар. Һуғыш башланыу менән Юғары Советтың бөтә составы ла тиерлек фронтҡа китә. Әлеге күргәҙмә фронтовик депутаттарҙың тормош юлы хаҡында бәйән итә", - тине Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Башҡортостандан Регина һәм Илшат Лоҡмановтарҙы "Ата-әсәлек даны" ордены миҙалы менән бүләкләне. "Благовар районында йәшәгән ғаилә башлығы Илшат Илдар улы крәҫтиән-фермер хужалығын етәкләй, йылҡысылыҡ менән шөғөлләнә. Регина Рим ҡыҙы - тарих уҡытыусыһы, Башҡортостан Республикаһының Мәғариф отличнигы. Дүрт улдары бар. Аҫҡар, Ислам, Аслан һәм Илһам спорт менән мауыға, ижади, фәнни конкурстарҙа уңыштарға өлгәшә", - тине Лоҡмановтарҙың татыу ғаиләһе хаҡында республиканың ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова.

✓Рәсәйҙә МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзалары өсөн мөлкәт һалымдары буйынса дөйөм дәүләт льготалары билдәләнә. Ил Хөкүмәте Премьер-министры Михаил Мишустин Финанс министрлығы коллегияһында ошондай йөкләмә бирҙе. "Яугирҙарыбыҙ һәм уларҙың яҡындары өсөн мөлкәт һалымдары буйынса дөйөм дәүләт льготаларын индереүҙе дөрөҫ тип иҫәпләйем", - тине ул һәм Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам итеүҙең, шул иҫәптән улар өсөн уңайлы һалым шарттары булдырыуҙың мөһим эш йүнәлеше булыуын билдәләне.

*✓ Американы өйрәнеүсе сәйәсмән Константин Блохин Мәскәү менән мөнәсәбәттәрҙе тергеҙеү Трамп эшмәкәрлегендә төп йүнәлештәрҙең береһе, тип иҫәпләй һәм ике аралағы һөйләшеүҙәр алып барылыуҙың юҡҡа ғына түгеллеген раҫлай.*



ның бер һүҙһеҙ капитуляцияға биреләүе тураһында Актҡа ҡул ҡуйылған көн **(8 май, 1945)**, Еңеү көнө. 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә - 80 йыл **(9 май, 1945)**, Халыҡ-ара әсә, Урман ултыртыу көндәре **(11)**, Экологик белем, Шәфҡәт туташтары көндәре **(12)**, Рәсәйҙең Ҡара диңгеҙ флоты көнө **(13)**, Халыҡ-ара ғаилә, Халыҡ-ара климат көндәре **(15)**, 1755-1756 йылғы Башҡорт ихтилалы башланыуға - 270 йыл **(15 май, 1755)**, Халыҡ-ара музейҙар, Халыҡ-ара акушер, Рәсәйҙең Балтик флоты көндәре **(18)**, РСФСР-ҙа пионерҙар ойошмаһы ойошторолған көн **(19)**, Бөтөн донъя бал ҡорттары көнө **(20)**, Рәсәй Хәрби-Диңгеҙ Флотының Тымыҡ океан флоты көнө **(21)**, Славяндар яҙмаһы һәм мәҙәниәте көнө **(24)**, Филолог, Химик, Халыҡ-ара юғалған балалар көндәре **(25)**, Рәсәй эшҡыуарлығы **(26)**, Дөйөм Рәсәй китапханалар **(27)**, Ил сиге һаҡсылары көндәре **(28)**, Бөтөн донъя тәмәкеһеҙ көн **(31)**.

**Һабанайҙа тыуғандар:**

**3 -** журналист, яҙыусы, филология фәндәре кандидаты, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты **Сәлимйән Бәҙретдиновҡа - 75 йәш** (1950).

**4 -** ҡурайсы, Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы музыканты, Башҡортостандың халыҡ артисы **Азат Биксуринға - 50 йәш** (1975).

**9 -** табип, анестезиолог-реаниматолог, медицина фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы, 2003-2017 йылдарҙа Республика перинаталь үҙәгенең баш табибы булып эшләгән **Фирғәт Байрамғоловҡа - 65 йәш** (1960).

**16 -** тележурналист, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Балаҡатай районының почетлы гражданы **Флүрә Мурзинаға - 65 йәш** (1960).

**22 -** ғалим, физик-теоретик, техник фәндәр докторы, Санкт-Петербург тау университеты профессоры, БР Фәндәр академияһының почетлы академигы, "Газпромнефть"тең фән буйынса директоры **Марс Хәсәновҡа - 70 йәш** (1955).

**-** журналист, "Ашҡаҙар" радиоһы мөхәррире, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре **Фәнүзә Баһауетдиноваға - 60 йәш** (1965).

**-** зоотехник, хужалыҡ һәм йәмәғәт эшмәкәре, биология фәндәре докторы, профессор, Рәсәйҙең атҡаҙанған фән эшмәкәре, Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре, 1998 йылдан алып үҙ башланғысы менән ойошторған Башҡортостан умартасылыҡ һәм апитерапия фәнни-тикшеренеү үҙәгенең алмашһыҙ генераль директоры, Салауат Юлаев ордены кавалеры, һоҡланғыс шәхес **Әмир Ишемғоловтың тыуыуына - 65 йыл** (1960-2020).

**24 -** тележурналист, яңылыҡтар программаһы редакцияһының махсус хәбәрсеһе, Рәсәйҙең атҡаҙанған журналисы, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың 7-се саҡырылыш депутаты **Рәмзиә Кәримоваға - 50 йәш** (1975).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

- Иртәнсәк торам, малға бесән һалам, аҫтын көрәйем, төшкә һыу эсерәм. Бына кисә ҡарағаттарымдың ботаҡтарын күтәреп бәйләп сыҡтым. Әгәр ҙә ҡарағат ергә ятһа, емеше булмай. Шуның һымаҡ, бихисап ваҡ эштәрем менән көнөм үтә лә китә. Әммә мин "үлмәйем дә, ҡалмайым" тип башҡарған ул эштәремде һис тә намыҫлы хеҙмәт тип атай алмайым.

➔ **Минең атайҙың шундай һүҙе бар ине: айлығым - байлығым, фәҡирлегем - мәңгелегем. Был һүҙҙәре менән ул миңә тик айлыҡ эш хаҡына ғына иҫәп тотоп йәшәһәң, мәңге фәҡир булып ҡалаһың, тигәнде әйтергә теләгәндер тип уйлайым. Шулай түгелме?**

- Күрәһең, дин юлында булған атайың фәҡирлекте динһеҙлеккә бәйләп аңлатырға теләгәндер. Ни өсөн тигәндә, ҡәлебендә Аллаһ булған кеше һис ҡасан да фәҡир була алмай, йәғни шәхси байығыуҙы үҙенә маҡсат итеп ҡуймай. Атайың ябай ғына итеп бик тәрән мәғәнәгә эйә һүҙҙәрҙе әйтеп биргән. Ә инде уның "айлығым - байлығым" тигәне, эйе, айлыҡ хеҙмәт өсөн түләнгән эш хаҡы булһа, әйтемдең тағы ла бер мәғәнәһе көнитмешең, лайыҡлы йәшәйешең өсөн сәбәп ҡылыуға бәйле.

➔ **Намыҫлы хеҙмәтеңә ваҡытында ниндәй баһалар алғаның булды?**

- Миңә Баймаҡ районына намыҫлы хеҙмәтем өсөн миҙал бирҙеләр. Әммә ул наградa миңә һәр төрлө бүләкләүҙәрҙән юғарыраҡ. Бик һирәк бирелде ул награда. "Партизаныраҡ" булғаным өсөн атҡаҙанған-матҡаҙанған исемдәр миңә эләкмәне. Тура һүҙлегем арҡаһында ла күп кенә түрәләргә оҡшаманым, уның ҡарауы, намыҫлы хеҙмәт иттем.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# УТЛЫ ДУҒА ЕҢЕЛМӘЙ

**Ниһайәт! 26 апрелдә Рәсәй Президенты Владимир Путин РФ Ҡораллы Көстәре штабы начальнигы Валерий Герасимовтың Курск өлкәһен нацистарҙан азат итеү хаҡындағы докладын тыңланы һәм бының МХО барышында ниндәй әһәмиәткә эйә буласағын баһаланы. Ил башлығы белдереүенсә, Украина авантюраһы тулыһынса емерелде. Курскиҙы азат итеү неонацистик режимдың ахырын тиҙләтәсәк. Дошмандың был территорияла еңелеүе Рәсәй Ҡораллы Көстәренә фронттың башҡа участкаларында уңышлы хәрәкәттәр өсөн шарттар тыуҙырасаҡ.**

Украина армияһы Курск ерендә Көнбайыш техникаһы менән ҡоралланған иң һуғышсан иҫәпләнгән көстәрен юғалтты, уларҙың штурмлаусы подразделениелары һәм спецназы ҡыйратылды. Курскиҙың замаында немец фашистарына ла бирешмәгән утлы дуғаһы был юлы ла баҫҡынсы дошманды көйҙөрөп юҡҡа сығарҙы: МХО барышында бында 76 меңдән ашыу украин боевигы юҡ ителде һәм яраланды. Президент һөҙөмтәле эш иткән Рәсәй подразделениеларын, шул иҫәптән, десантсыларҙың 76-сы дивизияһын, 116-сы дивизияны, "Ахмат" полкын һәм диңгеҙ пехотасылары - Ҡара диңгеҙ флотының 810-сы бригадаһын, Тымыҡ океан флотының 155-се бригадаһын айырып билдәләне һәм уларға рәхмәт белдерҙе. Дөрөҫ, "Гроза" ҡушаматлы диңгеҙ пехотасылары бригадаһы командиры һүҙҙәренсә, Курск өлкәһендә Украина ҡораллы көстәренең таралышып бөткән боевиктар төркөмдәре осрап тора әле; улар ошо араларҙа тулыһынса юҡ ителәсәк. Курскиҙа Украина армияһын ҡыйратыуҙа стратегик партнерлыҡ килешеүенә ярашлы, Корея Халыҡ Демократик Республикаһының элиталы спецназ частары ҙур ярҙам күрһәтте. Улар ҙа ҡыйыулыҡ, ныҡлыҡ һәм ҡаһарманлыҡ өлгөһө менән айырылып торҙо, тип белдерҙе докладында В.Герасимов.

Әммә Украинала был еңелеү айҡанлы оҙаҡ ҡайғырманылар, буғай. КР.РУ сайтының 27 апрель материалдары йыйынтығынан күренеүенсә, Рим папаһы Францискты ерләү церемонияһында ҡатнашҡан Зеленскийҙың ошонда уҡ килгән АҠШ перзиденты Дональд Трампты тотоп алып, ни бары 15 минутҡа "бәхетле осраҡ"ҡа эйә булыуынан һәм алдан планлаштырылмаған ошо осрашыуҙа Аҡ йорт хужаһы менән икәүҙән-икәү һөйләшә алыуынан һуң Киев бер аҙ күңелләнеп, дәртләнеп киткән, имеш. Трамп был осрашыуҙа Зеленскийҙың күберәк ҡорал һорауы хаҡында "сер"ҙе систе, ләкин, Аҡ йорт хужаһы әйтеүенсә, ул хәҙер өс йыл буйы инде "күберәк ҡорал" һорай, ә Трамп тәүҙә тыныслыҡ килешеүенә Рәсәйҙең мөнәсәбәтен ҡарарға теләүен белдерҙе.

Зеленский Трампты АҠШ ярҙамына өмөт булған хәлдә, Украина киләсәктә конфликтта еңеүгә өлгәшәсәк, тип ышандырырға тырышҡан һәм армияға миллионлаған яңы көстәр йәлеп итергә вәғәҙә биргән. Һәм, ысынлап та, Украина ҡалалары урамдарында военкомат хеҙмәткәрҙәре төркөм-төркөм булып йөрөй һәм осраған кешеләрҙе машинаға һөйрәкләп индерә, тип яҙа бындай хәлде фотоға төшөрөп алырға өлгөргән Ивано-Франковскиҙың осраҡлы гражданкаһы Н. Был хаҡта "Ахмат" спецназ командиры Апты Алаутдинов та Украина Ҡораллы көстәренә хатта ки инвалидтар һәм төрмәлә ултырғандар ҙа йәлеп ителә, тип белдерә.

Украина менән хәлде көйләү буйынса эш дауам итә, тип билдәләй Рәсәй Президенты матбуғат секретары Дмитрий Песков, һөйләшеүҙәр сиктәрендә Ҡырымдың Рәсәй составында ҡалыуын танырға саҡырыусы Дональд Трамп белдереүенә аңлатма биреп. Ғөмүмән, тип иҫәпләй Песков, Украина буйынса Трамптың фекере күп йәһәттән Рәсәй ҡарашы менән тап килә. Ә бына сәйәсмән Сергей Марков Трамптың Ватиканда Зеленский менән осрашыуынан һуң үҙгәреүе хаҡында яҙа. Ватикандан ҡайтышлай, самолетында уҡ Трамп үҙенең телеграм-каналында Рәсәйгә өҫтәмә санкция булдырыу хаҡында яҙа. Дәүләт Думаһы халыҡ-ара эштәр буйынса комитет рәйесе урынбаҫары Алексей Чепа фекеренсә, Трамп әлеге ваҡытта Украинала тыныслыҡ урынлаштырыу буйынса сроктарҙың һуҙылыуында Рәсәй лидерын ғәйепләй, тип белдерә. Ысынында иһә, уны был йәһәттән донъя йәмәғәтселегенә биргән вәғәҙәһененең үтәлмәй ҡала килеүе борсой, шуның өсөн уға кемделер ғәйепләргә һәм конфликтты хәл итеүҙе тиҙләтергә кәрәк, ти Чепа. Американы өйрәнеүсе сәйәсмән Константин Блохин иһә Мәскәү менән мөнәсәбәттәрҙе тергеҙеү Трамп эшмәкәрлегендә төп йүнәлештәрҙең береһе, тип иҫәпләй һәм ике аралағы ярайһы уңышлы дипломатик һөйләшеүҙәр алып барылыуҙың юҡҡа ғына түгеллеген раҫлай.

Әйткәндәй, тағы бер мөһим ваҡиға: 22 апрелдә Һиндостандың күпселеге мосолмандар йәшәгән Джамму һәм Кашмир төбәктәрендәге теракт һөҙөмтәһендә 26 кеше һәләк булған, 20-ләбе йәрәхәтләнгән. Террористар һис бер ғәйепһеҙ туристар төркөмөнә тоҫҡап автоматтарҙан ут асҡан. Был фажиғә Һиндостан менән Пакистан araһында былай ҙа шәптән булмаған мөнәсәбәттәрҙә көрсөк килтереп тыуҙырҙы. Ҡораллы һөжүм өсөн яуаплылыҡты "Кашмир ҡаршылығы" террористар төркөмө үҙ яуаплылығына алды. Терактың сәбәбе - Пакистан менән бәхәсле территорияһы булған Джамму менән Кашмир штатында төпләнгән 85 меңләп "ят әҙәмдәр" (йәғни индустар) арҡаһында килеп тыуған "демографик үҙгәрештәр" мәсьәләһе.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған указға ярашлы, Ватан журналистикаһын үҫтереүҙәге ҡаҙаныштары һәм күп йыллыҡ уңышлы хеҙмәте өсөн "Өмөт" гәзитенең баш мөхәррире Рәдис Ноғомановҡа "Рәсәйҙең атҡаҙанған журналисы" тигән маҡтаулы исем бирелде.

✓Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты республика Хөкүмәтенең резерв фондынан тәбиғәт һәм техноген һәләкәттәрҙе бөтөрөү буйынса айырым сараларҙы финанс яҡтан тәьмин итеүгә бюджет ассигнованиеларын бүлеү ҡағиҙәләренә үҙгәрештәр индереү проектын әҙерләгән. Әйтәйек, граждандарға бер тапҡыр бирелә торған матди ярҙам күләме 15 000 һумдан 15 675 һумға тиклем арттырыла. Тәү сираттағы кәрәк-яраҡты өлөшләтә юғалтҡанда 75 000 һум урынына - 78 375 һум, тулыһынса юғалтҡан осраҡта 150 000 һум урынына 156 750 һум түләргә тәҡдим ителә.

✓Еңеүҙең 80 йыллығы алдынан Стәрлебашта Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы тыл эшсәндәренең батырлығына арналған һәйкәл асылды. "Һәйкәл Раевка станцияһында ваҡытлыса лагерҙа булған ирҙәренә йәйәүләп ашарға алып барған Стәрлебаш ҡатын-ҡыҙҙары хөрмәтенә ҡуйылды. Был һәйкәл хеҙмәт һәм берҙәмлектең мөһимлеге тураһында иҫкә төшөрөп торһон, шулай уҡ киләсәк быуындарға районыбыҙҙың тарихи хәтерен һаҡлау һәм үҫтереү өсөн илһам бирһен", - тип яҙа Стәрлебаш районы хакимиәте башлығы Рөстәм Рахманғолов социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Өфөлә Башҡорт дәүләт медицина университеты клиникаһы - Трансляция медицинаһы институтының яңы корпусына нигеҙ ташы һалынды. Тантанала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты. "Бөгөн юғары технологиялы объектҡа нигеҙ һалабыҙ. Минеңсә, ул уҡытыу сифатына ла, квалификацияны күтәреүгә лә йоғонто яһар, иң мөһиме, заманса медицина тикшеренеүҙәре артыр һәм яҡшырыр", - тине ул үҙенең сығышында. Яңы корпус асылғандан һуң инновацион эшмәкәрлектә - молекуляр диагностикала, яңы медицина ҡоролмалары, яһалма ағзалар, ген һәм күҙәнәк терапияһы булдырыуҙа алға китеш көтөлә.

✓Өфө бодибилдеры Рөстәм Кәбиров Рәсәй кубогында алтын миҙал яуланы, тип хәбәр итә Мәскәүҙең Бодибилдинг федерацияһы. Спортсы дүртенсе тапҡыр ил чемпионы исеменә лайыҡ булды. Ульяновскиҙа ярыш 28 апрелгә тиклем бара. Рөстәм Кәбиров "Пляж бодибилдингы. Мастерҙар" категорияһында иң яҡшыһы тип танылды. "182 сантиметрға тиклем пляж бодибилдингы" номинацияһында - икенсе, "Атлетик бодибилдинг"та - өсөнсө, "Фитнес парҙар"ҙа беренсе урынды алды.

ҠЫҪҠАСА

# ПОЧТАЛЬОН КИЛӘ!

**Почтальондар Башҡортостан ветерандарына Еңеүҙең 80 йыллығына аҡсалата түләү таратасаҡ.** Рәсәй Почтаһының республика идаралығы матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына һәм инвалидтарына, элекке бәлиғ булмаған концлагерь һәм гетто тотҡондарына, шулай уҡ һуғышта ҡатнашыусыларҙың һәм инвалидтарҙың тол ҡатындарына 80 000 һум түләнәсәк. Тыл хеҙмәткәрҙәренә һәм элекке концлагерь һәм гетто тотҡондарына 55 000 һум күләмендә түләү ҡаралған. Еңеүҙең 80 йыллығы уңайынан Рәсәй Почтаһы бөтә ил буйынса 150 мең ветеранға аҡсалата түләү тарата. Йыл һайын почтальондар миллионлаған социаль әһәмиәтле түләүҙәр, пенсиялар һәм пособиелар килтерә, дәүләт һәм уның граждандары араһында ышаныслы бәйләүсе звено булып тора. Рәсәй почтаһы оло йәштәгеләргә ярҙам итеүгә йүнәлтелгән социаль проекттарҙа әүҙем ҡатнаша, быуындар араһында бәйләнеште һаҡларға ярҙам итә һәм хәстәрлек күрһәтә.

✔ **Башҡортостанда Милли мираҫтың дәүләт реестры тураһында закон ғәмәлгә инде.** Республика парламенты рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, Милли мираҫ дәүләт реестры - башҡа субъекттарҙың төбәк ҡануниәтендә аналогы булмаған үҙенсәлекле документ. Ул Башҡортостан Конституцияһының ата-бабалар хәтерен һаҡлау, быуындарҙың күсәгилешлеген һәм теләктәшлеген яҡлау тураһында положениеларын үҫтереүгә йүнәлтелгән. "Төйәгебеҙҙең үҙенсәлеге, милли колоритын билдәләгән тәбиғәт ҡомартҡылары, рухи, мәҙәни, тарихи мираҫ объекттары Милли мираҫтың дәүләт реестрына индерелә", - тине ул.

✔ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы күп балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тураһында республика законының 10-сы статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында закон проектын ҡарай.** Бәлиғ булмаған бала һәм инвалид бала тәрбиәләгән ишле ғаиләләргә ярҙам күрһәтеү планлаштырыла, тип хәбәр итә республика Ҡоролтайының матбуғат хеҙмәте. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, закон проекты халыҡтың ошо төркөмөнөң социаль яҡланғанлыҡ кимәлен күтәреүгә йүнәлтелгән. Мәсәлән, әгәр улар эш эҙләүҙә ҡыйынлыҡтар менән осрашһа, уларҙы ваҡытлыса эш менән тәьмин итергә тәҡдим ителә. Закон проектын апрель башында беренсе уҡыуҙа ҡарау планлаштырыла.

✔ **Киләһе йылдан башлап страховка пенсиялары йыл һайын ике тапҡыр - 1 февралдән һәм 1 апрелдән индексациялана.** Бындай саралар Рәсәй Хөкүмәте раҫлаған 2030 йылға тиклем өлкән быуын граждандары мәнфәғәтендәге ғәмәлдәр стратегияһында ҡаралған. Бынан тыш, стратегияла өлкән быуын граждандарының эшҡыуарлыҡ башланғыстарына ярҙам итеү, улар өсөн өйҙә, ваҡытлыса, һығылмалы һәм дистанцион мәшғүллек формаларын үҫтереү, хеҙмәт баҙарында дискриминацияға юл ҡуймау һәм пенсия йәшенән һуң эшен дауам итеү өсөн шарттар булдырырға тәҡдим ителә. Стратегияла шулай уҡ сирҙәрҙе иртәрәк иҫкәртеү, медицина ярҙамының сифатын күтәреү, оло йәштәгеләрҙең финанс белемен арттырыу һәм әүҙем тормошон оҙайтыу буйынса һәм башҡа саралар ҡаралған.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЫНДАЙ МАЙҘАНСЫҠ КӘРӘК!

**Республика Башлығы Радий Хәбиров менән осрашыуҙа Креатив индустрия вәкилдәре, эшҡыуарҙар Өфөлә гастротуризмды үҫтерергә һәм һөнәрселәр йорто төҙөргә тәҡдим иттеләр.**

Kumpan брендына нигеҙ һалыусы Михаил Кумпан рестораннар һәм кафелар эргәһендәге территорияларҙы файҙаланыу буйынса регламенттарҙы аныҡлау мәсьәләһенә иғтибарҙы йүнәлтеп, Башҡортостанда гастрономия туризмын үҫтереү мәсьәләһен күтәрҙе. Республика етәксеһе республиканың бизнес һәм төбәк власы органдарының үҙ-ара килешеп эш итеү йәһәтенән эшҡыуарҙар менән диалог алып барырға әҙер булыуын билдәләне. "Беҙ был пунктты тәүге "креатив индустрия сәғәттәре"нең көн тәртибенә индерәсәкбеҙ, - тине Радий Хәбиров. - Һеҙҙе, бизнес вәкилдәрен һәм муниципалитетты саҡырабыҙ. Йәйге террасалар һәм эргә-тирәләге биләмәләр темаһын бергәләп "кинәйтәсәкбеҙ". Был мөһим мәсьәлә, ул системалы ҡараш талап итә".

Ювелир Рафаэль Амантаев республикала Һөнәрселәр йортон, йәғни халыҡ художество оҫталарының күргәҙмәләр, презентациялар һәм оҫталыҡ дәрестәре үткәрә алырлыҡ майҙансығын булдырырға тәҡдим итте. Бындай киңлек традицион башҡорт һөнәрҙәрен популярлаштырыуҙан тыш, йәштәрҙе һәм туристарҙы ижади мөхиткә йәлеп итергә мөмкинлек бирер ине, тип билдәләне ул.

Халыҡ художество оҫталарының эшмәкәрлеген үҫтереү мәҙәни үҙенсәлек, шулай уҡ төбәк иҡтисады йәһәтенән мөһим әһәмиәткә эйә, тип ныҡык өҫтәнә алды Башҡортостан Башлығы. "Беҙ сувенирҙарҙың сифаты нисек күтәрелеүен, уларға ихтыяждың нисек артыуын күрәбеҙ. Һәм, әлбиттә, оҫталарға күргәҙмә өсөн генә түгел, ә тере, илһамландырыусы мөхит менән арауыҡ кәрәк. Беҙ булған объекттарҙы ҡарарға һәм был проект өсөн финанслау сығанағын билдәләргә тырышасаҡбыҙ", - тине Радий Хәбиров.

# УРТАҠЛАШЫР ТӘЖРИБӘ БАР!

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусында үткән "Граждан хирургтар өсөн хәрби-ялан хирургияһы" хирургия практикумында ҡатнашты. Волга буйы федераль округы төбәктәренән 250-нән ашыу хирург тәжрибә уртаҡлашырға һәм көнүҙәк мәсьәләләрҙе тикшерергә йыйылды.**

Сара башланыр алдынан Радий Хәбиров медицина ҡоралдары һәм техникаһы күргәҙмәһе менән танышты. Стратегик башланғыстар агентлығы проекттары директоры Сергей Стрижнев билдәләүенсә, Өфөнө конференцияны уҙғарыу урыны итеп һайлау төбәктә МХО-ла ҡатнашыусыларҙы дауалау һәм реабилитациялау йәһәтенән тупланған тәжрибәгә бәйле. Стратегик башланғыстар агентлығы МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеүгә етди иғтибар бүлә, һәм әлеге проект ошо йүнәлештә мөһим аҙым булып тора. Волга буйы федераль округы хәрби-граждандар медицинаһы компетенцияһы үҙәктәрен булдырыу буйынса проект ғәмәлгә ашырыла башлағандан һуң икенсе урында тора.

БДМУ ректоры Валентин Павлов Тактик медицина курсын асыу тураһында һөйләне, уның маҡсаты - Рәсәй граждандарын ярҙам күрһәтеүгә өйрәтеү. 2024 йылдың 1 сентябренән Башҡорт дәүләт медицина университетында Тактик медицина үҙәге эшләй. Бында ғәҙәттән тыш хәлдәрҙә ярҙам күрһәтергә өйрәтәләр. Дәрестәрҙе хәрби тәжрибәһе булған медицина хеҙмәткәрҙәре һәм белгестәр үткәрә."Булаҫаҡ табиптарҙы иң тәүҙә хәрби һәм тыныс шарттарҙа зыян күреүселәр менән профессиональ эшләргә (беренсе медицина ярҙамы күрһәтеү, уның хәлен тотороҡландырыу һәм артабанғы эвакуацияға әҙерләү) өйрәтәбеҙ. Студенттар жгут-турникеттар, бандаждар, окклюзион пластырҙар һаларға, яраларҙы бәйләргә һәм башҡа күнекмәләргә өйрәнә", - тине БДМУ ректоры.

# БӨЙӨК ЕҢЕҮ КӨНӨНДӘ...

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үткәргән оператив кәңәшмәлә баш ҡаланың Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығын байрам итеүгә нисек әҙерләнеүе хаҡында сығыш яһаны.**

Әлеге ваҡытта ҡала биләмәһендә 1998 ветеран, шул иҫәптән 40 Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы йәшәй. Еңеү көнө алдынан улар өсөн шәхси ҡотлау ойошторола. Һуғышта ҡатнашыусыларға, концлагерь тотҡондарына, блокадалы Ленинград һәм ҡамауҙа ҡалған Севастополь халҡына бүләк йыйылмалары тапшырыла.

Йәштән ашыу сараны үҙ эсенә алған дөйөм ҡала афишаһы булдырылған. Төп тантаналар 9 майға билдәләнгән. Ғәҙәттәгесә, был көндә Еңеү паркының мемориаль комплексында сәскә һалыу тантанаһы үтәсәк. Бынан һуң Октябрь проспектында хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең һәм хәрби техниканың, шулай уҡ "Үлемһеҙ полк"тың йөрөшө ойошторолаcаҡ.

Көндөҙгә 2-лә Рус драма театры алдындағы майҙанда "Бөйөк Еңеү мираҫы" концерт программаһы ойошторола, унда ҡаланың ижади коллективтары һәм мәҙәниәт учреждениелары артистары ҡатнаша. Асыҡ майҙансыҡтарҙа шулай уҡ байрам саралары, сәскә һалыу тантаналары, фронт бригадалары һәм ялан кухнялары ойошторола, 8-9 майҙа Ленин исемендәге майҙанда һәм Рус драма театрының бәләкәй майҙансығында Вадим Задорожный музейының хәрби техникаһы һәм шәхси коллекцияларҙан ретро-автомобилдәрҙең ваҡытлыса экспозицияһы асыла. 9 майҙа бында ялан кухняһы эше планлаштырылған. Бынан тыш, Өфөлә Ленин исемендәге майҙанда беренсе тапҡыр НАТО трофей техникаһының күсмә күргәҙмәһе асыла. Урамдар һәм майҙандар байрамса биҙәлә. Тематик яҡтан йәмәғәт транспорты һәм туҡталыш павильондары брендланған. Хәрби мемориалдар, ҡәберлектәр һәм һәйкәлдәр тейешле хәлгә килтерелә. Урам-юл селтәрен әҙерләү бара.

Ҡала пассажир транспорты, Ратмир Мәүлиев әйтеүенсә, 8-11 майҙа ял көндәре графигы буйынса эшләйәсәк. 9 майҙа тантаналы саралар үткәрелгән осорҙа Октябрь проспектында, Галле ҡалаһы исемендәге урамдан Кольскаяға тиклем, автотранспорт хәрәкәте сикләнә. Автобустар Комсомол һәм Рәсәй, Зорге һәм Блюхер урамдары буйлап йөрөй. 13-сө һәм 22-се троллейбустар эшен туҡтатасаҡ. Тулыраҡ мәғлүмәт өҫтәмә баҫыласаҡ.

9 майҙа Өфөнөң Октябрь проспектында, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең һәм хәрби техниканың тантаналы үтеүенән һуң, "Үлемһеҙ полк" дөйөм Рәсәй граждандыҡ-патриотик акцияһын уҙғарыу ҡуҙаллана. Быйыл акция ун икенсе тапҡыр үтә. Унда 200 меңгә яҡын кешенең ҡатнашыуы көтөлә. Маршруттың дөйөм оҙонлоғо яҡынса 6 км тәшкил итәсәк. Төп колоннаны формалаштырыу иртәнге 10-да башлана. 11 сәғәт тулыуға 5 минут ҡалғанда бөтә ҡатнашыусылар ҙа рус һәм башҡорт телдәрендә "Катюша" йырын башҡара. Сәғәт 11-ҙә дөйөм республика "тынлыҡ минуты"үтәсәк. 12-се 12 минутта колонна үҙенең маршын башлай.

## Н И М Ә ?  Ҡ А Й Ҙ А ?  Ҡ А С А Н ?

✔2026 йылда Бөтә Рәсәй Көслөләр спартакиадаһы Башҡортостанда ойошторола, тип белдерҙе Башҡортостан Дәүләт Йыйылышында уҙған спорт буйынса эксперт советы ултырышында республика Хөкүмәте вице-премьеры - спорт министры Руслан Хәбибов. "Карар Рәсәйҙең спорт министры Михаил Дегтярёв кимәлендә ҡабул ителде. Бөтә Рәсәй Көслөләр спартакиадаһы Башҡортостанда беренсе тапҡыр үткәрелә", - тип өҫтәне ул.

✔Мутлашыусылар, Телеграмға акцияларҙа ҡатнашырға тәҡдим иткән һылтанмалар ебәреп, аҡса урлай башлаған. Енәйәтселәр ысынға оҡшаған логотип ҡулланылған мутлашыусылар каналына яҙылырға күндерә. Хәйлә ҡорбанына 70 процентҡа тиклем кешбэк алырға мөмкинлек биргән акцияла ҡатнашырға тәҡдим ителәр. Һылтанма буйынса күскәндә банк клиенттарынан смс-хәбәрҙәрҙең кодын һорайҙар, ул шунда уҡ мутлашыусыларға элегә, тип белдерҙеләр ведомствола. Бынан алдараҡ Башҡортостан халҡының мутлашыусыларға 20 миллион һумдан ашыу аҡса күсереүе тураһында хәбәр ителгәйне.

✔Инвестиция һалымдарына ташлама иҫәбенә республикала 24 тораҡ пункты интернетҡа тоташтырылыр. "Был сара элемтә операторҙарына халҡы мең кешегә тиклем булған ауылдарҙа һәм мөһим автомобиль магистралдәрендә селтәрҙәрҙе модернизациялау сығымдарын кәметергә мөмкинлек бирә. Йәғни бизнес инфраструктура төҙөүгә сығымдарҙың бер өлөшөн табышҡа һалым буйынса түләүҙәрҙе кәметеү иҫәбенә ҡаплай ала", - тип аңлата министр Геннадий Разумикин.

✔Башҡортостанда "Атайсал" проекты үҙенең изге юлын дауам итә. Махсус хәрби операция шарттарында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров тәҡдиме менән 2021 йылда башланған проект ярҙамында мәңгелек кешегә һәм йәшләргә ауылға ярҙам күрһәтелде. 2025 йылдың тәүге декадаһында ғына "Атайсал" МХО яугирҙәренә ярҙамға, республика ауылдарын һәм ҡалаларын төҙөкләндереүгә йүнәлтелгән 2148 проекты берләштерҙе. Хәҙер Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығы айҡанлы проект сиктәрендә республикала яңы һәйкәлдәр асыла.

✔"Башҡортостан" полкы яугирҙары блиндажда мәсет төҙөгән. "МХО-ла доғалар һәм ышаныуһыҙ мөмкин түгел, тиҙәр егеттәр. Улар өсөн ошо бәләкәй генә йәшенеү урыны тыныслыҡ, хәүефһеҙлек һәм Хоҙайға яҡынраҡ булыу тигәнде аңлата", - тип хәбәр итә "Башҡорт батальоны" телеграм-каналы. Видеола мәсетте күрһәткән хәрби әйтеүенсә, фронтта Аллаһҡа ышанмаған яугирҙәр бик һирәк осрай. "Бер нисә ай элек беҙ ерҙе ҡаҙып, мәсет төҙөнөк. Яугирҙар килеп, намаҙ уҡыйҙар", - тип һөйләне ул.

УЙЛЫҒА - УЙ

# КЕШЕ АТЫНА МЕНГӘН...

## тиҙ төшәр



**Был әйтемдә һүҙ, ысынлап та, сит кеше атына менеү хаҡында барамы, әллә башҡа төрлө ярамаған ғәмәл башҡарыу тураһындамы? Ғөмүмән, "кеше атына менеү" һүҙбәйләнешен нисек аңларға була һуң? Бында дүрт аяҡлы атҡа менеү генә күҙ уңында тотоламы? Ошо хаҡта ентекләберәк фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**

Ленин исемендәге колхоздың беҙҙең 4-се һанлы Буранбай ауылы бригадаһында оҙаҡ йылдар һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Мәһәҙей олатай Ҡотоев (йәш йырсылар Марсель һәм Нух Ҡотоевтарҙың ҡартатаһы) бригадир булып эшләне. Унан һуң бригадир дилбегәһен атайым үҙ ҡулына алды. Йола буйынса яңы бригадирға хужалыҡ дилбегәһе генә түгел, хужаның төп транспорты булған екке атының да дилбегәһе, арба-санаһы, ҡамыт-ыңғырсағы күсә. Тап ошо көндәрҙә беҙ, яңы бригадир балалары, бер башҡа үҫеп киткән һымаҡ булдыҡ. Шулай булмай һуң: ауылыбыҙҙың ғына түгел, беҙҙең төбәктә йәшәүсе һәммә йәше-ҡартының күҙе ҡыҙып, көнләшеүҙән эсе янған туры юрға хәҙер беҙҙең ихатаға боролоп инә бит. Ғорурлығы ни тора! Башҡорт тоҡомло аттар үҙенең бауыр аҫтынан һыа булған был мәһәбәт туры юрғаны ҡайҙандыр ситтән, Дон яғынанмы, Орел яғынанмы ҙур хаҡҡа һатып алып килтергәйнеләр.

Беҙҙең кеүек танау аҫты кипмәгән малайҙар өсөн туры юрға, үәт, ат ине, исмаһам! Аттың да ниндәйе бит әле! Үҙен ҡыш санаға, йәй арбаға егеп алаһың да, дилбегәне бер генә ҡағыуың була, доҡойтоп сығып та китә. Туры юрға егелгән арба ауылдың башҡа барлыҡ ат-арбаларын ғына түгел, машина-тракторҙарын да үтеп китә, үҙебеҙсә әйткәндә, "тапап" үтә хатта. Соҡор-һарҡыуҙар ҙа, һикертмәләр ҙә юҡ уның өсөн, һәр урында ла бер тигеҙ юрта ғына бирә. Юрғаның һыбай йөрөүҙәге бер уңайлыҙлығы бар: ул да булһа, яйҙаҡ атланып алдыңмы, осалдың йәне ҡалмай, шуға күрә юрғаларға эйәр һалып менеп, өҙәнгеһенә баҫып, эйәр ҡашағаһына тотоноп, баҫып ҡына йөрөйһөң. Әгәр ҙә дилбегәне йомшағыраҡ ҡуллы берәрһе, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ тотһа, туры юрға менән йөрөү оло хәүефкә әүерелә.

Бер мәл турыны егеп, урманға бесәнгә барҙыҡ. Ҡайтыр саҡ еткәс, атайыбыҙ арбаға бесән, башҡа әйберҙәр һалып, дилбегә артына әсәйебеҙҙең бер үҙен ултыртып, ауылға ҡайтарып ебәрҙе. Беҙ атайҙың мотоциклына ултырып, һуңғараҡ ҡайттыҡ. Өйгә ҡайтыуыбыҙға күҙебеҙ дүрт булды: әсәйебеҙҙең ҡото алынған, арбанан барлыҡ әйберҙәр төшөп ҡалған, хатта һыңар бөртөк бесән дә ҡалмаған. Туры юрға дилбегә артында гүзәл заттың ултырыуын тойған да, ауыҙлығын тешләп тороп алып, машина тиҙлегендә ауылға табан елдергән.

Бригадир еккеһе туры юрға хаҡында оҙон тәфсиргә төшөп яҙыуымдың әтнәкәһе шунда: беҙҙең ауылға, беҙҙең ерлеккә өйрәнә алманы ул сит мал. Әллә күпме арбабыҙҙы ҡыйратты, ҡамыт-ыңғырсаҡты эшлектән сығарҙы туры юрға. Уны бер мәл хатта һабантуйҙа бәйгегә сығарып ҡараныҡ. Юҡ, тәүге әйләнешкә тиклем башҡа аттарҙы күпкә артта ҡалдырып юртып килде лә, һыртындағы малайға баш бирмәй, туранан-тураға елдерҙе туры юрға. Уны көтөүселәр ҙә көтөүгә менеп ҡараны. Ҡыҙыҡ итеп һөйләнеләр көтөүселәр. Туры юрғаны менеп сыҡтыңмы, көтөү ҡайғыһы китә, сөнки барлыҡ иғтибарыңды һәм иждиһатыңды туры юрғаның үҙенә бирергә кәрәк. Йә баш бирмәй, йә ҡасып китә, йә алып ҡаса, йә булмаһа, бер көн ныҡлы ҡулда тотоп көтөүҙә йөрөһәң, иртәгеһенә бөтөнләй йөрөргә эшкинмәй. Етмәһә, үҙенең буйы бейек булғас, атланыуы ҡыйын. Үҙенең һыртына тиҙ генә эйәр һуғып бара, арҡаһы әҙәм ҡарағыһыҙ булып сейләнеп бөтә. Мал ҡараусылар туры юрғаны ҡыш силос, сенаж, бесән ташыу өсөн дә егеп ҡараны. Ҡәүҙәһе ғифриттәй булһа ла, йөк тартыуға бөтөнләй яраҡһыҙ булып сыҡты туры юрға.

Беҙҙең башҡорт ысынбарлығы, ауыл тормошо өсөн яратылмағайны шул ул ат. Шуға күрәлерме, беҙ ул туры юрғаның мәнфәғәтен күрә алманыҡ, уға кем генә менмәһен, һыртынан тиҙ төштө, кем генә екмәһен, тиҙ туғарҙы. Ә бит ситтән ҡарап тороуға ниндәй күркәм, мөһабәт, һоҡланғыс, үҙенә ҡарап туйғыһыҙ мал ине туры юрға. Әкиәттәге арғымаҡ, дөлдөл кеүек үҙе, гүйә. Бәхтиһәң, туры юрға ситтән ҡарағанда ғына шулай күркәм һәм үҙенә ылыҡтырғыс ине. Ҡыҫҡаһы, хандар, батшалар ҡырандастарға егеп, юрғалатып, кәләп һалып йөрөр өсөн генә яратылған туры юрға беҙҙең милли тормошто, йәшәү рәүешебеҙҙе ҡабул итә алманы. Һыйырға эйәр нисек килешмәһә, беҙҙең тормош туры юрғаға ла яраманы.

Уны иң тәүҙә ҡырға һыпырып ебәрҙеләр. Тибенгә өйрәнмәгән меҫкен мал Уралтауҙың ҡырыҫ тәбиғәтен бик ауыр кисерҙе, буғай. Һуңынан ҡороҡлап тотоп, үҙен Сибайҙағы ит комбинатына тапшырҙылар. Туры юрғаның тәрҙемәи хәле ҡыҫҡаса ошолай булды.

...Юғарыла бригадир еккеһе туры юрға, мал хаҡында һүҙ барһа ла, уның хаҡында барған әңгәмәнән сығып шундай фәлсәфәүи һығымталар яһарға булалыр:

- сит кеше атына менгән, ысынлап та, тиҙ төшә, сөнки һәр кемдең үҙ аты, үҙ хәрәкәт сараһы булыуы мөһим, кеше аты һинең көнкүрешеңә, йолаларыңа яраҡлашмаған һәм һабан һөрә торған ат менән бәйгелә сапмайҙар, йәки - киреһенсә;

- ат һүҙенең икенсе бер мәғәнәһе "исем"де аңлата, шуға күрә башҡа кеше ирешкән уңыш, хеҙмәт емеше менән оҙаҡ йәшәп булмай, һәр кешенең үҙ атына, үҙ исеменә бәйле үҙенсәлекле тормош үҙәне, яҙмышы бар, башҡа кешенең яҙмышы менән дә йәшәп булмай, һәр ваҡыт кеше елкәһендә йәшәү ҙә мөмкин түгел, ҡасан да булһа, үҙеңсә йәшәй башларға мәжбүр булаһың;

- беҙҙең ил халҡына Европа прагматизмы, Америка индивидуализмы көсләп тағыла, йәғни европалылар һәм американлылар беҙгә үҙҙәренең атын йәки йәшәү рәүешен тәҡдим итә, әммә беҙҙең тәбиғәт был нормаларҙы ҡабул итмәй, прагматизм милли рухты үлтерә, индивидуализм милләтте, кешелекте эске яҡтан тарҡата...

Донъяла глобаллашыу, милләттәр араһында интеграция барған ошо заманда был әйтем бигерәк актуаль булып ҡала. Заман һынауын үҙ аты, үҙ йәшәү рәүеше, йола-традициялары булған дәүләттәр һәм милләттәр генә имен-аман үтеп сыға алаҫаҡ. Беҙҙең архаиклыҡты йөҙ-мең тапҡыр ғәйепләһендәр, былар барыһы ла үҙ асылыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу йөһәтенән эшләнә...

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙар түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## ИСКӘНДӘРОВА ХӘНИФӘ СИРАЖИ ҠЫҘЫ

Х.С. Искәндәрова - арҙаҡлы педагог, Социалистик Хеҙмәт Геройы. Ул 1928 йылдың 20 мартында Башҡорт АССР-ы Мәсәғүт кантонының (Башҡортостан Республикаһының Салауат районы) Яхъя ауылында тыуған. 1944 - 1949 йылдарҙа Мәсәғүт педагогия училищеһында, Өфө уҡытыусылар институтында белем ала. 1960 йылда Башҡорт дәүләт университетын тамамлай.

1942-1944 йылдарҙа колхоз иҫәпсеһе булып эшләй. 1949-1961 йылдарҙа - Салауат районының Арҡауыл, Мийшәгәр, Торналы, Малаяҙ мәктәптәренең биология уҡытыусыһы.

1962 йылдан 1991 йылға тиклем Салауат районының Арҡауыл урта мәктәбенең биология уҡытыусыһы.

Мәктәптә эшләү дәүерендә алдынғы уҡытыусы бай йыһазландырылған биология кабинеты ойоштора, йәш натуралистар түңәрәге алып бара, тәжрибә участкаһы менән етәкселек итә. 1967-1974 йылдарҙа үҫтереп алған уңыш өсөн мәктәп СССР Халыҡ ҡаҙаныштары күргәҙмәһенең миҙалдары менән бүләкләнә. Хәнифә Искәндәрованың тәжрибәһе республикала таратыуға тәҡдим ителә һәм артабан күп ерҙә киң ҡулланыла.

СССР-ҙың VIII (1970-1974) һәм IX (1974-1979) саҡырылыш Юғары Советы депутаты булғанда Хәнифә Сиражи ҡыҙы һайлаусылар наказдарын тулыһынса үтәүгә күп көс һала. Үҙ һайлау округы буйынса ғына түгел, бөтөн республикала төрлө халыҡ хужалығы объекттары, шул иҫәптән мәктәптәр, балалар баҡсалары, дауаханалар төҙөү, шулай уҡ күперҙәр һәм юлдар һалыу, уларҙы асфальтлау, ауылдарға һәм ҡасабаларға газ үткәреү мәсьәләре депутаттың булышлығы менән ыңғай хәл ителә.

Х.С. Искәндәрова - КПСС-тың XXIV съезы һәм Уҡытыусыларҙың беренсе Бөтә Союз съезы делегаты. Ул 15 йыл дауамында Совет ҡатын-ҡыҙҙар комитетында ағза була.

Хаҡлы ялға сыҡҡас та Хәнифә Сиражи ҡыҙы ауылдың һәм районның йәмәғәт тормошонда әүҙем ҡатнаша. 2020 йылдың 4 сентябрендә вафат була.

**Маҡтаулы исемдәре:** Социалистик Хеҙмәт Геройы (1968); РСФСР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы (1967); СССР-ҙың халыҡ уҡытыусыһы (1982); Ленин ордены һәм Алтын Йондоҙ кавалеры (1968). Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумының Маҡтау грамотаһы (1988).

Киләсәк быуынға белем биреүҙәге юғары ҡаҙаныштары, хеҙмәтендәге уңыштары, үҙ бурыстарына намыҫ менән ҡарағаны һәм район данын юғарыраҡ күтәреүгә индергән өлөшө өсөн Хәнифә Сиражи ҡыҙы Искәндәроваға "Салауат районының почётлы гражданы" тигән маҡтаулы исем бирелгән.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Башҡортостанда май байрамдары айҡанлы ҡала яны поездары составында вагондар һаны арттырылды. Республиканың Транспорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Өфөнән Ырымбурға Күмертау аша һәм кирегә барыусы маршруттар буйынса составҡа өстән алып алтыға тиклем өҫтәмә вагон тағылған. Был поездар Өфөнән, 07:43 сәғәттә сығып, Күмертауға - 11:43, Ырымбурға 13.58 сәғәттә барып етә. Ырымбурҙан состав 15:10 сәғәттә ҡуҙғала һәм Күмертауҙа - 17:24, ә Өфөлә 21:30 сәғәттә була.

✔Өфөлә балалар баҡсалары тәрбиәләнеүселәре өсөн бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына һәм Башҡортостанда Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына арнаған итеү йылына арналған телдән полилингваль олимпиада уҙҙы. Сара 32-се балалар баҡсаһы майҙансығында ойошторолдо. 22 мәктәпкәсә учреждениенан бөтәһе 26 бала ҡатнашты. Улар тыуған һәм сит телдәрҙә "Минең геройым", "Герой ҡала", "Өфө - хеҙмәт батырлығы ҡалаһы" темаларына ижади проекттар тәҡдим итте. Балалар халыҡ алдында сығыш яһау оҫталығын күрһәтте, үҙҙәренең герой олатайҙары, Мәскәү, Севастополь герой-ҡалалар һәм Өфө хаҡында һөйләне.

✔4 майҙа баш ҡалабыҙҙа "1 май" мәҙәниәт һәм ял паркында 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 80 йыллығына арналған "Өфө - дуҫлыҡ һәм берҙәмлек ҡалаһы" милли мәҙәниәттәр фестивале үтте. Программала күргәҙмәләр, оҫталыҡ дәрестәре, милли спорт төрҙәре буйынса күрһәтмә сығыштар, шулай уҡ ҡаланың ижади коллективтары ҡатнашлығында байрам концерты ҡаралғайны. Байрамдың кульминацияны булып традицион "Дуҫлыҡ әйлән-бәйләне"н үткәреү һәм фонтан асыу торҙо.

✔Өфөнөң Черниковка биҫтәһендә "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" федераль программаһы сиктәрендә ҡояш системаһы макетын эшләргә йыйынала. Был хаҡта Орджоникидзе районы башлығы Рөстәм Хәмитов хәбәр итә. Уның һүҙҙәренсә, Космонавтар урамындағы боролош ҡулсаһы участкаһын төҙөкләндереү проекты газондар, сәскә түтәлдәрен эшләүҙе һәм ҡояш системаһы планеталары моделдәрен ҡуйыуҙы күҙ уңында тота. "Бындай проекттар урынды йәмләндереп кенә ҡалмай, ә ҡала халҡына ял итеү өсөн уңайлы мөхит булдыра", - тип яҙа ул социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Күк күгәрсен, йорт күгәрсене
(Сизый голубь)



Күгәрсендәр төркөмөнә ҡараған иң ҙур төркөм. Аяҡ араһында йөрөгән ҡош булғанға күрәләр, беҙ уларға иғтибарлап ҡарағаныбыҙ юҡ. Ә былай ул бик матур ҡош, ҙур ғына төркөмгә тупланып, баш осонда түңәрәктәр яһап ҙур тиҙлектә башҡа бер ҡош та оса алмай.

Күгел йем-көлһыу төҫтә, муйыны йәшкелт, ҡыҙғылт булып ялтырап тора. Тәпәйҙәре - ҡыҙыл. Тауышы ла барыһына ла билдәле. Был ата күгәрсен "йырлай". Ҡырағай күгәрсендәр Африка һәм Евразияның айырым райондарында йәшәй. Ә бына уның синантроп (ҡала) формаһы Ерҙең көнсығыш һәм көнбайыш ярымшарҙарының халыҡ йәшәгән бөтөн урынында ла бар. Башҡортостанда ҡырағай күгәрсен Ағиҙелдең ҡаялы ярҙарында һәм Көньяҡ Урал тауҙарында оя ҡора.

Ҡала күгәрсене февралдән көҙгә тиклем үрсей. Ҡайһылары саҫҡау ҡышҡы һыуыҡтарҙа ла бала сығара. Уртаса алғанда, һәр пар йылына 2-5 тапҡыр бала сығара.

Оялары тәҙрә баштарында, кәрниздәрҙә һ.б урындарҙа. 2-4 йомортҡа һала. 17-19 көндән улар сыға ла башлай. Уларға 2 аҙна булғас, инә ҡош тағы ла йомортҡа һала. Бәпкәләрҙе ата күгәрсен менән инә күгәрсен ҡош "һөтө" менән йыш-йыш туҡландыра. 5-7 айлыҡ йәш ҡоштар үҙҙәре лә үрсем биргә башлай.

Ҡырағай үсемлектәрҙең орлоғо, иген менән туҡлана. Йорт күгәрсендәре ҙур тупҡа тупланып та, яңғыҙ ҙа йәшәй ала. Йыш ҡына ҡырға сығып, иген баҫыуҙарына барып туйынып ҡайта. Иген һаҡланған элеваторҙар, мал көткән аҙбарҙар ҙа уларҙың яратҡан урыны. Ҡала күгәрсендәре шулай уҡ сүп-сар түгелгән ерҙәрҙә ашай, уларҙы ҡала халҡы үҙе лә ашатып, өйрәтеп бөткән. Парктарҙа үҫкән алмаларҙы ла ашай, шулай ҙа "хәйерселәп" туҡланыу рәүешен улар өҫтөнөрәк күрә. Йәшәгән урынын алыштырырға тырышмай. Парҙы ла ғүмерлеккә һайлай.

Күгәрсендәр кеше сәләмәтлеге өсөн хәүефле булған сирҙәрҙе тарата, мәҫәлән, орнитоза, хламидоза һ.б. Скульптураларҙы, биналарҙы бысрата. Самолеттар өсөн дә ҡурҡыныс тыуҙыра. Йорт күгәрсендәренең бөтөн тоҡомдары ла ошо күк күгәрсендән барлыҡҡа килгән.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ТЕЛ ТӨБӨ...

**Боронғо дини китаптарҙа әҙәми заттарҙың эштән, хеҙмәттән азат булыуы хаҡында сюжеттар бар. Мәҫәлән, йәһүдтәрҙең Изге Яҙмаһында, йәғни Иҫке Ғәһед (Ветхий Завет) китабында Әҙәм һәм уның ҡатыны Һауаның, ҡылған гонаһтарына ғәҙел яза рәүешендә, ожмах баҡсаһынан ҡыуылыуы хаҡында бәйән ителә. Ошоға тиклем кешеләрҙең Тәү атаһы һәм Тәү инәһе башҡа бер тереклектәрҙән бер нисек тә айырылмаған, ҡыҫҡаса әйткәндә, ерҙәге тормошта көн иткән, сөнки уларҙың "күҙҙәре асылмаған", йәғни, донъяны ла, үҙ-үҙҙәрен дә танып белеүҙән мәхрүм булған. Ошо боронғо риүәйәткә ярашлы, Танып белеү ағасының емешен - алмаһын ашағас ҡына уларҙың аңдары асылған, имеш. Хоҙай Тәғәлә ошо ике кеше затына иң ҡаты язаһын бирә: Әҙәм менән Һауа үлемһеҙлектән мәхрүм ителә, улар артабан үҙ көндәрен үҙҙәре күрергә тейеш була. Әҙәм, маңлай тирен түгеп, ризыҡ тупларға, Һауа һыҙлана-һыҙлана бала табырға дусар ителә.**

# ӘҘӘМ АСЫЛЫ - ХЕҘМӘТТӘ

## (Фәлсәфәүи эссе)



Әлбиттә, кешелектең иң боронғо риүәйәттәре, легендалары, дини яҙмалары үтә образлы итеп бирелә, ә беҙ ошо әкиәти-фантастик образдар артында тәү кешелектең ысынбарлығын тойомларға тейешбеҙ. Ә был ысынбарлыҡ, бер яҡтан, маҡсатлы хеҙмәттән, ейер ризыҡ табыу, торлаҡ төҙөү, кейем-һалым тегеү менән бәйле ғәмәлдәрҙән - эштәрҙән, икенсе яҡтан, был нисек кенә сәйер тойолмаһын, ир менән ҡатын мөхәббәтенән, ғаилә ҡороп йәшәүҙән, ерҙә үҙ нәҫелен ҡалдырыу маҡсатында бала табыуҙан хасил була. Шуға күрә XIX быуат философы Фридрих Энгельстың "Хеҙмәт кешенең үҙен хасил иткән" тигән фаразы менән тулыһынса килешеп була.

Ошо хаҡта уйланғанда бер ҡыҙыҡлы ғына һорау тыуа: Әҙәм ғәләйһиәссәләм донъяны танып белергә баҙнат иткәнә өсөн үҙен дә, үҙенең тоҡомон да ауыр хеҙмәткә дусар итә, әммә хеҙмәти ғәмәлдәрҙе башҡарыу өсөн барса предметтарҙың, үҫемлектәрҙең, тере заттарҙың, күренештәрҙең, хәлваҡиғаларҙың сифаттарын, асылын белеү кәрәк була бит. Ә ошо дини тәғлимәт парадоксын дөрөҫ аңлар өсөн танып белеү менән хеҙмәттең урындарын алмаштырыу фарыз: әҙәми заттарға илаһилыҡ, йәғни барса нәмәнең асылын белә алыу, ***әлегә тиклем тәбиғәттә булмаған әйберҙәрҙе уйлап табыу һәләте улар донъяға яратылғанда уҡ бирелмәгәс, кеше бары тик хеҙмәти процестар барышында ғына донъяны таный башлай. Тимәк, хеҙмәт - беренсел, танып белеү икенсел икәнлеге көн кеүек асыҡ.*** Ысынлап та, тәү тормош эпохаһы кешеләре донъяға яңы тыуған сабыйҙарҙы хәтерләтә кеүек: философтар һуңғыларының аң нигеҙен tabula rasa, йәғни буш, яҙыуһыҙ таҡта, тип нарыҡлаған. Эйе, әҙәм балаһы донъяның ни икәнен аңлағансы, әйбер-предметтарҙың сифат-үҙенсәлектәрен белә башлағансы байтаҡ ваҡыт талап ителә.

Йәнә шуныһы ла бик мөһимдер: маҡсатлы хеҙмәти ғәмәлдәр кешелек донъяһы башынан бирле күмәк көс ҡулланыуҙы, коллектив ынтылышты талап итә. Ә был айырым индивидтарҙың бер-береһе менән аңлаша, иҫәпләшә, килешә алыуы менән бермә-бер бәйле. ***Хеҙмәти аралашыу өсөн ым-хәрәкәт, эмоциялар ғына етмәй, шуға күрә кешеләр тереклек донъяһында тәү башлап һүҙ ҡулланыу кеүек абстракт ғәмәлгә эйә була. Тел нигеҙен - һүҙҙәрҙе хеҙмәт тыуҙыра. Тәүҙә маҡсатлы хеҙмәт, унан һуң тел кешеләрҙе хайуани донъя көн итмешенән күпкә өҫтөрәк торған йәмғиәти йәшәйешкә алып килә.***

Һүҙ тигәс, "хеҙмәт" тигән һүҙҙе лә аңлатма биреп китәйек. Был һүҙ телебеҙгә ғәрәп теленән ингән, ғәрәпсә "хидмат" һүҙе - эш башҡарыуҙы, эшмәкәрлекте, хәрби хеҙмәтте аңлата. Әйткәндәй, шул уҡ хеҙмәт итеүҙе аңлатҡан рус һүҙҙәре "работа" һәм "служба" ғәрәп телендәге "әмәл", йәғни "ғәмәл" һүҙенә тап килә. Шуныһы ла бик ҡыҙыҡ, телебеҙҙә ғәмәл һүҙенән башҡа "әмәл", "әмәлен табыу" һүҙҙәре йыш ҡулланыла, былары төп мәғәнәһе буйынса эш алымын, эш итеү сараһын белдерә. "Эш" һүҙенә килгәндә, уның хасил ителешен кеше организмының билдәле бер физиологик торошо менән аңлатып була. Ауыр эш ғәмәлдәрен башҡарғанда кешенең һулышы, тын алышы йышая һәм тәрәнәйә, үпкә төбөнән уҡ сыҡҡан тын (һауа ағымы) "heh" йә иһә "hеш" кеүегерәк тауыш сығара. Йәнә "эш" һүҙен "аш" тиеү менән дә бәйләп аңлатырға семантик (мәғәнәүи) ерлек бар: иң әүәл эш ашамлыҡ табыу маҡсатында башҡарыла, "Кем эшләмәй - шул ашамай" тигән әйтем тикте юҡтан килеп сыҡмағандыр ул.

Уҡыусыларыбыҙ иғтибарын "хеҙмәт", "эш" тигәндең, рус телендәге "служба", "работа" һәм "труд" һүҙҙәренә тап килеп, әүәл ниндәй мәғәнәүи төҫмөрләнештәргә эйә булыуына йүнәлтеү урынлы булыр. "Служба" һүҙенең ялланып эшләү, хужаға хеҙмәт итеү, кемдәлер хеҙмәтләндереү, хәрби бурыстарҙы үтәү кеүек мәғәнәләре билдәле, ә инде "слуга", "обслуга" атамалары ялсы, холоп, байға, хужаһына буйһоноусы ҡол дәрәжәһендәге кешеләрҙе ҡарата ҡулланылған.

Ғәжәп, русса "работа" һүҙенең дә тәү мәғәнәһе үтә негатив төшөнсә менән бәйле, "раб" тамыры быны асыҡтан-асыҡ күрһәтеп тора. Боронғо славян телдәрендә "orbota", "orbъ" һүҙҙәре ирекһеҙ эште, ҡоллоҡто белдергән, ул унан да боронғораҡ һинд-европа телендәге "orbhos" һүҙенә тамырҙаш, быныһы инде "хужаға, башҡа кешегә хеҙмәт итеү" мәғәнәһенә тап килә. В.И. Далдең аңлатмалы һүҙлегендә лә ошо һүҙ тап "раб" статьяһы сиктәрендә бирелә. Боронғо славяндар үтә ауыр, үҙ иркенән тыш башҡарылған эште генә "работа" тип нарыҡлаған, йәғни ул ҡолдар башҡарған ғәмәлдәргә ҡайтып ҡала. Рус крәҫтиәндәренең үҙҙәренең хужаһына - помещикҡа мәжбүри эшләүе барщина тип аталған, уларҙың үҙ хужалыҡтарында эшләүе "трудиться" тигән һүҙ менән билдәләнһә, барщина өсөн икенсе бер һүҙ - "робить" ҡулланылған. Әйткәндәй, рус телендә "роба" тигән һүҙ ауыр, бысраҡ эшкә кейә торған, тупаҫ туҡыманан (брезент, парусина - елкән туҡымаһы) тегелгән эш кейемен аңлата. Крәҫтиән тормошонда ер эше иң ауырҙарҙан һаналғаны билдәле: ер һөрөп, ашлыҡ сәсеп, уны урып алыусыны рустар тикте юҡҡа ғына "хлебороб" тип атамағандыр ул.

Был яҙмамда эш, хеҙмәт төшөнсәһе менән бәйле тағы бер рус һүҙенең мәғәнәһен аныҡлап китеү яҙыҡ булмаҫ. "Труд" тигәнебеҙ ҙә үҙе бер ауыр нәмә булып сыға бит! Иң әүәле ошо һүҙ мәжбүри эште - ҡол хеҙмәтен аңлатҡан икән дәбаһа. Рус теленең тәүге аңлатмалы һүҙлеген төҙөгән В.И. Даль "труд" һүҙенең ауырлыҡты ("трудный"), сир-ауыыуҙы, хатта ки ғазап сигеүҙе аңлатыуы хаҡында яҙа. Бына ни ғәжәп: рустар уңыш йыйыуҙы ла "страда" тип атай, был һүҙ үҙе ошо уҡ мәғәнәләге "страдание", йәғни ғазап сигеү менән типә-тиң икән. Иҫ китмәле: ҡатынҡыҙҙың бала табыуы, ошо мәлдә ауыртыныуы ла ошо уҡ "труд" һүҙе менән нарыҡланған - рус телендә ҡасандыр "родильница в труде" тигән һүҙбәйләнеш булыуы билдәле.

**Әлбиттә, эш, хеҙмәт итеүгә ҡараған ғәмәл-күренештәрҙе бары тик кире, негатив төшөнсәләр менән бәйләү урынлы булмаҫ ине. Ни тиһәң дә, әҙәм балалары тормошон хеҙмәттән башҡа күҙ алдына ла килтереү мөмкин түгел. Хеҙмәте барҙың хөрмәте лә бар икәнен беләбеҙ. Эйе, хеҙмәт кешенән тир түгеүҙе, төрлө ауырлыҡтарҙы үтеп сыға алыуҙы талап итә. Ғаиләңә, халҡыңа, илеңә тоғро хеҙмәт итеүҙән дә ҡиммәтлерәк ни бар икән? Арып-талып эшләмәһәк, иген икмәһәк, йәшелсә-емеш үҫтермәһәк, мал ғына түгел, бала баҡмаһаҡ - йәшәйешебеҙҙән ниндәй ләззәт табыр инек? Аллаһыбыҙға шөкөр, бала сағыбыҙҙан бирле илебеҙҙә хеҙмәткә дан йырланды, үҙебеҙ ҙә тыуыш хеҙмәт эйәләре булып үҫтек. Заманында Өфө радиоһынан йыш тапшырылған бер йыр әле лә ҡолаҡтарыбыҙҙа яңғырап торғандай:**

***"Намыҫ менән эшләп үҫкән егет***
***Дандар алды баҫыу ҡырында.***
***Күкрәгендә балҡый алтын йондоҙ,***
***Йыр йырлайыҡ батыр турында".***

**Эйе, тап шулай: хеҙмәтебеҙ менән данлыбыҙ, йәмәғәт. Хәләл ғәмәлдәребеҙ менән ейер ризыҡыбыҙҙы табабыҙ. Шәп әйтелгән бит: икмәк булһа - йыр ҙа булыр! Йырлап эшләйек, йырлап йәшәйек әле, туғандар.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

✓ Яуҙарҙа ҡаһарманлыҡ күрһәткән батырҙарға, дипломатия өлкәһендә үҙҙәрен танытҡан илселәргә, ғөмүмән, ил алдындағы күренекле хеҙмәттәре өсөн ил ағаһы булырҙай башҡорттарға ла шәхси тарханлыҡ дәрәжәләре бирелер булған.



ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Граф В.А. Перовский**

**(1851 - 1857 йылдарҙа икенсе тапҡыр губернатор булған)**

Башҡорт полктарын бойошторуоуға Ырымбурҙа күп ваҡыттар буйына бер эшһеҙ йәшәгән күп кенә регуляр офицерҙар йәлеп ителә. Яҡшы дворян ғаиләләренән сыҡҡанлыҡтан, улар Ырымбур йәмғиәтендә урын ала, шуға күрә ул йылдан йыл үҫә барҙы.

Граф Перовский, казак ғәскәре исемен йөрөткән башҡорт халҡын күтәрергә теләп, Ырымбур казак ғәскәренә бик тә вайымһыҙ ҡарай һәм, һис йәшереп тормайынса, ошо ғәскәрҙе өнәмәүе хаҡында белдерә. 1840 йылда ғәскәр тураһында яңы положение ҡабул ителгәндән һуң уға Ырымбур казактарының хәл-торошонда күп нәмә оҡшамай. Перовский тарафынан ҡаты саралар ҡулланып индерелгән йәмәғәти ер эшкәртеү, уның проектына ярашлы, ғәскәргә 100 мең һумға тиклем килем килтерергә тейеш булһа ла, ул бер нәмә лә бирмәй, эштәр бары күҙ буяу өсөн генә башҡарыла. Казактар йәмәғәт ерҙәрендә сәсеү эштәрен илке-һалҡы ғына башҡара, улар күҙәтеү аҫтында тотолмай, күҙәтеүселәргә положениела ҡаралған түләүҙәр бирелмәй, сөнки генерал Обручев казактар эше иҫәбенә тик күҙәтеүселәргә генә аҡса түләүҙе ғәҙелһеҙлек тип таба, бит ғәскәрҙәге башҡа төрлө хеҙмәттәр өсөн түләү бик тә аҙ була, йә иһә бөтөнләйгә түләнмәй. Былар барыһы ла ғәскәр өсөн йәмәғәти ер эшкәртеүҙең файҙаһыҙ булыуы хаҡындағы фекергә нигеҙ була, ғәскәр начальствоһының ошо хаҡтағы юллауы, эллекке губернатор Обручев тарафынан хупланған хәлдә хәрби министерлыҡ ҡарауын көтә.

Икенсе яҡтан, ғәскәргә бирелгән миллионлаған десятина ерҙәрҙән һәм ғәскәр урмандарынан шулай уҡ бер ниндәй ҙә килем алынмай, ә казактар үҙҙәре лә ошо самаған тыш артыҡ булған ерҙәр менән файҙаланмай. Граф Перовский быларҙың барыһын да торғонлоҡтан һәм эшҡыуарлыҡ булмауынан күрә. Ошо яҡтан ул Ырымбур казактарын башҡорттарҙан түбәнерәк итеп һанай һәм һуңғыларын дәүләттең көнсығыш сиктәрен һаҡлауҙа өмөтлөрәк итеп күрә, тап шуның өсөн башҡорттарға йөкмәтелгән бурыстарҙың бер өлөшөн Ырымбур ғәскәренә күсерә. Уның юлламаһы буйынса батша ғали йәнәптәре Ырымбур ғәскәрендә Ырымбурҙан Көнбайыш Себергә тиклем почта ташыу эштәрен ғәскәр капиталы иҫәбенә башҡарыу, шул уҡ капиталдан яңы Һырдарья линияһын төҙөү өсөн бер тапҡыр 100 мең һум көмөш аҡса бүлеү хаҡында бойороҡ бирә, сөнки элегерәк уны ҡаҙна иҫәбенә тотоу бик оҙаҡ ваҡыт хәл ителмәй килә.

Граф Перовскийҙың төбәк менән беренсе һәм икенсе идара итеүе осорондағы реформаларҙан казактар өсөн файҙалы булғандарынан түбәндәгеләрен атарға була.

1) Казактарҙы эске станицаларҙан линияға күсереү һөҙөмтәһендә Ырымбур ғәскәре бер территорияны хасил итә, ә был уларҙы тәбиғи дошмандары булған ҡырғыҙҙарға (ҡаҙаҡтарға. **- Тәрж. иҫк.**) яҡынайта; казактар һуңғыларының бар һыҙаттарын яҡындан күреп белә башлаһа, тегеләре лә, үҙ сиратында, линияға нисектер һөжүм итеү, рустарҙы әсиргә алыу һәм бөтөн рус халҡын Волга аръяғына ҡыҫырыҡлап сығарыу тураһында фекер йөрөтөп тә булмаясағына инана. Рустарҙың ҡасандыр Волга аръяғында ғына йәшәгәндәре хаҡында ҡаҙаҡтар һәм башҡорттар яҡшы хәтерләй, шулай уҡ Хива һәм Бохара хандары ла үҙҙәренең йоғонтоһон Ҡаҙанға тиклем киңәйтеү тураһында хыяллана. Әлбиттә, был хаталы ниәт була, һәм 70-се йылдарҙың уртаһында һуғыш башлау уларҙың үҙаллылығының бөтөүе һәм рус батшаһына буйһондоролоу менән тамамлана. Ырымбур казактарын бер ергә күсереп туплау хаҡындағы фекер тәүҙән үк граф Перовскийҙыҡы булмай: был хаҡта унан алдараҡ идара иткән граф Сухтелен белдерә, әммә Перовскийға уны киңәйтеү, үҫтереү һәм ғәмәлгә ашыра башлау насип була.

2) Граф Перовский, Дон ғәскәре өлгөһөндә, Ырымбур ғәскәрендә сауҙа йәмғиәтен булдыра, ә был ғәскәр капиталына нигеҙ һала. Хеҙмәт итергә теләмәгән казак хәрби хеҙмәттән азат ителеү өсөн 30 йыл дауамында йылына 200-шәр һум (58 һум көмөш аҡса) түләргә тейеш була; тәүге осорҙа 500 кешенән йыйылған дөйөм сумма 100 мең һумға тиклем етә, һәм был аҡса йыл һайын хәрби капитал иҫәбенә күсерелә. Шунда уҡ казак сословиеһына күсерелгәндәрҙән төҙөлгән дүрт линия батальонын жалование һәм провиант менән тәьмин итеү өсөн тәғәйенләнгән аҡсалар һаҡлана. Хәрби капитал башҡа бер сығымдарҙы ҡаплар өсөн тотонолмай тиерлек - ул йәй айҙарында кордон һағын тотоу өсөн ҡулланыуға тәғәйенләнгән була, әммә линияла һаҡ тотоу рәүеше үҙгәрә - һаҡсы казактар линиянан 100 саҡрымдан алыҫ булмаған станицаларҙан алына, улар үҙ хужалыҡтары иҫәбенә йәшәй. Бары тик ғәскәр сығанаҡтарынан тупланған капитал ҡаҙнаға почта трактын тотоу, Һырдарья линияһының тәүге сығымдарын ҡаплау мөмкинлеген бирә. Һуңғы ваҡытта ул дөйөм ғәскәр капиталы менән берләштерелә, быныһы аҙыраҡ булғанлыҡтан, ғәскәрҙең башҡа бер ихтыяждары өсөн тотонола.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!

# БАШҠОРТ ТАРХАНДАРЫ ҺӘМ ДВОРЯНДАРЫ



Уҡымышлы башҡорт тархандарын батша хөкүмәте ил, халыҡ-ара дипломатик бәйләнештәрҙә лә файҙаланған. Рәсәй өсөн яуҙарҙа ҡаһарманлыҡ күрһәткән батырҙарға, дипломатия өлкәһендә үҙҙәрен танытҡан илселәргә, ғөмүмән, ил алдындағы күренекле хеҙмәттәре өсөн ил ағаһы булырҙай башҡорттарға ла тора-бара шәхси тарханлыҡ дәрәжәләре бирелер булған. Мәҫәлән, рус көнсығыш белгесе В. В. Вельяминов-Зерновтың "Источники для изучения тарханства, жалованного башкирам русскими государями" тигән хеҙмәтенән күренеүенсә лә, XVI- XVIII быуаттарҙа Рәсәйҙе яҡлап төрлө һуғыштарҙа, хәрби походтарҙа ҡатнашып батырлыҡтар күрһәткән башҡорттарға тархан исеме бирелеүенең ишәйә барғаны, был һандың йөҙәрләп иҫәпләнгәне күҙәтелә. "Тарханы или служилые башкиры в царстве царя Ивана Васильевича многие службы показывали при взятии Казани и бывали с русскими войсками в походах лифляндских... - тип яҙа В. В. Вельяминов-Зернов. - Многие тарханы получили эти звания за героизм в Крымском, Азовском походах" (Приложение к 4-му тому "Записок император-ской Академии наук", № 6, Спб., 1864, 9, 20-се биттәр).

Бына был хеҙмәттән тағы бер нисә күсермә: "В тарханство в 1777 г. по донесению Уфимской провинциальной канцелярии в 1768 г. записаны:

Указы из канцелярии Оренбургской экспедиции Уфим-скому уезду тарханам и башкирам 1734 г. 24 декабря Ногайской дороги Бурзянской волости:

1. Тархану Алдарбаю Исекееву, детям его, племянникам и внучатам - за бытие им Алдаром в Крымском и Азовском походах, и за три полученные им раны, также и за убийство сразившего с ним черкашинина, за поимку языка крымчанина и объявление Его Величеству блаженной и вечные славы достойных памяти государю императору Петру Первому".

Тарихсы Ирек Аҡманов иҫәпләп сығарған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, XVII быуатта башҡорттар араһынан 155 кеше тархан дәрәжәһен алған.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ.**
**"Башҡорт халҡының рухи донъяһы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Ижтимағи мөнәсәбәттәр, ҡәбилә һәм ырыу бүлексәләре

### Ҡаҙан даруғаһы олоҫтары

1. Һарыш-Ҡыпсаҡ - Ыҡ һәм Сөн буйында; ҙур яландар, имән урманы, ҡара урмандар аҙ.
2. Тамъян - Ыҡ буйында.
3. Иректе - Ыҡ буйында.
4. Түңгәүер - Ыҡ буйында.
5. Бөрйән - Ыҡ буйында.
6. Ҡыпсаҡ - Ыҡ һәм Сөн буйында.
7. Аская - Ыҡ буйында.
8. Күрпәс-Табын - Ыҡ буйында.
9. Һеңрән - Ыҡ буйында.
10. Табын - Ыҡ буйында, Ҡаҙан даруғаһының үрҙә атап үтелгән олоҫтарында төрлө даруға һәм олоҫ башҡорттары йәшәй.
11. Ҡаршин - Ҡармасан буйында; яландар, имән урмандары.
12. Дыуанай - Сәрмәсән буйында; ялан-ҡырҙар, имән урмандары.
13. Шемшидин - Евбаза буйында; урман-ҡырҙар.
14. Эске йылан - Ағиҙел һәм Баҙы йылғалары буйында; урман-яландар.
15. Гәрәй - Ағиҙел йылғаһы буйында; ике яр буйлап урман, ялан.
16. Йәлдәк - Ҡояш буйында; яландар, имән урманы.
17. Йәнәй - Ыҡ һәм Ағиҙел йылғалары, Кама йылғаһы аръяғы буйында; урман, ялан.
18. Тышҡы Йылан - Баҙы һәм Ыҡ түбәләҫтәре һәм башҡа йылғалар буйында; урман, яландар.
19. Ҡырғыҙ - Сөн һәм башҡа йылғалар буйында; урман, ҡырҙар.
20. Байлар - Кама, Иж, Минзәлә (Мейзеле) һәм башҡа йылғалар буйында; урман-яландар.
21. Ғәйнә - Ыҡ буйында.

### Уса даруғаһы олоҫтары

1. Таҙлар - Ҡыҙғына (Кизгеня) йылғаһы буйында; имән урманы һәм яландар.
2. Уран - Буй йылғаһы буйында; ҙур урмандар, яландар ҙа бар.
3. Ғәйнә (Ганинская) - Толва буйында; ҙур урмандар, ҙур булмаған яландар, тауҙар бар; урман артындағы был олоҫҡа тиклем 60 саҡырым, Өфө ҡалаһы яғынан һаҙлыҡтар аша арба юлы юҡ.
4. Ирәкте - Танып һәм башҡа йылғалар буйында; урман, ҙур булмаған яландар.

Һаҡланып ҡалған документтар буйынса, XVII быуаттың беренсе яртыһында бер үк атамалы олоҫтар төрлө даруғалар эсендә булған. Мәҫәлән, Бөрйән - Ҡаҙан һәм Нуғай даруғаларында, Дыуанай һәм Елдәк - Ҡаҙан һәм Себер даруғаларында.

Башҡорттарҙы 1735 йылғы олоҫтар һәм ырыуҙар буйынса бүлеү исемлегендә 44 олоҫ һәм ырыу теркәлә. Шулай уҡ бында ошо ырыуҙарҙан барлыҡҡа килгән аймаҡтар һәм түбәләр исемлеге лә бирелә. Мең ырыуында аймаҡ һәм түбәләр һаны - 9, Юрматыларҙа - 7, Ҡыпсаҡтарҙа - 5, Бөрйәндәрҙә - 4, Көҙәйҙәрҙә - 5, Таныптарҙа -3, Әйлеләрҙә - 11, Ҡыуаҡандарҙа - 2, Ҡара-Табындарҙа - 9, Каршиндарҙа - 3, Дыуанайҙарҙа - 4.

Башҡорт старшиналарының телдән әйтелгән күрһәтмәләре нигеҙендә 1737 йылда төҙөлгән документтарҙа Табын түбәһенә ингән - 11, Ҡатай түбәһенә ингән - 10, Әйле түбәһенә ингән 10 олоҫтоң исемлеге бирелә.

**(Дауамы бар).**

✓ ***Ҡыҙ балаларға хас һөнәри алымдарға, ғәмәлдәргә мәктәп тупһаһынан башлап өйрәтеү уң булыр. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ҡулы менән яһалған әйберҙәр сәнғәт әҫәренә тиң, быны инҡар итеүсе булмаҫ.***

# ӨФӨ ДАНЫН

## бар донъяға

**Өфөгә "Бөтөн донъя һөнәрселек ҡалаһы" тигән маҡтаулы исем биреләү айҡанлы редакциябыҙҙа "Ағиҙел" Башҡорт художестволы кәсептәр берекмәһенең генераль директоры, "Бөтөн донъя һөнәрселек советы" (WCC-AISBL) ағзаһы Гүзәл Миҙхәт ҡыҙы Кәримова булып китте. Уҡыусыларыбыҙ иғтибарына башҡорт халыҡ кәсептәрен үҫтереүгә күп көс һалған, киләсәккә яңы маҡсаттар ҡуйып йәшәгән етәксенең уй-фекерҙәрен еткерәбеҙ.**

**Иң тәүҙә уҡыусыларыбыҙҙы үҙегеҙ менән яҡынданыраҡ таныштырып үтәйек әле.**

- Мин юрматы ҡыҙымын, Ашҡаҙар һыуын һыулап үҫкәнмен. Федоровка районының Батыр ауылында донъяға килгәнмен. Ҡыҙ фамилиям - Багаева.

Ошо ауылға нигеҙ һалыусы кеше нәҫеленәнбеҙ. Энем Айбулат ир туғандар яғынан нәҫелебеҙҙе дауам итә, әммә мин үҙемде лә нәҫел ебен киләсәккә ебәреүсе, дауам итеүсе, тип иҫәпләйем.

**Дөрөҫ уйлайһығыҙ. Башҡорт тарихында, бәлки мосолман булғанғалыр, һәр кемдең шәхси шәжәрәһендә тик ирҙәр генә аталып, теркәп ҡалдырылған. Әммә нәҫел сылбыры, уны суфыйҙарса нарыҡлаһаҡ, силсилә тип тә әйтергә булалыр, ир-аттар һәм дә ҡатын-ҡыҙҙарҙан хасил була. Быны генетика ла шаҡтай дөрөҫләй: тәнебеҙ, организмыбыҙ гендарының яртыһы атайҙан, яртыһы әсәйҙән бирелә...**

- Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ Ашҡаҙар йылғаһы буйҙарын үҙ итеп, ошо гүзәл тәбиғәтебеҙгә ерегеп, байтаҡ ҡына ауылдарыбыҙҙы нигеҙләгән: Батыр, Юлдаш, Яуыш, Сытырман, Һәйет, Бала Сытырман тип атала улар. Тормош көтөр, мал аҫрар, иген сәсер ерҙәр - Ашҡаҙар буйында, беҙ ошо ерҙәрҙең аҫабаларын, төп халҡын тәшкил иткәнбеҙ. Шишмәләр, йылғалар - тормош сығанағы, шуға күрә лә ата-бабаларыбыҙ бик бороңғо замандарҙан бирле тораҡтарын, ауылдарын һыу буйҙарында ҡорған.

Әлеге ваҡытта ауылыбыҙҙа әсәйем-атайым донъя көтә, нигеҙебеҙ усағы һүнмәгән, улар янына ҡайтып, донъя хәлдәре хаҡында туйғансы һөйләшеп, оло бер шатлыҡ кисерәбеҙ. Атайым Миҙхәт Миңлеәхмәт улы һөнәре буйынса ветеринар ине, колхоз рәйесе вазифаһында ла эшләне, ғүмере буйына кешеләргә хеҙмәт итте. Ул холоҡ-фиғеле менән лидер булды, миңә лә унан ошондай сифат-һыҙаттар күскәндер тип уйлайым. Ни тиһәң дә, әле 130 хеҙмәткәрҙән торған коллектив менән эшләйем бит.

**Йырсы булһынмы, рәссам йә иһә шағирмы - илаһи һәләт кәрәк. Нисек кенә әйтһәң дә, һәр кем етәксе була алмайҙыр ул?**

- Әлбиттә. Етәксе икәнһең - үҙеңә өлгө булыу фарыз. Улай булмаһа, һине башҡаларҙың һанламауы ла, тыңлашмауы ла бар. Бына атайым әле лә, хаҡлы ялға күскәс тә, үҙе үҙенә яңы эш тапты: ул Батыр ауылы балаларын башҡорттоң иң бороңғо һөнәри фиғеленә - уҡ атырға өйрәтә.

**Бына нисек бит ул: бороңғо башҡорт әкиәттәрендә батыр егет һынауҙарының береһе - йәйә кереп атҡан уғындың балдаҡ аша үтеүенә өлгәшеү...**

- Эйе, шулай. Баҙар шарттарында йәшәйбеҙ, барыһы өсөн дә аҡса талап ителә. Атайым бағыусыларын да таба белә, үҙе етәкләгән балалар ойошмаһын дәртләндереп, төрлө ярыштар ойоштора, ошо милли спорт төрө аша йәштәребеҙҙә ватансылыҡ тойғоһон тәрбиәләй.

**Әсәйегеҙ хаҡында ла әйтеп үтегеҙ әле.**

- Әсәйем Хәлисә Шаһыбал ҡыҙы мәктәптә эшләне, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булды. Ул балаларҙа туған телебеҙгә һөйөү тәрбиәләгән заттарҙан. Эш стажы ла 40 йыллап булыр. Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Башҡортостандың халыҡ мәғарифы отличнигы, хеҙмәт ветераны ул. Ул өйөбөҙҙә ҡул эштәренән торған шәхси музей булдырҙы: селтәрҙәр, биҙәүле таҫтамалдар, һаҡалдар, түшелдеректәр... Юрматы ырыуына ғына хас селтәрҙәрҙе тергеҙеп, әсәйем ошо кәсепкә йәш ҡыҙҙарҙы ла өйрәтә бөгөн. Атайым да, әсәйем дә хаҡлы ялдарында яңы маҡсат табып йәшәй, үҙҙәре белгән һөнәргә йәштәрҙе йәлеп итә. Тик ятыуҙы өнәмәйҙәр. Төрлө мәҙәни сараларҙа, фестивалдәрҙә ихлас ҡатнашалар. Әле бына "Айыҡ ауыл" конкурсына килеп, ауылыбыҙ командаһы менән күргәҙмәләр килтереп, матур итеп сығыш яһап, шиғырҙар һөйләп ҡайттылар. Әсәйемдең эшен уның уҡыусыһы Гөлнара дауам итә, ул үҙе өлкән быуын ҡатын-ҡыҙҙарын ошондай мәҙәни сараларға йәлеп итә.

**Мостай Кәримдең "Кис ултырып ҡыҙҙар сигеү сигә" шиғырын белмәгән кеше һирәктер. Кейәүгә бирерлек ҡыҙҙар борон-борондан бирнәлектәрен шулай әҙерләгән инде...**

- Беҙҙең өйҙә лә һандығыбыҙ бар ине. Шул һандыҡҡа ҡул эштәребеҙҙе - сигелгән ҡулъяулыҡтарҙы, алъяпҡыстарҙы һала торҙоҡ. Әсәйем зауыҡлы итеп сигеү сигергә өйрәтте. Унан һуң, мәктәптә хеҙмәт дәрестәрендә лә күп нәмәгә өйрәнә алдыҡ. Уҡытыусыбыҙ Рәмзиә Миңлебай ҡыҙы беҙҙе әүрәтә алған: ҡыҙ балалар, ваҡыты еткәс, кейәүгә сыға, бороңғо ғәҙәт буйынса бирнә булыу мотлаҡ, тип аңлата алған. Бына нисек бит ул - беҙгә, әле йәш кенә ҡыҙ балаларға, махсус программа һалынған: кейәүгә сығырһығыҙ, балалар табып, әсәй булырһығыҙ, шуға алдан уҡ әҙерләнә башларға кәрәк, тип. Беҙ, мәктәп йылдарында уҡ бирнәлек әҙерләп, оло тормош юлына аяҡ баҫҡанбыҙ. Хәҙерге уҡытыусыларға теләгем дә шунан ғибәрәт: ҡыҙ балаларға хас һөнәри алымдарға, ғәмәлдәргә мәктәп тупһаһынан башлап өйрәтеү уң булыр. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ҡулы менән яһалған әйберҙәр сәнғәт әҫәренә тиң, быны инҡар итеүсе булмаҫ.

**Ҡул эштәренә өйрәтеү - борондан килгән тәрбиә алымы. Ир-егеттәребеҙҙе балта тотоп, таҡта йышып, ағас һырлап, йорт-ҡураны матурлап йәшәргә өйрәтеү мөһим. Күҙ хәтере булған кеүек, ҡул хәтере лә бар бит - кеше ҡулы ни генә эшләмәй...**

- Бына минең улым әрме хеҙмәтендә, Ырымбурҙа. Хеҙмәтең нисек бара, тигәнемә бына нисек яуап бирҙе ул: "Балта һаплайым, эскәмйәләр эшләйем. Эшемде яраталар, маҡтап ҡына торалар", - ти. Ҡала балаһы булһа ла, атай тәрбиәһен алған, ирҙәрсә эшләргә өйрәнгән. Ә был һәр кемдең ҡулынан килмәй, хеҙмәт тәрбиәһе - бик ҙур ҡаҙаныш ул. Ирем Азат һөнәре буйынса тарихсы, Өфө санатор мәктәбендә директор урынбаҫары булып эшләй.



***Миңә һөнәрем буйынса байтаҡ ҡына сит илдәрҙә йөрөргә тура килде. "Кемһең, ҡайҙанһың?" - тип һорайҙар. "Башҡорт ҡыҙымын", - тип әйтәмен. "Бөтөн донъя һөнәрселек советы" тигән ойошма ла бар. Офисы - Кувейтта. Мине лә ошо советҡа ағза итеп алдылар. Ҡаҙағстандан Айҙархан Кәлиев, Үзбәкстандан Азизбәк Мортазин мине ошо ойошмаға ағза итеп алырға тәҡдим итте. Халыҡ һөнәрҙәрен алға әйҙәүселәр улар. Үзбәкстанда Коканд ҡалаһы ағас һырлау, Бохара - ювелир әйберҙәре, Маргелан - ефәк тауарҙар буйынса "Бөтөн донъя һөнәрселек ҡалаһы" исеменә лайыҡ булған.***

Оло улым - Сыңғыҙ, икенсеһе - Баязит, 11-се класты тамамлай быйыл, Зәлифә ҡыҙым 6-сы класта, бейеү менән мауыға. Үҙебеҙ белгәнде уларға ла өйрәтеп, эш һөйөүсән, үҙаллы шәхестәр итеп тәрбиәләргә тырышабыҙ.

**Тәрбиә өлкәһендә яҙылмаған бер ҡағиҙә бар - уҡыусылары, тәрбиәләнеүселәре остазынан да оҫтараҡ булһа, был бик ҙур ҡаҙанышҡа тиң, бында ғорурланырға ерлек бар. Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән, тиҙәр халҡыбыҙҙа. Ҡыҙығыҙға ла өлгөһөгөҙҙөр инде...**

- Ҡыҙым да ҡул эштәренә маһир, хатта ки минән дә матурыраҡ эшләй белә. Әсәйем әйтә килде: балаларыңдың үҙеңдән дә оҫтараҡ булыуы - ҙур бәхет, тип. Миңә лә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына хас тормош программаһы һалынғандыр ул. Кейәүгә сыҡтым, балалар таптым, декретта ла байтаҡ ултырырға тура килде. Тап шул саҡта әсәйем өйрәткән ҡул эштәренә кире ҡайттым. Балаларың эргәлә, уларҙы ҡарайһың да, ҡул эшенә тотонаһың - шул тиклем рәхәт, күңелең тыныс. Тап шундай мәлдәрҙә йәшәгән мөхитеңдең гармонияһын тояһың, иҫ китмәле ғаилә aураһы шулай хасил була. Кистәрен ултырып сигеү сиктем - ошо рәүешле гүзәл картиналар хасил була. 2018 йылда Францияла, Страсбург ҡалаһында бик үҙенсәлекле халыҡ-ара форум-күргәҙмә уҙғарылды, ул "Ҡатын-ҡыҙ ҡулдары менән" тигән исем аҫтында ойошторолғайны. Минең үҙемә лә шәхси эштәрем менән ошо ҙур сарала ҡатнашыу насип булды.

**Зәйнәб Биишеваның бер матур һәм ғәмле ҡиссаһы бар, ул "Һөнәрсе һәм өйрәнсек"**

***✓ Креативлыҡ тигән заман термины бар. Ә бит уның нигеҙендә халыҡ ижады ята. Халыҡ ижадынан юғары булып булмай. Аллаһҡа шөкөр, боронғолоҡ мәҙәниәтенә дәүләт иғтибары көсәйҙе, шул юҫыҡта эшләү зарур.***

**тип атала. Һөнәр - кеше гәмәле. Кәсепсе тигән һүҙ ҙә бар. Ни эшләптер, бынаһы түбәнерәк тойола. Зәйнәб апайҙың "Өйрәнсеге" шул кәсепсегә тап киләләр тимен. Ҡул эштәре оҫталарын һөнәрмән тип тә атайҙар...**

- Кәсеп һүҙенә ҡайтһаҡ, уның кире мәғәнәһе юҡ. Кеше ниҙелер эшләй, таба һәм икенсе кешеләргә һата - был да бит тормош ҡануны. Ә гүзәл итеп яһалған әйберҙәрҙең баһаһы ла ҙур. Халыҡ кәсептәре тигән билдәләмә лә бар бит, урыҫса "народные художественные промысла" тиҙәр. Тимәк, ул беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың, халҡыбыҙҙың беҙгә ҡалдырған мираҫы. Шул мираҫты юғалтмау зарур.

# ҺӨНӘРМӘНДӘР...

**тарата**

Креативлыҡ тигән заман термины бар. Ә бит уның нигеҙендә халыҡ ижады ята. Халыҡ ижадынан юғары булып булмай. Аллаһҡа шөкөр, боронғолоҡ мәҙәниәтенә дәүләт иғтибары көсәйҙе, шул юҫыҡта эшләү зарур. "Креатив индустрия" тигән заман термины хасил булды, унда халыҡ кәсептәре лә күҙаллана.

Миңә һөнәрем буйынса байтаҡ ҡына сит илдәрҙә йөрөргә тура килде. "Кемһең, ҡайҙанһың?" - тип һорайҙар. "Башҡорт ҡыҙымын", - тип әйтәмен. "Бөтөн донъя һөнәрселек советы" тигән ойошма ла бар. Офисы - Кувейтта. Мине лә ошо советҡа ағза итеп алдылар. Ҡаҙағстандан Айҙархан Кәлиев, Үзбәкстандан Азизбәк Мортазин мине ошо ойошмаға ағза итеп алырға тәҡдим итте. Халыҡ һөнәрҙәрен алға әйҙәүселәр улар. Үзбәкстанда Коканд ҡалаһы ағас һырлау, Бохара - ювелир әйберҙәре, Маргелан - ефәк тауарҙар буйынса "Бөтөн донъя һөнәрселек ҡалаһы" исеменә лайыҡ булған.

Беҙҙең "Ағиҙел" берекмәһен яҡшы беләләр, шуға ла төрлө күргәҙмәләргә саҡыра башланылар. Халҡыбыҙҙың данлы ҡыҙы Рәбиға Ҡушаева исемендәге милли кейем коллекцияһын Коканд ҡалаһында уҙған халыҡ-ара күргәҙмәгә алып барҙыҡ. Әйтергә кәрәк, унда ошондай күркәм саралар дәүләт ярҙамы менән уҙғарыла. Беҙгә юл, йәшәү хаҡын үҙҙәре түләне. Уларға ике тапҡыр барҙыҡ. Беҙҙә етештерелгән милли кейемдәр, биҙәүестәр Урта Азия халыҡтарына бик оҡшай, уларҙы һатып алыусылар ҙа байтаҡ булды. Үзбәкстанда дәүләт милли кәсептәргә бик иғтибарлы, һөнәрмәндәр һалымдан да азат ителгән. Бер Ташкент ҡалаһында ғына 4 мең халыҡ һөнәрмәне иҫәптә торһа, Өфөлә әлегә 400 кеше халыҡ кәсептәре менән мәшғүл. Шуға күрә беҙгә ошо юҫыҡта үҫергә лә үҫергә әле.

Бына тағы нимә иғтибарға лайыҡ: "Һөнәрселек ҡалаһы" исемен алған ҡалаларҙа ҙур байрамдар ойошторола, унда төрлө илдәрҙән килгән ҡунаҡтар ҡатнаша. 2019 һәм 2023 йылдарҙа беҙ Коканд ҡалаһына ошондай фестивалгә барҙыҡ, ә былтыр Бохарала уҙғарылған һөнәрмәндәр байрамында ҡатнаштыҡ. Өфө ҡалаһынан Миңлегөл һәм Рөстәм Дәүләтовтарҙы алып барҙым, улар - республикабыҙҙа киң танылыу тапҡан эшмәкәрҙәр, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ өсөн күҙ яуын алырлыҡ биҙәүестәр яһаусы оҫталар. Улар алып барған шәхси күргәҙмә Бохара кешеләренең дә күңеленә хуш килде. Дәүләтовтар Бохаранан дәртләнеп-илһамланып ҡайтты. Беҙ "Ағиҙел" берекмәһен генә түгел, шәхси оҫталарҙы ла халыҡ-ара кимәлгә сығарырға ынтылабыҙ. Үҙебеҙҙең ювелир әйберҙәре етештереүселәргә булышлыҡ итәбеҙ.

**▸ Һөнәрмәндәр фестивалдәренең әһәмиәте хаҡында ла әйтеп үтергә кәрәктер.**

- Әйткәнемсә, шул уҡ Үзбәкстанда өс ҡала алмашлап һөнәрмәндәр байрамын йыл һайын уҙғара. Ни өсөн? Донъя кимәлендә билдәлелек алыу - ул үҙ иленде бар донъяға танытыуға тиң бит. Фестиваль ҡунаҡтары үҙ илдәренә ҡайтып, ошо хаҡта бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бирә, үҙенә күрә реклама эшләй. Һөҙөмтәлә туристар һаны бермә-бер арта - ә был һәр ил өсөн бик тә файҙалы.

**▸ Ғәҙәттә, беҙҙә бер кеше икенсе кешегә ниндәйҙер әйбер бүләк итһә, минең төҫөм итеп һаҡларһың, ти. Сит ил кешеләре үҙ илендән алып ҡайтҡан сәнғәт әйберҙәрен дә ҡунаҡҡа килгән халыҡтың төҫө итеп һайлаған кеүек тойола миңә...**

- Килешәм был фекерегеҙ менән. Туризм менән һөнәрселек бәйләнешен бер кем дә инҡар итмәҫ. Һәр бер халыҡтың милли йөҙөн сағылдыра һөнәрмәндәр етештергән тауарҙар. Улар һәр туристың күҙенә салынып, иғтибарын йәлеп итеп тора.

**▸ Башҡортостандың баш ҡалаһына "Бөтөн донъя һөнәрселек ҡалаһы" тигән исем биреләүе үҙе бер тарихи ваҡиға булһа, билдәле башҡорт археологы, академик Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитовтың әлеге Өфө ҡалаһы урынында IV - XV быуаттарҙа уҡ бик ҙур административ һәм һөнәрселек үҙәге булған Башҡорт ҡалаһы хаҡындағы асышы бар донъяға билдәле хәҙер. Ошо урта быуаттар ҡалаһына килгән кешеләр араһында Урта Азиянан, Кавказдан килгән сауҙагәрҙәр генә түгел, һөнәр эйәләре лә булыуы асыҡланды. Быны археологик ҡаҙыу эштәре барышында табылған артефакттар раҫлай.**

- Күрәһең, боронғо башҡорттар үҙҙәренең төрки ҡәрҙәштәре менән тығыҙ аралашып йәшәгән. Бар донъяға билдәле ефәк юлы Уралдан үтмәһә лә, бер-береһенән үтә алыҫ арауыҡтарҙа көн иткән кешеләрҙе сауҙа юлдары, һөнәрселәрҙең аралашып йәшәүе берләштерә алғандыр. Ысынлап та, төрки халыҡтарының шул уҡ көршәктәре, ҡатын-ҡыҙ биҙәүестәренең, милли кейемдәренең оҡшашлығы быға дәлил.

**▸ Башҡортостан - күп милләтле республика, беҙҙә башҡорт, татар, рус, сыуаш, мари, удмурт, мордва һәм башҡа милләт вәкилдәре тығыҙ аралашып йәшәй. Һәр милләткә хас мәҙәниәт өлгөләре бар, һәр халыҡтың милли кәсептәре лә яҡшы билдәле. Әгәр ҙә баш ҡалабыҙ Өфөлә ҙур кимәлдәге һөнәрмәндәр фестивале ойошторолһа, был республикабыҙҙа ғына түгел, тотош Рәсәй һәм, дөйөм алғанда, Евразия илдәре өсөн дә үтә әһәмиәтле мәҙәни сараға әйләнер ине...**

- Эйе, Башҡортостанда ошондай байрамды ойоштороу - минең хыялым. Ә бының өсөн әлеге исемгә лайыҡ булыу фарыз ине. Ошо уйҙарым менән бүлешергә, фекерҙән табырға тип, ҡала хакимиәтенә барҙым. Өфө ҡалаһы хакимәтендә лә был тәҡдим хуплау тапты. Ҡала хакимиәте башлығының иҡтисад, сәнәғәт һәм эшҡыуарлыҡ мәсьәләләре буйынса урынбаҫары Агаралим Ҡаһирхаджиев хакимиәттән тейешле кимәлдә ярҙам буласағына ышандырҙы.

Ни эшләргә, эште ниҙән башларға - ошо мәсьәләләрҙе, маҡсаттарҙы үҙемә билдәләргә тура килде. Был донъяла һәр бер эш-ғәмәлде башҡарып сығыу буйынса ҡағиҙәләр бар. Кувейттан ниндәй документтар әҙерләү хаҡында белешмәләр алдым. Ҡаҙағстандың Тараз ҡалаһы ла ошо олуғ исемгә лайыҡ булған, ундағы етәкселәр, һөнәрмәндәр менән бәйләнешкә индем. Әйткәндәй, беҙҙең тарихыбыҙҙың билдәле шәхесе Хөсәйенбәкте Таразда тыуған шәхес тип беләләр. Тараздан Айҙархан Кәлиев Өфөлә ике тапҡыр булды, беҙ уның менән Хөсәйенбәк кәшәнәһенә лә барҙыҡ. Ул ошо зыяратта уның рухына доғалар ҡылды, сөнки Айҙархан өсөн ул - бөйөк шәхес, Ислам тәғлимәтен башҡорт халҡына еткереүсе рухи зат. Ҡыҙғаныс, беҙ Хөсәйенбәк кеүек арҙаҡлы шәхес хаҡында бик аҙ беләбеҙ, бынаһы - айырым тема. Айҙархан беҙгә ихлас күңеленән ярҙам итешергә булды. Шулай итеп, уның кәңәштәрен тыңлап, фекерләшеп, эш башланыҡ.

Әйткәндәй, беҙҙең менән бер үк ваҡытта тиерлек Ҡаҙағстандың Төркөстан ҡалаһы ла ошо уҡ исемгә лайыҡ булды, унда ла ҙур этник байрамға әҙерләнәләр. Апрель аҙағында беҙ уларға барып, күреп ҡайтырға ниәт итәбеҙ. Ә беҙҙең ғариза буйынса Өфөгә "Бөтөн донъя һөнәрселек советы" (WCC-AISBL) ағзалары килде: Кувейттан доктор Али әл-Наджада, WCC-Европа төбәгенең вице-президенты, доктор Фатина Сайкали, WCC-Африка төбәгенең вице-президенты Надя Меер, Үзбәкстандан Азизбәк Муртазаев ағас һырлау, таш эшкәртеү һәм башҡа халыҡ кәсептәре өлгөләрен ҡарап, Өфө менән танышып, республикабыҙҙа халыҡ һөнәрҙәрен үҫтереүгә юғары баһа бирҙе. Әйтергә кәрәк, бына ошондай абруйлы эксперттарға Рәсәйгә, Башҡортостанға бармаҫҡа өгөтләүселәр ҙә булған, әммә улар бында сәйәси хәүеф-хәтәр юҡлығына ысын күңелдәренән инанып килгәндәр.

Иң элгәре беҙ уларҙы "Ағиҙел" Башҡорт художестволы сәнәғәт берекмәһе эшмәкәрлеге менән таныштырҙыҡ, улар беҙҙең 11 йүнәлештә алып барылған эштәребеҙ менән танышты. Унан башҡа эксперттар Өфө ҡалаһының Художестволы сәнәғәт колледжында, Һупайлы биҫтәһенең М.Ғ. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейында үҫмерҙәрҙе халыҡ кәсептәренә йәлеп итеү буйынса ниҙәр эшләнгәнен үҙҙәре күреп инанды. "Артель" ойошмаһында беҙҙең Башҡортостан йәшмәһенән гүзәл картиналар эшләгән рәссамдарыбыҙҙың эштәрен күреп, иҫтәре китте.

**▸ Заманында Урал йәшмәһенән Санкт-Петербургтың донъяға даны таралған Эрмитажында "Йәшмә залы" булыуын беләбеҙ...**

- Бына беҙҙең Сибай ҡалаһында ла йәшмәнән эшләнгән сәнғәт әйберҙәре күргәҙмәһе залын булдырыу күҙаллана. Бындай эшмәкәрлекте хуплап, булышлыҡ итеү зарур. Шундай затлы тәбиғи сеймалдарыбыҙ булыуын онотмаҫҡа кәрәк - ҡайһы саҡта быға иғтибарыбыҙ етешмәй. Эйе, буяуҙар менән генә түгел, тәбиғи таштарҙы ла сәнғәти эшкәртеп, бик гүзәл картиналар ижад итеүсе оҫталарыбыҙ бар. Беҙ Сибай ҡалаһына ла һөнәрмәндәр ҡалаһы статусын биреү буйынса эш алып барасаҡбыҙ. Сәнғәт юҫығында билдәлелек тапҡан ерҙәргә туристар күпләп йөрөй башлай, был Сибай ҡалаһының үҫешенә ыңғай йоғонто яһаясаҡ. Бына, мәҫәлән, Сибайҙа йәшмә пляжын эшләп булыр ине. Сеймал етерлек - тик кемдеңдер тәү башлап ошо эшкә тотоноуы зарур.

**▸ Ошондай оло исемгә лайыҡ булғас, Өфөбөҙҙә лә һөнәрмәндәр байрамын уҙғарыу бик тә урынлы булыр ине.**

- Эйе, тап шулай буласаҡ. 12 июнь - Өфө ҡалаһы көнө, был байрамыбыҙҙы тап ошо көндә уҙғарырға уйлайбыҙ. Әйтергә кәрәк, ошо исемде алыу тик минән генә торманы, беҙ тотош командабыҙ менән бергәләп эшләнек. Киң матбуғат саралары ла ситтә ҡалманы - радио, телевидение, матбуғат саралары ошо хаҡта халҡыбыҙға мәғлүмәт биреп тора. Республикабыҙҙың район һәм ҡалаларынан ғына түгел, башҡа өлкәләрҙән һәм милли республикаларҙан, сит илдәрҙән ҡунаҡтар ҡатнашыуын көтәбеҙ.

**▸ Әңгәмәбеҙ аҙағында үҙегеҙ етәкләгән "Ағиҙел" Башҡорт хужожестволы кәсептәр берекмәһенең Башҡортостанда халыҡ кәсептәрен артабан үҫтереү буйынса эшмәкәрлегенә баһа биреп китеү урынлы булыр.**

- Беҙҙең предприятие ошо өлкәнең флагманы ул, 1963 йылдан бирле эшләп килә. Совет власы осоронда ла, хәҙер ҙә беҙ республикабыҙҙың милли йөҙөн билдәләрҙәй ижад емештәрен етештереү менән мәшғүлбеҙ. Башҡортостанда биҙәү-ҡулланма әйберҙәре етештереүсе дәүләт унитар предприятиеһы 1981 йылда Халыҡтар Дуҫлығы ордены менән бүләкләнгән.

Берекмәбеҙҙә лакланған миниатура живописы, биҙәкле ағас һәм туҡыма (батик), ҡайып сигелгән әйберҙәр, аш-һыу таҫтамалдары, милли кейем өлгөләре, нәфис туҡылған әйберҙәр етештерелә. Йәнә беҙ башҡорт тирмәләре яһайбыҙ, улар милли рухта биҙәлә.

Бында 100-ҙән ашыу хеҙмәткәр эшләй, уларҙы үҙ эштәренең оҫталары, тип нарыҡлау урынлы булыр: тиҫтәнән ашыу оҫталарыбыҙҙың хеҙмәте юғары баһаға лайыҡ булды - уларға "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре" исеме бирелде. Бындай сәнғәти-сәнәғәти ойошма республикабыҙҙа берәү генә - ошондай юғары статусҡа эйә булып, артабан да ижади бурыстарыбыҙҙы үтәүгә тоғро ҡалырбыҙ, тип ышанам.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

**✓ Ошонан башлап башы бөтөнләй башҡаса фекер йөрөтә башланы. Дрондан йәшенеү генә түгел, уны нисек бәреп төшөрөү тураһында. Дошманды ҡырып һалыу өсөн иң йәтеш урынды табыу тураһында...**




– Шуға аптырайым шул. Ҡайһы берәүҙәрҙең үлерен белмәй, яраланғандан һуң да, ҡабат-ҡабат шунда ынтылғаны башҡа һыймай.

- Бына мин нисек бармай ҡалайым, абзый. Унда мин күпме йән туғандарымды ҡалдырып ҡайттым. Үлеләрен дә, тереләрен дә... Тереләренә терәк булырға, мәйеттәрҙе тәрбиәләп, ер ҡуйынына оҙатырға кәрәк... Шунан ундағы кешеләр башҡа, абзый. Бында ҡайтһам, миңә һауа етмәгән һымаҡ. Бына мин ҡайтып та еттем, абзый.

- Тик һин тәки асыҡ ҡына итеп төшөндөрмәнең бит, - тип ныҡышты таксист.

- Сәбәптәре күп инде уның, - тип, үҙе лә уйға ҡалды яугир. Күрмәгәнгә түгел, үҙеңә лә аңлауы ҡыйын икән шул. - "Ирмен тигән ир кеше үҙенең кемлеген ике осраҡта белә. Беренсеһе - үҙенең йәнен алырға килгәндә. Икенсеһе - үҙе башҡаның йәнен алғанда", тип әйтергә ярата беҙҙең командир. Тик һәр кем яугир була алмай, уныһы ла бар. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, фәлсәфә һатырға уҡымышым етеңкерәмәй икән. Шуға ябай ғына әйтәм дә ҡуям: һин минең иҫән-аман еңеп ҡайтыуымды ғына теләп тор. Торһаң да, ятһаң да, ултырһаң да, барһаң да, ҡайтһаң да гел телә, - тине Сабир хушлашып. - Мин еңелһәм, һиңә каюк. Шуны аңлаһаң, башҡаһы һиңә кәрәкмәй ҙә, абзый...

* * *

– Ә ҡояш байымай ҙа байымай, - тип ауыр көрһөнә Сабир түҙемһеҙләнеп. Һаман сыҡҡыһы, ҡотҡарыусыһының көүҙәһен ҡыҙыу ҡояштан ҡаплағыһы килә. Бына бит тормош. Ә ҡалай тарһынған булғайны.

- Һеҙ эскеселәрҙән ҡасып бында килдем. Хатта һуғышта ла ҡотолоу юҡ һеҙҙән, - тип ҡыш буйы тиргәшеп сыҡҡайны бит ул. Үҙәгенә лә үткәйне шул. Әллә ҡайҙан табып эсә. Китеп юғалған мәлдәре лә була. Ике-өс тапҡыр шым ғына уның өсөн ҡарауылда торҙо. Оят та, яуаплылыҡ та юҡ. Хәйер, эскеселә оят ҡалмағанын атаһы менән әсәһенән күреп үҫкән бит инде.

- Хөрмәт түгел һинең исемең, хурлыҡ, - тип әрләп тә ташлай.

- Дөрөҫ әйтәһең, мырҙа, - тип ризалаша меҫкен. - Бисә лә шулай тине. Берәй соҡорҙа ятып туңып үлгәнсе, балаларға саҡ ҡына булһа ла аҡсаң сыҡмаҫмы, тип ҡыуалап ебәрҙе.

- Ә нишләп һин, килә һалып, миңә сат йәбештең?

- Башҡаларҙан оялдыра, - ти Хөрмәт айыҡ сағында тәмәкеһен уйсан һурып. - Күреп торам, башҡалар ерәнә, ытырғана. Ә һин сарбаулап алған булаһың да барыбер йәлләйһең. Үҙемдең бисара малайҙарым һымаҡ.

"Эсмәгәндә һинән һәйбәте юҡ", тип ҡайһы ваҡыт башҡалар ҙа тәрбиәгә ҡушылып киткәндә:

- Һәйбәт түгел ул, йәпәтник! - тип ҡыҙа Сабир.

- Егет дөрөҫ әйтә, - тип йәнә йөпләй "Торба" -Хөрмәт. - Айныҡҡас, үҙеңде ғәйепле тояһың да башҡаларға ярарға тырышҡан булаһың. Яҡшылыҡтың сере ябай.

Шулай ҙа бер йәтеш яғы бар ине абзыйҙың: ер эшенә шәп. "Булды", тип үткән заманда әйтергә һаман да тел әйләнмәй. Ә Сабир фронт мәшәҡәттәренә, бигерәк тә окоп ҡаҙырға үҙе өйрәтте. Ҡасандыр, полигондан яңы килгән сағында ҡырыҫ холоҡло, талапсан һаҡалтай үҙен нисек өйрәткән булһа, тап шулай ҡыланды. "Ҡара ҡапсыҡҡа инеп ятҡың килмәһә, - тип башлап китә, - ҡаҙаһың да ҡаҙаһың. Ялҡауға йәһәт үлем. Ни өсөнмө? Окобы һай. Окобың - һинең ғүмерең. Бына тағы бер тормошсан мәҡәл: тирең күп аҡһа, ҡаның аҙ ағыр. Артиллерия һинең мәргәнлегеңә, зирәклегеңә, йүгереклегеңә төкөрөп бирә. Артанан ҡасып өлгөрөп булмай, ергә ни тиклем тәрән сумһаң, шансың шул тиклем арта. Ә инде мосолманса ләхет һымаҡ ҡаҙһаң, тағы ла уңайлыраҡ!" Һәм башҡа, һәм башҡа... Ҡылығын күҙ алдына килтереп, оялып ята инде хәҙер. "Өлкән кешенән ҡалай көлгәнмен. Ә ул бер тапҡыр ҙа "юҡ" тимәне. Насар һүҙ әйтмәне. "Ярай инде, мырҙа! Бөтөнләй бөтөрөп ташлама, - тигән була торғайны. - Тәнем менән берәй снаряд ярсығын тотоп ҡалһам да файҙам тейер". Әйтерһең дә, алдан белгән. Моғайын, алдан уйлап йөрөгәндер: ҡапыл ырғып, аяҡтан йыҡты ла үҙенең тәне менән пулянан ҡапланы бөгөн. Иртәнсәк кенә бергә ултырып сәй эскәйнек. Кеҫәһенән кәнфит сығарып биргәйне.

* * *

Атаһы ла, әсәһе лә эсте, шуға туғандары менән үҙ көндәрен үҙҙәре күреп, үҙ тамаҡтарын үҙҙәре ҡайғыртып үҫкән Сабир әҙәмсә тормошто тик армияға барғас ҡына күрҙе. "Ашау - байҙан, үлем - Хоҙайҙан", тигәндәре ҡалай шәп нәмә икән", - тип аптырата торғайны хеҙмәттәштәрен үҙенең бөтә нәмәгә ҡәнәғәт булып, ҡыуана белеүенә. Хеҙмәтенең аҙағында МХО-ға контракт тәҡдим иткәс, уйлап та тормай ҡул ҡуйҙы. Кәрәк икән - кәрәк. Һуғыш та - шул уҡ ауыр эш. Күп ваҡытың әлеге шул көнитмеште хәстәрләп үтә. Ашарыңа табаһың, туҡтауһыҙ ҡаҙаһың. Йәнә лә тиҙерәк йүгерергә, йәһәтерәк ҡоларға, иптәшеңде арттан ҡапларға ла растяжкаға эләгеп ҡуймаҫ өсөн гел аяҡ аҫтын ҡарарға. Сослоҡ менән уяулыҡҡа ла ул бәләкәйҙән өйрәнгән. Аслыҡ үтә үҙәккә үтеп киткәндә, мәҫәлән, андаһанда "хужаһыҙ" йөрөп ятҡан тауыҡты тота һалып, башын сабып өҙәһең дә, ҡайнаған һыуға мана һалып, йөнөн таҙалайһың һәм башҡа, һәм башҡа... Кәп ҡорһаҡты бер туйҙырыр өсөн генә лә күпме сослоҡ, эләкмәҫ өсөн күпме уяулыҡ кәрәк булған. Ә иҫерек атай менән әсәй берәй ерҙә ҡолап туңып үлмәһен өсөн күпме эҙләргә, тапҡас, һөйрәкләп алып ҡайтырға күпме көс кәрәк!..

* * *

Һуғышта йөрөүенә икенсе йыл китте хәҙер. Ә тәүге алыш, тәүге сирҡаныс онотолмай. Сабир үҙендә шул тиклем ҡурҡыу йәшеренгәнен, ғөмүмән, донъялыҡта шул ҡәҙәрлем ҡурҡып була икәнен белмәгәйне, бында килмәһә, белмәҫ тә ине. Ике яҡтың да артиллерияһы ата башлағас, башын аймап, әсә ҡарынындағы һымаҡ йомарланып ятҡан килеш, туҡтауһыҙ: "Эй Аллам, ярҙам ғына ит! Аллам, ҡотҡар! - тип инәлде. - Ҡайҙа килеп ҡаптым мин? Ошонан сыҡһам, бөгөн үк ҡайтып китәм!" - тип үҙен һүкте. Был дәһшәт инде бер ҡасан да туҡтамаҫ һымаҡ тойолдо. Ә арта туҡтағандан һуң, тынлыҡҡа һаман ышанмай, ҡурҡып һаман ята бирҙе. Һаҡ ҡына аяҡ-ҡулын ҡыбырҙатып ҡараны. Өҫтөндәге тупраҡтың ауырлығын тойоп һиҫкәнде лә саң араһынан сығырға маташҡан бөжәк кеүек тарбаңлап тубыҡланды. Башын ҡалҡытып ҡарағайны: шаҡ ҡатты. Эргә-тирәлә бер нәмәне лә таныманы. Ағаслыҡ сәрпәкләнеп юҡҡа сыҡҡан, ер өҫтө тәрән-тәрән соҡорло Ай йөҙөнә оҡшап ҡалған. Һеңгәҙәп торған арала, кемдеңдер бала һымаҡ үкһеп, ҡысҡырып илағанын ишетеп, әйләнеп ҡараны. Полигондан уның менән бер ваҡытта килгән өлкән генә мыҡты бер ир тубыҡланып торған килеш битен ҡаплап һыҡтай, ә командир, уның яурынынан ҡосаҡлаған, ипләп кенә арҡаһынан ҡаға: "Бөттө, бөттө бит инде! Тынысланабыҙ, хәҙер тынысланабыҙ!" Сабирҙың ҡарашын эләктереп, башҡаларға ярҙам итергә ымланы. "Истерика! Башта була ҡайһы берәүҙәрҙә! Иң мөһиме: ихтыярыңды ҡабат усҡа йомарлау". Эйе, компьютерҙа танчик уйнап диванында ултырғанда бер кем дә "пятисотый" булып йөрөрөн уйламай. Ә Сабир тәүге атышҡа сыҙаны, психикаһы имгәнмәне. Үҙенең яуҙаштарына, тимәк, иленә кәрәк була алғанын тойҙо. Янындағы кешеләрҙең хәстәрлеген күрҙе. Яуҙаштарға хатта ҡурҡыуың тураһында әйтергә лә була икән, йәшереүҙең кәрәге юҡ - һәр кем ҡурҡа.

* * *

Алғы һыҙыҡта айлап, йыллап йөрөп тә һинән ысын яугир сыҡмауы бар. Шуны ла аңланы Сабир бер мәл. Һүҙ юҡ, хеҙмәтеңде үтәргә, тере ҡалырға, баш осонда дрон жыуылдағанда, артиллерия уты аҫтында үҙеңде тоторға өйрәнәһең. Тик ябай һалдаттан яугирға әйләнеү - икенсерәк икән. Ул бөтөнләй башҡа сифат. Ана шул сифатҡа эйә булған көнөн Сабир минутлап хәтерләй, Әжәл алдында ла ҡәнәғәтләнеп иҫеңә алып ятырлыҡ.

Таң атып килә ине: дүрттәр менән биштәр араһы, дөрөҫөрәге, 4 сәғәт тә 27 минут: үлтереп йоҡо килгән саҡ. "Ҡарауылды тапшырам да блиндажға инеп ауам", - тип хыялланып торғанында алыҫтан геүләү ишетеп ҡалды. Шунда уҡ рацияһы уянып китте: уң яҡ күршеләр ауыр техника яҡынлашыуын хәбәр итте. Саҡ ҡына ла үтмәне - асыҡланылар: "Дүрт БМП-ла пехота".

Сабир рациянан үҙенекеләрҙе саҡырырға кереште, яуап юҡ. Ул арала техника шауы яҡыная төштө. Ҡарауылды ташлап, блиндажға йүгерҙе: "Беҙҙең яҡҡа дүрт БМП менән пехота килә!" Егеттәр һикереп тороп, броникҡа тотондо. Минут үттеме, юҡмы - барыһы ла тышта ине. Сабир еңел һуланы. Учебканан алып "Тик ышанысты аҡларға!", "Тик берәй хата яһап, зыян килтереп ҡуймаҫҡа!" тигән ҡурҡыуы бар ине. Әле бәләкәс кенә булһа ла бурысын үтәне. Быныһы ла һәйбәт.

Ул арала БМП орудиенан ата башланы. "Тарпан" - Байсар гранатометтан яуап ҡайтарҙы. Сабирға разведчик торбаһы биреп, уң яҡтағы ағаслыҡты күҙәтергә, дошман күренһә, хәбәр итергә әмер булды. Атыш башланыу менән ҡаушап киткәйне, бойороҡ алғас, тынысланды. Эше булды. Барыһы ла аңлашыла. Үтәйһең.

Бер яҡтан, ағаслыҡты ҡарай Сабир, һыңар күҙ менән Байсарҙы күҙәтә. Ә ул сүгә биреп, траншеянан күтәрелә лә атып ебәреү менән кире сума. Башҡа егеттәр автоматтан атып, уны ҡаплай. Тағы, тағы. Сабир уның сослоғона, мәргәнлегенә, етеҙлегенә, ҡурҡыуһыҙлығына һоҡланып бөтә алмай. Бына бер БМП-ны яндырҙы бит. Тик, хәйерһеҙе - снаряд бөттө, ә яңылары килеп етмәгән. Ул арала Сабирҙың флангыһындағы юл айырсаһына бер нисә дошман килеп баҫты. РПГ шымды, эргәләрендә БМП - иркенләп киттеләр былар. Был яҡҡа ҡарайҙар, ә ҡояшҡа ҡаршы торғас, Сабирҙы күрмәйҙәр. Шул тиклем ҡулы ҡысыта. "Ҡайҙа беҙҙең арта? Нишләп һаман атмайҙар?" - тип ыуалана. Торбаны ситкә һалып ҡуйҙы ла автоматын алды. Ҡыуаҡтан һонолоп атып ебәрҙе. Ҡабаттан ҡыуаҡ артына боҫто, шунан тумарлап барып траншеяға сумды. Теге яҡтан яуап булманы. Тимәк, ҡояш арҡаһында улар абайламай ҡалған. Тағы ҡыуаҡ артына боҫҡайны, ағаслыҡтан бер нисә кеше килеп сыҡты. Ә улар бит яңы ғына булған хәлде белмәй. Уңышлы алымды тағы ҡабатланы. Яралыларҙы алып китә торған пикапты күргәс, эшенең һөҙөмтәһен белде егет. Шул тиклем, бығаса кисерелмәгән ҡәнәғәтлек тойҙо.

Ул арала беҙҙең артта эшкә тотондо. Уның туҡтағанын саҡ көтөп алған Сабирҙың инде тиҙерәк алышҡа ташланғыһы, ҡалған дошмандарҙы эҙәрлегеһе, әле генә кисергән еңеүсе тойғоһон ҡабат татығыһы килде. Инде нимә эшләргә кәрәклеген, ниһайәт, үҙенең кәрәк урында, кәрәк сифатта икәнен аңланы. Ошонан башлап башы бөтөнләй башҡаса фекер йөрөтә башланы. Дрондан йәшенеү генә түгел, уны нисек бәреп төшөрөү тураһында. Дошманды ҡырып һалыу өсөн иң йәтеш урынды табыу тураһында... Еңеүсе оһоло барлыҡҡа килде, унда, ниһайәт, ысын яугир тыуҙы.

Юҡ, ҡурҡыуы бер ҡайҙа ла китмәне. Тик ул инде ҡурҡыу тойғоһоноң ярҙамсы икәнен, уның йәнде һаҡлағанын, нимәнән ҡурҡырға, ә нимәнән ҡурҡмаҫҡа икәнен белә башлағайны.

Һиңә ҡаршы иҫәпһеҙ-һанһыҙ артиллерия, бронетехника, авиация эшләй. Уларҙың барыһын да һинең йәнеңде алыр өсөн кешелектең иң зиһенле, аҡыллыларҙан аҡыллы, белемлеләрҙән белемле белгестәре уйлап тапҡан. Күпме ғалим һине нисек оҫтараҡ үлтереү хаҡында арымай-талмай баш вата. Асыштары менән маҡтана. Ошо аяуһыҙ шарттарҙа еңеүсе булып сығыр өсөн һин, яугир, тағы ла уяуыраҡ, сосораҡ, оҫтараҡ һәм, әлбиттә, даланлыраҡ булырға тейешһең! Бына ҡайҙа ул адреналин!

**(Дауамы. Башы 14-15-се һандарҙа).**

ЗАМАН БӘЛӘҺЕМЕ?

# КЕМДӘР ИКӘН...

## юғалыуға дусар һөнәрҙәр исемлегендә



**Яҙ һәм хеҙмәт байрамында оло мәғәнә ята. Халҡыбыҙҙың, хеҙмәт төбө - хазина, тигән мәҡәле уны тулыһынса аса кеүек.**

Хеҙмәттең төрлөһө була: тик ҡул көсөнә йә зиһенгә таянғаны, зиһенгә таянып, ҡул менән башҡарылғаны. Эстәлеге, йүнәлеше, төрлө өлкәгә ҡағылыуы, ҡатмарлы йә ябай булыуы менән дә айырыла ул. Ә осталыҡ, махсус белем талап ителгән эште тик тәғәйен һөнәр эйәһе - һөнәрле кеше генә атҡара ала.

Бөгөнгө көндә донъя йөҙөндә 40 меңдән ашыу төрлө һөнәр бар. Рәсәйҙә - 10 меңгә яҡын. Үҙ юлыңды һайлағанда нисек яңылышмаҫҡа, был тиклем төрлөлөк араһында аҙашмаҫҡа һуң? Боронғо тәғлимәттәрҙә һөнәргә һәләте буйынса кешеләр дүрт төркөмгә (синыфҡа) бүленә. Дәүерҙәр алышына, тик был бүленеш үҙгәрешһеҙ ҡала, юғалмай. Һуңғы осорҙа ғына бишенсе төркөм барлыҡҡа килеүен күҙәтәбеҙ.

***Беренсе төркөм - эшселәр.*** Улар күпселеге - халыҡтың яҡынса 90 процентын тәшкил итә. Ҡул эштәренә маһирҙар, хеҙмәттән кинәнес алалар, уға илһамланып тотоналар. Эшҡыуар, етәксе булыу тураһында уйлап та ҡарамайҙар.

***Икенсе төркөм - сауҙагәрҙәр*** (эшҡыуарҙар). Йәмғиәт ағзаларының 6 процент самаһы инә улар иҫәбенә. Сауҙа, хужалыҡ эшенә әүәҫтәр. Төп һыҙаттары - сумартлыҡ һәм шул уҡ ваҡытта байлыҡҡа ынтылыу ҙа. Булдыҡлыҡ, эшһөйәрлек сифаттары ярылып ята. Бала саҡтан алыш-биреш менән мауығалар, ниндәйҙер коллекция йыйыу менән булышалар, һәр саҡ уңышҡа өлгәшеүҙе маҡсат итеп ҡуялар, үҙҙәре тотонған теләһә ҡайһы шөғөлдән файҙа алырға тырышалар.

***Өсөнсө төркөм - етәкселәр.*** Улар халыҡтың яҡынса 2 процентын тәшкил итә. Идаралыҡ, етәкселек маһирлығы йәһәтенән башҡаларҙан айырылып торалар. Эштә һәр саҡ ниндәйҙер яңы тәртип, ҡағиҙә уйлап сығарырға әүәҫтәр. Тормошто ғәҙел һәм мәрхәмәтле итеп ҡороу өсөн көс һалалар. Яуаплылыҡ, бурысҡа тоғролоҡ тойғоларына эйәләр. Интеллект кимәленә ҡарап, дәүләт идараһы структураһында төрлө баҫҡыстарҙы биләйҙәр - полиция хеҙмәткәренән алып ил президентына тиклем.

***Дүртенсе төркөм - остаздар*** (уҡытыусылар). Уларҙың да нисбәте - 2 процент самаһы. Белемлеләр, уҡыуға, өйрәнеүгә һәләтлеләр. Белем алырға һәм уны таратырға ынтылалар. Бала саҡтан хәҡиҡәт асылына төшөнөргә тырышалар, әйткәндә иғтибар менән тыңлайҙар, һәр саҡ эҙләнеү өҫтөндәләр. Әгәр берәй концепцияның айышын аңламаһалар, ныҡ хафаланалар, борсола башлайҙар. Ғәҙел һәм намыҫсандар. Бер ваҡытта ла һатылмайҙар, үҙ намыҫына ҡаршы бармайҙар.

***Бишенсе төркөмгә*** ҡараған кешеләрҙе бер һүҙ менән генә тасуирлап булмай. Улар - үҙен таба алмаған, йә иһә төрлө сәбәптәр арҡаһында һәләте асылмаған йәки баҫылған шәхестәр. Шулай булғас, тормошта үҙ юлын тапмағандар, эштән кинәнес алмайҙар. Бөгөнгө көндә нәҡ ошо бишенсе төркөмгә ҡарағандар беҙҙең арала күпселекте тәшкил иткән һымаҡ.

Аналитиктар билдәләүенсә, кешеләрҙең шаҡтай ҙур өлөшө эштә үҙен бәхетле тоймай. Бының сәбәбе төрлөсә. Әйтәйек, кемдер, үҙенә килешле һөнәр һайлап та, хеҙмәт урынында ерегеп китә алмай. Сөнки дипломлы белгес булһа ла, эшенең ғәмәли айышын белеп етмәй, инженер, иҡтисадсы, менеджерҙың (быуат башында киң модаға ингән йүнәлештәр), ҡайһы өлкәлә көс түгеүенә ҡарап, функцияһы төрлөсә икәнен уға бер кем дә аңлатмаған, практикала күрһәтмәгән.

***Алға киткән сит илдәрҙә иһә һөнәргә әҙерлек бик етди ҡуйылған. Беҙҙең мәктәптәр баланы юғары уҡыу йортона инергә әҙерләһә, унда һөнәр һайлауға баҫым яһала. Һөҙөмтәлә, әйтәйек, Европала һәм АҠШ-та 16 йәшенә үҫмерҙәрҙең 90 проценты кем булырға теләгәнен аныҡ белә.*** Унда уҡыу йорттары эре предприятиялар һәм компаниялар менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итә, студенттар уҡыуҙы эш менән аралаштырып алып бара, буласаҡ һөнәренең барлыҡ нескәлектәрен өйрәнә, эш шарттары менән яҡындан таныша.

Нисек кенә булмаһын, баланың яҙмышы ғаиләлә хәл ителә. Үкенескә ҡаршы, һөнәр һайлауҙа хәҙерге ата-әсәнең төп маҡсаты улына йә ҡыҙына юғары белем биреүгә генә ҡайтып ҡала. ***Уҡыу йортоноң ниндәй өлкәгә ҡарауы мөһим түгел уларға - һуңғы аҡсаһын түләп булһа ла, баланы институтҡа индерәләр.*** Бер яҡтан ҡараһаң, был хуплауға лайыҡ ынтылыш, әлбиттә. Белемле бер ҡасан да юғалып ҡалмай. Ҙур кеше, етәксе булып китеү өсөн тәүге аҙымын яһай шулай йәш кеше. Яуаплы бала ололарҙың өмөтөн аҡларға тырыша, ваҡыты еткәс, күңеле тартмаһа ла етәксе вазифаһына ултырып алыуы ла ихтимал.

Етәкселеккә үрләүҙең икенсе юлдары ла бар - ул туғанлыҡ, әшнәлек һәм, әлбиттә, ришүәт аша. Нишләп, уҡыған бит, вазифаға хоҡуғы бар, тип этәрәләр кешене юғарыға.

Тырышлығы менән үрләгән, йә блат аша урынға ултырған, ләкин булмыштан етәкселеккә барымһыҙ түрәләрҙән тик зыян ғына. Илебеҙҙең алға китмәүе, урында тапаныуы нәҡ шуға ҡайтып ҡала ла инде, бер уйлаһаң. Сөнки кеше үҙ урынында түгел.

Баланың алдағы тормошо камил һәм уңышлы булһын тиһәк, уның һәләтен, ҡайҙа тартылыуын белеү мотлаҡ. Был йәһәттән мәктәптә эшләп еткермәйҙәр икән, ата-әсәләргә яуаплыраҡ булырға ҡала. Һәр кем тик бишлегә генә уҡый алмаған кеүек, ҡайһы бер һөнәр төрҙәрен үҙләштереү өсөн дә айырым таһыллыҡ, зиһен үткерлеге, зирәк аҡыл кәрәк.

Элек ауылдарҙа бер-ике мейес сығарыусы, балта оҫтаһы, тимерсе булған. Һәр кем тотонмаған мейес һалырға, тәҙрә-ишек яһарға, тимерҙән бысаҡ сүкергә. Ошонан сығып та, ҡул эшендә лә айырым һәләт кәрәк, тип әйтә алабыҙ. Кемгәлер иретеп йәбештереүсе, ташсы, водитель, кондитер һәм башҡа һөнәр оҡшай һәм ул нәҡ шул өлкәлә юғары квалификациялы оҫта булып таныла, күп аҡса эшләй, бәхетле йәшәй.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, хәҙер эшсе һөнәрҙәрҙең бәҫе төштө. Менеджер, иҡтисадсы, юрист булырға теләй йәштәр. Уҡыусылар һаны кәмегәнгә күрә, урта белем биреүсе һөнәрселек уҡыу йорттары ябыла, сәнәғәт предприятиелары кадрҙар ҡытлығы кисерә. 5 мартта Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуҙ-ара студенттар кампусында урта һөнәри белем биреү уҡыу йорттары студенттары менән осрашыу барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров: "Эшсе һөнәрҙәр йәнә популярлыҡ яулай бара. Республикала 169 белгеслек һәм 84 эшсе һөнәр буйынса кадрҙар әҙерләнә", - тигәйне.

Әйткәндәй, төбәк етәксеһе килтергән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, беҙҙә 92 колледж һәм 44 филиал эшләй, уларҙа 120 мең студент белем ала.

***Бөгөнгө заман йәмғиәте йылдам үҫешә. Һөнәр һайлағанда быны ла мотлаҡ иҫәпкә алырға кәрәк.*** Әйтәйек, аналитиктар, бер булып, бына-бына һуңғы бухгалтер эшһеҙ ҡаласаҡ, ти. Юғалыуға дусар һөнәрҙәр исемлегенең тәүге юлдарында хатта журналистар ҙа тора. Уларҙы блогерҙар алмаштырасаҡ икән. Рәсәй Һаҡлыҡ банкы юристар урынына махсус программа ҡулланыу буйынса проект өҫтөндә эш алып бара. Ғөмүмән, яҡындағы 12 йылда барлығы 56 һөнәр юҡҡа сығасаҡ, тип фаразлай белгестәр.

Шул уҡ ваҡытта яңы йүнәлештәр барлыҡҡа килә. 2030 йылға һөнәрҙәр исемлеге 136 пунктҡа тулыланасаҡ. Улар араһында биоэтик, генетика буйынса консультант, дирижабелдәрҙы проектлаусы, биләмәләр архитекторы кеүек һөнәрҙәр буласаҡ. Тимәк, алға ҡарап, яңы профессиялар тураһында ла даими ҡыҙыҡһынып барырға кәрәк. "Сколково" идара мәктәбе 2024 йылда "Яңы һөнәрҙәр атласы" проектын тамамланы. Атлас хәҙерге һөнәрҙәрҙән тыш, киләсәк йүнәлештәр менән танышыу мөмкинлеген дә бирә. Унда 27 тармаҡ буйынса яңы 340 һөнәр күрһәтелгән, ә айырым блок эшҡыуарлыҡҡа арналған.

Теге йә был уҡыу йортон тамамлап, дипломды кеҫәгә һалып алабыҙ ҙа, ошоноң менән ғүмерлеккә һөнәрле булдым тип тынысланабыҙ, ғәҙәттә. Хәҙерге тормош талаптарына тура килмәй бындай ҡараш. Заман кешеһе һәр саҡ яңы йүнәлештәр үҙләштерергә, хатта профессия алмаштырырға әҙер булырға тейеш. Был - бөгөнгө көн талабы!

Ә заман студенты төшөнсәләр менән фекерләргә (понятийное мышление) - юғары тиҙлектә килгән мәғлүмәтте йылдам анализларға, үҙаллы фекер туплап, ирекле ҡарар ҡабул итергә өйрәнергә бурыслы. Шул саҡта ғына ул һайлаған шөғөлдә үрҙәргә артыласаҡ, уңышлы шәхес, булдыҡлы атай-әсәй, яуаплы ил гражданы буласаҡ.

***Табип, уҡытыусы, мәғлүмәт технологиялары һәм хеҙмәтләндереү өлкәләре белгестәренә бер ни ҙә янамай. Тимәк, был һөнәрҙәрҙе һайлаған йәш кеше бер ҡасан да отолмаясаҡ.***

Сәнәғәт етештереүен, башҡа өлкәләрҙе роботлаштырыу ҙа - бөгөнгө көн ысынбарлығы. Ул конвейерҙа эшләүселәргә ҡағылды тәү сиратта. Германия, Көньяҡ Корея һәм Япония - иң роботлаштырылған илдәр. Көньяҡ Кореяла 10 мең эшсегә 1000 робот тура килә, Сингапурҙа - 670. Автоматлаштырыу теге йәки был кимәлдә барыһына ла ҡағыласаҡ. Мәҫәлән, Rabota.ru эш эҙләү сервисының генераль директоры Александр Ветерков әйтеүенсә, 10 йылдан профессиональ водителдәрҙең һаны бөгөнгө миллиондан 150 - 200 меңгә тиклем кәмейәсәк. Был үҙ йөрөшлө транспорт саралары проектының әүҙем тормошҡа ашырылыуы менән бәйле. ***Яһалма зиһенде (искусственный интеллект) бизнес-процесстарға интеграциялау буйынса белгес бөгөнгө көндә һәм киләсәктә даими талап ителгән һәм ҙур һорау менән файҙаланған һөнәрҙәрҙең береһе буласаҡ.***

Һөнәр һайлағанда ғаилә традициялары ла үҙ ролен уйнай. Табиптар, уҡытыусылар, ғалимдар династияһын күҙәтергә мөмкин. Ҡайһы саҡ: "Минең осоусы булыу хыялым тормошҡа ашманы. Һин, улым (ҡыҙым), осоусы буласаҡһың!" - тип, ата-әсәләр балаға үҙ теләген көсләп таға. Был - һис шикһеҙ, йәш кешенең яҙмышына яман ҡағылған эгоизм өлгөһө. Уның кире һөҙөмтәһе булараҡ: "Һеҙҙең теләгегеҙҙе үтәнем. Бына диплом, алығыҙ. Артабан үҙем нисек теләйем, шулай йәшәйем", - тип ата-әсәһен шаҡ ҡатырған егеттәр һәм ҡыҙҙар осрап ҡуя.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һөнәр һайлау - кеше өсөн үтә лә яуаплы мәсьәлә. Һөнәрле, заман талаптарына яуап биргән кимәлдә үҙ эшенең оҫтаһы булайыҡ, ҡулыбыҙҙан, белемебеҙҙән, белгәндәребеҙҙән һөйөнәйек, булдыҡлы, маҡсатлы йәш быуын тәрбиәләйек.**

**Айбулат УРАҘБАХТИН,**
**эшҡыуар.**
**Сибай ҡалаһы.**

*ИНТЕРНЕТТАН*



# ПОМИДОР АШАҺАҢ...
## депрессияға бирешмәҫһең

■ Физкультура мускулдар өсөн генә түгел, баш мейеһе өсөн дә файҙалы, тип белдерә Иллинойс университеты эксперты Арт Крамер. Әлеге ваҡытта физик күнекмәләрҙең баш мейеһе структураһының критик структура үлсәмен ҙурайтыуға һәм балаларҙың, шулай уҡ ололарҙың когнитив һәләттәрен яҡшыртыуға булышлыҡ итеүен раҫлаған тиҫтәгә яҡын тикшеренеү бар. Кешеләргә үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, даими физик күнекмәләр, мәҫәлән, атлап йөрөү аҡыл һәләттәрен дә үҫтерә. "Спорт медицинаһы" белдереүенсә, ололарҙың мейе структураһы яҡшыра, ул функцияларын әүҙемерәк башҡара. Әйткәндәй, көндәлек башҡарған ғәҙәти эштәрҙе икенсе ысулдар менән башҡарыу ҙа яҡшы һөҙөмтә бирә. Мәҫәлән, иртән тештерегеҙҙе һул ҡул менән таҙартығыҙ, был саҡта һеҙ баш мейеһенә лә "күнекмә" үткәрәһегеҙ.

■ Бал ҡорто ағыуы составындағы мелиттин тип йөрөтөлгән токсин ВИЧ күҙәнәктәрен хәүефһеҙ рәүештә юҡҡа сығарыу һәләтенә эйә. Был турала АҠШ-ның Медицина мәктәбе университеты белгестәре белдерә. Әлегә ВИЧ-ҡа ҡаршы дарыу уйлап сығарыу тураһында һүҙ бармай. Әгәр ҙә һөҙөмтәләр раҫланһа, вирус менән зарарланыуҙан һаҡлаусы профилактик сара формаһы эшләнәсәк. Хеҙмәттең авторы Джошуа Гуд әйтеүенсә, мелиттин ҡайһы бер вирустарҙы һәм яман шеш күҙәнәктәрен юҡҡа сығара.

■ Депрессияға бирелмәйем тиһәң, йышыраҡ помидор аша, тип кәңәш итә Ҡытайҙың Тяньцзинь медицина университеты ғалимдары. Улар әйтеүенсә, кем аҙнаһына ике тапҡыр помидор ашай, депрессия уны мотлаҡ урап үтәсәк. 70 йәште үткән 1 мең кешенең ниндәй ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүен тикшергәндән һуң, аҙнаһына 2-6 тапҡыр помидор ашаусыларҙа депрессия 46 процентҡа, ә көн һайын ашаусыларҙа 52 процентҡа һирәгерәк осраған.

■ Диетолог Рэчел Беллер белдереүенсә, суши "Биг Мак" һәм фри картуфына ҡарағанда ла калориялы булыуы ихтимал. Ғәҙәти суши-ролл 290-350 калорийҙан тора, углевод күләме буйынса ул дүрт телем икмәккә тиң. Диетолог белдереүенсә, был ризыҡтарҙа балыҡ күләме бик әҙ. Медиктар әйтеүенсә, 1 порция балыҡ 140 грамм тартырға тейеш, мәҫәлән, "Калифорния" роллында ул бары 5 грамм. Тимәк, 1 порция балыҡ килеп сыҡһын өсөн 28 суши ашарға тура киләсәк. Сушиҙың нигеҙен аҡ дөгө алып тора, ул ҡайһы саҡта ризыҡтың 75 процентын тәшкил итә. Оҙайлы эшкәртеү үткәндән һуң, дөгөлә витаминдар ҙа, минералдар ҙа ҡалмай. Етмәһә, был дөгөнө әҙерләгәндә шәкәр ҡулланыла.

■ Әскелтем тәмле ризыҡтар астма өйәнәген туҡтатыу һәләтенә эйә, тип белдерә Массачусетс университеты (АҠШ) тикшеренеүселәре. Әскелтем тәм тын юлдары күҙәнәктәренең тәм рецепторҙарын әүҙемләштерә, был мускулдарҙы йомшартып, һауаның үтеүенә булышлыҡ итә. Был астма ауырыуынан яңы дарыуҙар эшләүҙә ярҙам итәсәк. Тәм рецепторҙары әсе тәмде тойғас та, организмға хәүефле, мәҫәлән, әсегән йәки ағыуланған ризыҡ тураһында мәғлүмәт ебәрә. Астма ваҡытында тын юлдарының өҫкө өлөшө күҙәнәктәре артыҡ йыш ҡыҫҡара, был тын алыу менән бәйле проблемаларға килтерә. Ә әсе тәм тойған рецепторҙар күҙәнәктәрҙе йомшартыу һәләтенә эйә.

■ Колорадо университеты ғалимдары әйтеүенсә, ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡулында микроорганизмдар үҫеше өсөн шарттар яҡшыраҡ. Көн һайын эштә лә, өйҙә лә саң йыйылған әйберҙәр менән эш итергә тура килә, әммә улар ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡулдарына күберәк йыйыла, сөнки ир-егеттәрҙең тиреһенең әселеге күпкә юғарыраҡ. Гүзәл заттарҙың косметика ҡулланыуы һәм гормональ фоны ла ҙур роль уйнай. Косметика ҡул тиреһен майлыраҡ итә, был микробтар үҫешенә булышлыҡ ҡына итә. Шуныһы ҡыҙыҡлы, ҡулдарҙы йыуыу ундағы микробтар һанына тәьҫир итмәй икән. Кешенең устарында даими рәүештә 150 бактерия йәшәй, уларҙың 17 проценты ғына ике ҡулда ла осрай.

*ХЕҘМӘТ МӘКТӘБЕ БЫЛ!*

# БӘХЕТ СЕРЕ ЯБАЙ:
## тәмле ризыҡ ей һәм...



**Үҙаллы эш асып, шул өлкәлә уңыштарға өлгәшкән эшҡыуарҙарҙың тырышлығы һоҡландырмай ҡалмай. Улар халыҡтың ихтыяжын өйрәнә, кәрәкле тауарҙы етештереп, урындағы халыҡтың тормошон еңеләйтә. Конкуренция ла көслө генә, тимәк, сифатлы продукция етештереү алғы планда тора. Бына шундай эшҡыуарҙар үҙҙәре йәшәгән төбәктең йөҙөн дә, кимәлен дә билдәләй. "Бәхетле" тип аталған итле ярымфабрикаттар әҙерләү цехы Хәйбулла районында яҡшы билдәле. Юғары сифатлы, тәмле ризыҡтарҙы ситтән дә килеп һатып алалар. Уның хужабикәһе Нәзирә КӘРИМОВА уңыштары менән һөйөндөрә. Егәрле, тәүәккәл ханым Өфөлә үткән Lady007 бизнес-акселераторында беренсе урынды яуланы, районда "Икмәк, торт һәм бәлештәр" фестиваленда "Иң матур байрам торты" номинацияһында шулай уҡ беренсе урынды алды. Бына шулай төрлө күргәҙмә, фестивалдәрҙә ҡатнашып, Нәзирә Мостафа ҡыҙ үҙ бренды менән алдынғылар рәтендә йөрөй. Әңгәмәбеҙ - уның менән.**

➔ **"Бәхетле" ярымфабрикаттар цехының асылыу тарихы тиҫтә йылдарға барып тоташмаһа ла, тап ошо өлкәлә һеҙ - районда киң билдәле эшҡыуарҙарҙың береһе. Үҙеңдең эшеңде асыу тәүәкәллек талап итә бит. Ә һеҙҙең эшҡыуарлыҡҡа килгән юлығыҙ ниндәй булды?**

- Мин үҙемдең тыуған ауылым Аҡъярҙа йәшәйем. Шул да үҙемде ышаныслы тойорға ярҙам иткәндер. Аҡъяр ауылына нигеҙ һалыусыларҙың береһе - Юлдашбайҙың вариҫтары беҙ. Атайым ғүмере буйы "Фрунзе" колхозында водитель булып эшләне. Әсәйем уҡытыусы ине. Мин үҙем дә тәүге һөнәрем буйына уҡытыусы, математика-информатиканан уҡыттым. Хеҙмәт эшмәкәрлегемде иһә үҙем уҡыған 1-се мәктәптә башланым, тәрбиә эштәре буйынса мөдир булып та эшләнем. Кейәүгә сыҡтым, ә инде декрет отпускыһынан һуң, нишләптер, кире мәктәпкә барыу теләге тыуманы. Ул ваҡытта математика уҡытыусылары ла күп ине, ярты ставкаға ғына йөрөгөм килмәне...

Өйҙә тик кенә ултырып булмай бит, шул саҡтарҙа заказдар ҡабул итеп, бәлештәр бешерергә тотондом. Унан инде биләш, чебуреки, ваҡ бәлеш ҡамыр аҙыҡтарын бешереп, магазиндарға тапшыра башланым. Шуны ла әйтергә кәрәктер, мин үҙем электән бешеренергә яратам. Ҡартәсәйем беҙҙең менән йәшәне, ә ул бәлеш-маҙар бешерергә бик оҫта ине. Икмәкте гел мейестә генә һала торғайны. Һәр ваҡыт: "Ҡыҙым, әйҙә, эшләш әле", - тип үҙенең эргәһенә саҡыра, мин ҡуша йөрөп ярҙамлашам. Шул бала саҡта уҡ күп нәмәне отоп алдым. Әсәйем дә бешеренергә оҫта булды. Унан да байтаҡ нәмәгә өйрәндем.

Үҙаллы эш башлағанда былар бөтәһе лә ярҙам итте, әкренләп эш күләме лә артып китте. Ошо хәл мине үҙемдең предприятиемды асырға этәрҙе. Судсидия алырға район хакимиәтенә мөрәжәғәт иткәйнем, улар ихлас ярҙам ҡулы һуҙҙы. Унан инде ҡорамалдар - мейес, ҡамыр баҫыу ҡулайламаһы, һыуытҡыс һымаҡ кәрәк-яраҡты алдым да, үҙаллы эш башланым. Заказдарым ныҡ күбәйеп китте. Ошо ярайһы уңышлы башланған эш артабан ярымфабрикаттар әҙерләү цехын асырға тигән теләкте нығытты. Ысынлап та, магазиндарҙа өйҙәге һымаҡ тәмле ризыҡ юҡ, минең дә өйҙә бешеренергә ваҡыт етмәй башланы. Ни өсөн тигәндә, өйөбөҙҙә өс ир-егет, уларға тәмле-тәмле нәмәләр ашатырға кәрәк, бөтәһе лә итле ризыҡ ярата. "Эх, һатып алып, өйҙәге һымаҡ тәмле генә тамаҡ әҙерләргә ине", - тип уйлай инем. Идея минең башҡа килгән, тимәк, үҙем атҡарырға тейешмен, тинем. Шунан тулыһынса ярымфабрикатҡа күстем.

➔ **Бына хәҙер һеҙҙең ғаилә менән танышырға ваҡыт етте. Уларҙың ярҙамын тояһығыҙмы?**

- Ирем "Башмедь"та эшләй. Ике улыбыҙ ҙа Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын тамамланы. Өлкән улым Тимур гимназияла уҡығанда инглиз телен ныҡлап үҙләштерҙе. Башта БДУ-ла экономист-программислыҡҡа уҡыны, ә корея телен үҙаллы өйрәнде. Магистратураға Ҡаҙан федераль Волга буйы университына барҙы. Студенттар алмашыу программаһына эләгеп, артабан Кореяға китте. Сеулда уҡыны. Уҡып бөткәс, Вьетнамаға эшкә сығып китте. Хәҙер вьетнам телен өйрәнә. Кинйә улыбыҙ Илнар былтыр гимназияны тамамлағас, Өфө нефть университетына уҡырға инде. Барыһы ла миңә ярҙам итәләр. Башта ирем, булдыра алырһыңмы икән, тип аптырабыраҡ та ҡалғайны.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ИЗГЕ ҠӨРЬӘН ДАУАЛАЙ



**Бер ваҡыт Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) Әбү Зәйд Худри (радыйаллаһу ғәнһү) етәкселеге аҫтында утыҙ кешенән торған һуғышсылар төркөмөн һуғышҡа ебәргән. Төнөн был төркөм ғәрәп ауылына барып еткән һәм ҡунып китергә рөхсәт һораған. Әммә ауыл халҡы баш тартҡан һәм хатта юлсыларға ашарға ризыҡ та бирмәгән.**

Бер ни тиклем ваҡыттан һуң был ауылдың ырыу башлығын йылан саҡҡан. Бөтә халыҡ зыян күреүсегә ярҙам итергә тырышып ҡараған, әммә бушҡа ғына булған. Уларға, ярҙам һорап, үҙҙәре ҡыуып ебәргән сит ил кешеләренә мөрәжәғәт итеүҙән башҡа сара ҡалмаған.

Бәйғәмбәрҙең сәхәбәһе Әбү Зәйд (радыйаллаһу ғәнһү) һуңынан шулай һөйләгән: "Беҙ Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ҡушыуы буйынса һуғышҡа барған төркөм менән төнгөлөккә ҡунырға туҡтағайныҡ. Беҙҙең төркөмгә хеҙмәтсе ҡыҙ килде һәм шулай тип мөрәжәғәт итте: "Беҙҙең ырыу башлығы Сәлимде ағыулы йылан саҡты. Беҙҙең ауылда уға ярҙам итерлек кеше юҡ. Һеҙҙең арағыҙҙан йылан саҡҡан кешегә ярҙам итерлек берәйһе юҡмы?"

Бәйғәмбәрҙең сәхәбәләре (радыйаллаһу ғәнһү) уларға ҡунып китергә рөхсәт бирмәгәнгә үпкәләп, ауылға барыуҙан баш тартты. Әммә ярҙам иткән өсөн утыҙ һарыҡ менән түләнеүе хаҡында ишеткәс, төркөмдән берәү ауылға барып, йылан саҡҡан кешене "Әл-Фәтиха" сүрәһен өс тапҡыр уҡып, өшкөргәс, ул һауыҡты. "Әл-Фәтиха" уҡыған кеше әжеренә утыҙ һарыҡ алды. Ул беҙҙең бөтәбеҙҙе лә һарыҡ һөтө менән һыйланы, ә беҙ унан: "Һин дауалай беләһеңме ни?" - тип һораныҡ. Ул: "Юҡ, мин тик "Әл-Фәтиха" сүрәһен уҡыным", - тип яуап бирҙе.

Беҙ уға: "Бәйғәмбәрҙән (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) һорамайынса тороп, был бүләк менән файҙаланма", - тип кәңәш бирҙек.

Мәҙинәгә ҡайтҡас, был турала беҙ Бәйғәмбәргә һөйләнек. Ул: "Был һарыҡтарҙы үҙ-ара бүлешегеҙ, бер өлөшөн миңә лә ҡалдырығыҙ!" - тине".

**Был хикәйәттең фәһеме:**

- Изге Ҡөрьән дауалай. Әммә һауығыу Ҡөрьән сүрәһен кем уҡыуҙан тора. Гонаһлы кешенең дауаһы килешмәй. Дауалауҙы тоғро һәм тәҡүәле кеше үткәрергә тейеш.
- Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ағыулы хайуан-йәнлектәр тешләгәндән һуң һауығыу өсөн Изге Ҡөрьәнде уҡырға кәңәш иткән, һәм шуның менән бергә ул ауырыуҙарға табипҡа ла күренергә ҡушҡан.

**Мөршиҙә УЙСАЛ.**
**"Хаҡ динемдә беренсе аҙымдарым" китабынан.**

Мин эш башлап ебәргәс, ул да ҡушылды. Буш ваҡытында ярҙам итергә генә тора. Ауыр әйберҙәрҙе лә күтәрергә тура килә бит. Каникул ваҡытында бәләкәй улыбыҙ ярҙам итә, былтыр "Үҙем эшләйем", тип йәй буйы һатыуҙа ултырҙы. "Аҡса эшләй" тип, уға тейешле хаҡын да түләнем. "Каникулға ҡайтһам, быйыл да эшләйем", тип тора. Вьетнамдағы улыбыҙ компьютер дизайны менән шөғөлләнә, вывеска, банер, йә иһә проекттар яҙғанда, ул ярҙам итә

➔ **"Бәхетле" ярымфабрикаттар цехы бөгөн бик күп төрлө продукция әҙерләй. Ниндәй ауырлыҡтарҙы йырып сығырға тура килде?**

- Мин хәҙер ярҙамсылар менән эшләйем. Продукцияны һатыр өсөн ике магазиным бар. Үҙем эш башлағанда ярҙам иткән "Олимп" менән дә араны өҙгәнем юҡ, унда ла беҙҙең продукция һатыла. Итте үҙебеҙҙең Хәйбулла районындағы фермерҙарҙан һатып алам. "Хәләл ризыҡ" тигән сертификат алырға маҡсатым бар. Был йәһәттән ҡыйынлыҡ юҡ түгел, ни өсөн тигәндә, иң башта мал һуйыу цехы шундай сертификат алырға тейеш. Беҙҙә ике мал һуйыу цехы эшләй, тик уларҙың әлегә ундай сертификаттары юҡ. Бер фермер менән һөйләшкәнбеҙ. Ул сертификат алыу менән хәләл ризыҡтар әҙерләргә тотонабыҙ. Бөгөнгө көндә беҙ утыҙ төр продукция етештерәбеҙ. Билмән, мантый, тефтели, фрикаделька һымаҡ традицион ризыҡтарҙан тыш, үҙебеҙ уйлап сығарған "Байрам" тигән асыҡ мантыйыбыҙ бар. Итенә йәшелсә - помидор, болгар боросо, кишер, һуған ҡушабыҙ. Шундай һутлы, тәмле килеп сыға, тик байрам табынына ҡуйырға була. Ашғабаҡ ҡушылған мантыйҙы бик яраталар. Халыҡ теләп-көтөп ала. Ашап ҡарап: "Ысҭа, нишләп элегерәк беҙ өйҙә эшләп ҡараманыҡ икән?"- тип аптырайҙар, өйрәнеп, үҙҙәре лә бешерә башлайҙар.

Тәүҙә эш башлағанда ҡыйынлыҡтар булды инде. Бәләкәй бизнесты үҫтерер өсөн кредит алырға тура килде. Ҡорамал һатып алам, тиһән, ҙур аҡса кәрәк. Бөтөн талаптарға тура килгән технологик карта кәрәк. Бик тәжрибәле ашнаҡсы таптым, ул ярҙам итте. Экологик таҙа, тәбиғи ризыҡ тәмле лә, туҡлылыҡлы ла булһын өсөн күпме дегустациялар үткәрҙек. Был - бер, икенсенән, мин әле лә үҙемдең эшемде күрһәтә беләм, тип әйтә алмайым. Хәҙер йәштәр бит бик йылдам һәм зиһенле, улар һәр аҙымын төшөрөп, социаль селтәрҙәргә һала, рекламалай... Был йәһәттән минә лә өйрәнеләк кәрәк.

Хәҙер үҙемдең алдыма "Башҡортостан продукты" тигән тауар билдәһе алырға тигән бурысты ҡуйғанмын. Ул артабан танылыуға ярҙам итәсәк һәм продукциябыҙҙы Башҡортостанда ғына түгел, унан ситтә лә һатырға мөмкинлек бирәсәк. Беҙ бит Ырымбур өлкәһе менән сиктәшбеҙ. Был ғына ла аҙ, беҙ Ҡаҙағстанға барып етергә тейешбеҙ, шулай тип уйлайым.

## ...сәйәхәттәрҙә ял ит!



**"Матурлыҡ яныбыҙҙа ғына, уны күрә белергә генә кәрәк", ти "География" турофисы директоры Рәсимә Ниғмәтуллина. Күп ер-һыу күргән ханым был һүҙҙәрҙе юҡҡа ғына әйтмәй, сөнки донъяның матурлығын таныу тыуған ерҙән башлана. Туристик офистың етәксеһе сәйәхәт итергә ярата, ошондай сәфәрҙәргә милләттәштәрен дә саҡыра икән, ғәжәпләнерлек сәбәп юҡ һымаҡ. Донъяға бағып, беҙ үҙебеҙҙе лә танийбыҙ, йәшәү мәғәнәһенә ныҡыраҡ төшөнәбеҙ. Рәсимәнең маҡсаты изге - ул башҡа халыҡтарға тыуған Башҡортостаныың гүзәллеген күрһәтә, бай тарихы менән таныштыра, милләттәштәрен ошо ғәзиз ватаныбыҙ менән ғорурланып йәшәргә саҡыра. Үҙенең хеҙмәт мәктәбе тураһында үҙе һөйләһен әле:**

➔ **Рәсимә, һеҙ һөнәрегеҙ буйынса уҡытыусы, берҙән-бер көндө мәктәпте алмаштырып, бөтөнләй икенсе йүнәлештә эш башлап ебәрәһегеҙ. Быйыл етди сәбәптәре лә булғандыр. Шулай ҙа кешене үҙ юлын эҙләргә, икенсе һөнәр һайларға нимә мәжбүр итә? Шул үткән юлды белге килә.**

- Эйе, пединститутты тамамлағас, мин ун һигеҙ йыл башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡыттым. Кем белә, бәлки, шулай дауам итер ҙә ине, ләкин мин ҡапыл ғына ауырып киттем. Ныҡ ауырыным. Һауығыр өсөн ял йорттарына, санаторийҙарға йөрөй башланым. Уҡытыусы булып эшләгән саҡта бөтөн донъям мәктәп менән өй араһы ғына ине бит. Ләкин һаулығым насарланғанын белгәс, тормошомдо үҙгәртергә тура килер, тигән уй баштан сыҡманы. Сит илдәргә йөрөй башлағас: "Әһә, бөтөнләй икенсе донъя бар икән!" - тип хайран ҡалдым. Бына шул саҡта инде икенсе һулышым асылғандай булды. Шул саҡта туризмға бәйле эш эҙләп, "һары" гәзиттәрҙән иғландар уҡып ултыра торғайным.

➔ **Үҙеңдең эште асып ебәреү өсөн, бөтәһенән элек, тәүәккәллек кәрәктер. "География" тигән исем ҡайҙан алынды?**

- Эш башлап ебәргән саҡта, бәлки, уның ни тиклем етди икәнен аңлап та бөтмәгәнбеҙҙер. Шул белмәгәнлектән дә барып ингәнмендер туризмға. Ни өсөн офистың исеме "География"? Был һорауҙы йыш ҡына бирәләр. Беҙ бит бөтә донъяны өйрәнәбеҙ, шуға исеме есеменә тура килһен, тип тырыштыҡ. Әйткәнемсә, эшемде асҡанға тиклем сит илдәргә йөрөй инем һәм, ҡайҙа барһам да, һәр саҡ яҡшы тәьҫораттар менән генә әйләнеп ҡайттым. Мин хәҙер автор турҙарын бик теләп ойошторам. Иң яратҡан автор турым - Истамбул, икенсеһе - Сочи, өсөнсөһө, әлбиттә, үҙебеҙҙең Башҡортостан. Туристарҙы республиканың иң матур урындары буйлап йөрөтәбеҙ. Үҙем өсөн менеджерҙар уҡытып алам, хәҙер командам ҙурайҙы.

Элек нисек ине: ял етһә, кеше өйөндә ҡала, йорт эшен эшләй - ҡатын-ҡыҙ йыуа-йыйыштыра, ире - телевизор алдында. Заман бит үҙгәрә, хәҙер кешеләр һаулыҡ ныҡытыу тураһында уйлана. Ваҡытлыса булһа ла ул ҡайһы бер мәшәҡәттәрҙән арынырға теләй. Тәбиғәт - иң ҙур табип. Урман һауаһын һулаймы, һыу инеп сығамы - былар барыһы ла кешегә бөтҡөнөҙ энергия бирә. Хатта скандинав аҙымдары менән йөрөп ҡайтыу ҙа сәләмәтлек өсөн файҙалы.

Туристар ағымы яҡшы, Аллаға шөкөр. Айырыуса пандемия үткәндән һуң сәфәр ҡылырға теләүселәр күбәйҙе. Сит илдәргә генә түгел, Башҡортостан буйлап йөрөргә теләүселәр ҙә бихисап. Бигерәк тә изге һаналған урындарға, Нарыҫтау, әүлиә шишмәләренә халыҡ күпләп йөрөй. Милли туроператор компанияһы менән яҡшы хеҙмәттәшлек итәбеҙ. Уларҙың ике ҡатлы автобусы менән турҙар ойоштораҡбыҙ. "Өфө манаралары" тигән программа йыл буйы эшләй.

Донъяны һыу баҫа, ҡайҙалыр ығы-зығылар ҡупҡан, ауырлыҡтар бар, тип аптырап ултырырға ярамай. Иҫтән сығармайыҡ, "Ял итеү мәҙәниәте" тигән төшөнсә бар. Бөгөнгө тиҙләнеш заманында ул бик мөһим.

➔ **Бөгөнгө йәштәргә нимә әйтер инегеҙ?**

- Иң элек, үҙебеҙҙең тыуған еребеҙгә, тәбиғәтебеҙгә иғтибар бирһендәр. Башҡортостандың ҡәҙерен белеү уның матур урындарын барып күреүҙә, танышыуҙа сағыла. Һәм, әлбиттә, сит илдәргә лә йөрөргә кәрәк. Элек, беҙ йәш саҡта: "Һиндостанға барған кешенең өсөнсө күҙе асыла", ти торғандар ине. Ә мин: "Сит илгә барып йөрөп-танышып ҡайтҡандарҙың өсөнсө күҙе генә түгел, өсөнсө ҡолағы асыла", - тием. Икенсе мәҙәниәт менән танышыу күңелдә ҡабатланмаҫ тәьҫораттар уята, ундағы халыҡтың йәшәү рәүеше, гастрономияһы менән танышыу бик ҡыҙыҡ бит ул. Кешеләр менән күберәк аралашҡан һайын, тел дә шымара, быны мин үҙемдән сығып әйтәм. Бер нисә эште параллель алып барыу юлдары асыла. Үҙеңдең көсөң дә арта. Күберәк күргән һайын үҙеңде һәм тыуған халҡыңды яҡшыраҡ аңлайһың. Шуға ла йәштәргә, ниндәй эшкә тотонһағыҙ ҙа, ҡурҡмағыҙ, теләк, тырышлыҡ булғанда, бөтөн эште лә алып барып була, тип әйткем килә.

Шатлыҡ, бәхет сере бик ябай ғына - ҡаҙаҡланып ҡалмаҫҡа, һәр ваҡыт хәрәкәттә булырға кәрәк. Хатта кәйеф булмаған саҡта ла, тип өҫтәйем әле. Ҡырға сыҡһағыҙ - йылға буйындамы, усаҡ эргәһендәме, тау башындамы - һеҙ ҡайҙан да яңы көс-ҡеүәт, энергия алып, сәләмәтләнеп, рухланып ҡайтасаҡһығыҙ. Тимәк, иртәгәһе көнөгөҙгә ышаныслыраҡ аяҡ баҫасаҡһығыҙ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әҙерләне.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Утыҙ бишенсе хат: "Урыҫ пейзаж сәнғәте хаҡында"

Әгәр ҙә мин рус рәссамы йыл, тәүлек үҙгәрештәренә, һауа шарттарына айырыуса һиҙгер тиһәм, ни өсөндәр шунда уҡ томанлы Лондон күперен йәки Руан соборын, йәки бер үк кәңдәге төрлө һауа торошо һәм төрлө ваҡытта төшөргән бөйөк француз рәссамы Клод Моне хәтергә төшә. Уның ошо "урыҫ" һыҙаттары һис тә минең күҙәтеүҙәремде инҡар итмәй, ә был ни бары, ниндәйҙер кимәлдә, бөтә кешелек өсөн хас булыуы тураһында һөйләй.

## Утыҙ алтынсы хат: "Башҡа илдәрҙең тәбиғәте"

Инде күптән шундай һорауға яуап биреүҙең кәрәклеген тоям: башҡа халыҡтарҙың да шундай уҡ тәбиғәтте аңлау, тәбиғәт менән берлеге юҡмы ни? Бар, әлбиттә! Һәм мин урыҫ тәбиғәтенең башҡа халыҡтарҙың тәбиғәтенән өҫтөнлөгөн иҫбатлар өсөн яҙмайым. Әммә һәр халыҡтың тәбиғәт менән үҙ бәйләнеше. Кеше һәм тәбиғәт көҫтәре менән барлыҡҡа килтерелгән төрлө ландшафтарҙы сағыштырыу өсөн, миненсә, Кавказда, Урта Азияла, шулай уҡ Испания, Италия, Англия, Шотландия, Норвегия, Болгария, Төркиә, Япония, Мысырҙа булырға кәрәк. Фотолар һәм пейзаж, рәсем сәнғәте буйынса ғына тәбиғәт тураһында фекер йөрөтөргә ярамай.

Һанап киткән төбәктәр һәм илдәр араһынан мин Кавказ, тағы ла Англия, Шотландия, Болгария тураһында өҫтән генә фекер йөрөтә алам. Һәм был илдәрҙең һәр береһендә тәбиғәт менән кеше араһында мөнәсәбәттәр үҙенсә, үҙенсәлекле - һәр саҡ күңелгә үтеп инерлек, тулҡынландырғыс, кешеләге, дөрөҫөрәге, халыҡтағы ниндәйҙер рухи юғарылыҡ барлығын иҫбатлай.

Ауыл хужалығы хеҙмәте, Рәсәйҙәге кеүек үк, Англия тәбиғәтен дә формалаштыра. Әммә был тәбиғәт ер эшкәртеү ярҙамында ғына түгел, һарыҡсылыҡ менән дә булдырылған. Шуға ла унда ҡыуаҡлыҡтар бик аҙ, әммә матур газондар үҫә. Мал пейзажды "йолҡоп бөткән", уны асығыраҡ иткән; ағастар аҫтында ҡыуаҡлыҡтар булмаған һәм алыҫҡа күренгән. Инглиздәр ағастарҙы юл ситтәре буйлап ултырта һәм араларында болон һәм аҡландар ҡалдыралар. Мал юҡҡа ғына пейзаж парктары һәм инглиз пейзаж картиналарының мотлаҡ тейешле күренештәре булмаған. Быны Рәсәйҙә лә күргәндәр. Һәм хатта рус пейзаж баҡсалары Рәсәйҙә Англия йоғонтоһонда барлыҡҡа килгән, уларҙа һөт һаҡлағыстар һәм фермалар урынлаштырылған, һыйырҙар һәм һарыҡтар утлап йөрөгән.

Инглиздәр ҡыуаҡһыҙ, тиерлек, парктарҙы ярата, ярҙары ялангас, һыу һәм ер араһында асыҡ һәм талғын сиктәр булған йылға һәм күлдәрҙе, яңғыҙ имәндәрҙе йәки иҫке ағастарҙы, аҡландар араһында гигант гөлләмәләр кеүек торған боскеттарҙы (ҙур булмаған сауҡалыҡтар) оҡшата.

Күптәрҙе һоҡландырған Шотландия һәм Хайлендтағы пейзаждарҙа лирик тойғоноң иҫ китмәле ыҡсымлығы хайран итә. Был ялангас, тиерлек, шиғриәт. Һәм шунда донъялағы иң яҡшы шиғриәттең береһе - инглиз "күл мәктәбе" юҡҡа ғына тыумағандыр. Мөһәбәт итәктәре буйлап болондарҙы, көтөүлектәрҙе, һарыҡтарҙы, унан артынан кешеләрҙе лә "күтәреп" яткан тауҙар ниндәйҙер айырым бер ышаныс тыуҙыра. Һәм кешеләр үҙен дә, малын да тау яландарына ышанып тапшыра, малды аҙбарҙарһыҙ һәм ышыҡһыҙ ҡалдыра. Тауҙарҙа иҫ киткес йылы һәм ҡалын йөнлө, төндәге һыуыҡтарға һәм тау башына яткан болоттарҙан килгән еүеш һауаға күнеккән һыйырҙар, донъялағы иң яҡшы йөн биргән һәм өймәкләшеп төн сыға белгән һарыҡтар утлап йөрөй, һәм тиҙ генә яҙып ебәреп, усаҡ эргәһендә киптереп алырға булған ябай килт (янбаштары тирәләй уратылған йөн шәлдәр) кейгән, шулай уҡ унайлы, һалҡын төндәрҙә төрөнөр өсөн пледтар ябынған кешеләр йөрөй. Баҫыуҙар хайктар - таш кәртәләр менән кәртәләнеп алынған. Уларҙы сыҙам ҡулдар төҙөгән. Шотландия кешеләре уларҙы туған тауҙарынан башҡа материалдан һалырға теләмәгән. Шуға ла таш хайктар - беҙҙең төньяҡтағы һайгауҙарҙан эшләнгән кәртәләр кеүек үк, тәбиғәттең бер өлөшө. Тик уларҙа ритм икенсе.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



### 5 МАЯ
### ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 "Модный приговор". [0+]
10.00 "Жить здорово!" [16+]
10.50 "АнтиФейк". [16+]
11.20, 12.20 Х/ф "Белая ночь, нежная ночь..." [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
13.25, 14.15, 22.45 Информационный канал. [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Д/ф Премьера. "Весна 45-го". [12+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Сталинград". Новые серии". [16+]
23.15 "Большая игра". [16+]
0.15 Д/с "Победа". [16+]
1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.45, 2.10 Т/с "Мур-Мур". [12+]
21.30 Т/с "Значит, нам туда дорога". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.42 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Не игрушка". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**12.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [12+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 20.15 Профессионалы. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Д/ф "Огненный танкист". [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30, 3.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**1.30 Спектакль "Шаймуратов-генерал". [12+]**
**5.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**

### 6 МАЯ
### ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45 "АнтиФейк". [16+]
11.15, 12.20, 14.15, 22.45 Информационный канал. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Д/ф Премьера. "Весна 45-го". [12+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Сталинград". Новые серии". [16+]
23.15 "Большая игра". [16+]
0.15 Д/с "Победа". [16+]
1.05, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.45, 2.10 Т/с "Мур-Мур". [12+]
21.30 Т/с "Значит, нам туда дорога". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.40 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Не игрушка". [12+]**
**11.00 Д/ф "Вывести на чистую воду". [16+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Профессионалы. [12+]**
**20.30 Д/ф "Города - Герои. Новороссийск". [12+]**
**23.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [6+]**
**1.30 Спектакль "Страна Айгуль". [12+]**
**3.45 Письма солдатам. [12+]**

### 7 МАЯ
### СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45 "АнтиФейк". [16+]
11.15, 12.20, 14.15, 22.45 Информационный канал. [16+]
12.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.15 Д/ф Премьера. "Весна 45-го". [12+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "По законам военного времени. Сталинград". Новые серии". [16+]
23.30 "Большая игра". [16+]
0.30 Д/с "Победа". [16+]
1.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 17.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.45, 2.10 Т/с "Мур-Мур". [12+]
21.30 Т/с "Значит, нам туда дорога". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.39 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Не игрушка". [12+]**
**10.50 Светлой Памяти павших в борьбе против фашизма. Республиканская минута молчания.**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 Зерно. [6+]**
**16.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Профессионалы. [12+]**
**18.00 Лес - моя биография. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Байыҡ. [12+]**
**1.30 Спектакль "Ульмясбай". [12+]**
**3.15 Д/ф "Огненный танкист". [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

### 8 МАЯ
### ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Летят журавли". [12+]
8.00 Телеканал "Доброе утро".
10.15 Д/с Премьера. "Победа". [16+]
12.00, 15.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Х/ф "Освобождение". "Направление главного удара". Фильм Юрия Озерова". [12+]
15.15 Х/ф "Освобождение". "Битва за Берлин". "Последний штурм". Фильм Юрия Озерова". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.25 Д/ф Премьера. "Весна 45-го". [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Голос Победы". [12+]
0.00 Д/с "Победа". [16+]
0.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 3.30 Х/ф "Первый Оскар". [12+]
7.00 Х/ф "Через прицел". [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.45 Д/ф "Маршал Рокоссовский. Война без цензуры". [12+]
12.40, 14.30, 17.30 Т/с "Истребители. Битва за Крым". [16+]
21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.30 Х/ф "Спасение капитана Максимова". [16+]
0.50 Х/ф "Балканский рубеж". [16+]
5.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30, 22.30, 1.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45, 8.45, 9.15, 15.45, 5.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**9.45 Д/ф "Города - Герои. Новороссийск". [12+]**
**10.15 Д/ф "Яблоневый цвет. Мечта Хасана Ахтямова". [12+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Д/ф "Соловецкие юнги". [6+]**
**12.00 Спектакль "Потомки Салавата не отступят". [12+]**
**14.00 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**16.15, 3.30 За себя и за того парня. [12+]**
**16.45, 4.00 Д/ф "Последняя высота". [12+]**
**17.30 Интервью. [12+]**
**17.45 Профессионалы. [12+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00 Победа в наших сердцах. [6+]**
**21.00 О чем молчат Памятники. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Бәхет иле. [12+]**
**1.30 Спектакль "Помилование". [12+]**
**4.45 Письма солдатам. [12+]**

### 9 МАЯ
### ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.00, 10.00, 11.50 Новости.
5.10, 10.10 "День Победы". Праздничный канал.
8.10, 9.10, 14.20 Т/с "Диверсант. Конец войны". [16+]
12.00 Москва. Красная площадь. Военный Парад в ознаменование 80-й годовщины Победы в Великой Отечественной войне 1941-1945 гг.
13.30 Новости (с субтитрами).
15.20 Д/ф "Суджа. Железный поток". [16+]
16.25 Премьера. "И помнит мир спасенный". Праздничный концерт. [0+]
18.30 Х/ф Премьера. "Воздух". [16+]
18.55 Светлой памяти павших в борьбе против фашизма. Минута молчания.
19.00 Х/ф "Воздух". [16+]
21.00 "Время".
22.00 Х/ф "В бой идут одни "Старики". Легендарное кино в цвете". [12+]
23.30 Д/с "Победа". [16+]
0.15 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.40 Д/ф "Война за память". [12+]
7.20 Большой праздничный концерт, посвящённый 80-летию Победы.
9.00 "День Победы". Праздничный канал.
12.00 Москва. Красная площадь. Военный Парад в ознаменование 80-й годовщины Победы в Великой Отечественной войне 1941-1945 гг.
13.30, 17.30, 20.00, 21.30 Вести.
14.20, 2.35 Х/ф "Т-34". [12+]
18.00, 19.00 "Песни от всей души" в День Победы. Большой праздничный выпуск. [12+]
18.55 Светлой памяти павших в борьбе против фашизма. Минута молчания.
21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
22.15 Концерт Победы у Московского Кремля.
23.55 Х/ф "Праведник". [12+]
5.47 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00, 9.15, 10.45, 12.45, 16.00, 17.00, 19.00 Весна Победы.**
**9.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**10.00, 23.00 Торжественное прохождение военнослужащих и военной техники.**
**11.00 Светлой Памяти павших в борьбе против фашизма. Республиканская минута молчания.**
**11.10, 23.45 Бессмертный полк, посвящённый 80-летию Победы в Великой Отечественной Войне.**
**12.30, 15.30, 18.30, 22.30, 1.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Дню Победы. [12+]**
**18.55 Светлой Памяти павших в борьбе против фашизма. Минута молчания.**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**1.45 Спектакль "Потомки Салавата не отступят". [12+]**
**3.45 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**5.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**6.00 О чем молчат Памятники. [12+]**

### 10 МАЯ
### СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Восьмидесятники. Поколение Победы". [12+]
11.20, 12.15 Т/с "Диверсант. Конец войны". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20, 21.35 "Сегодня вечером". [16+]
21.00 "Время".
23.10 Х/ф "Белорусский вокзал". [0+]
1.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.50 Х/ф "Мороз по коже". [12+]
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Т/с "Значит, нам туда дорога". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.30 Х/ф "Пустой дом". [12+]
1.10 Х/ф "Поздние цветы". [12+]
4.30 Х/ф "Проверка на любовь". [16+]
6.07 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Торжественное собрание и праздничный концерт, посвященные Дню Победы. [12+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 История в граффити. [6+]**
**10.15 Истории Победы. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Асыш. [6+]**
**11.30 Х/ф "Мальчишки". [6+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Все песни о прекрасном… [12+]**
**17.30 Д/ф "Я должна была жить". [12+]**
**18.00 Специальный репортаж. [12+]**
**19.00 Мама. [12+]**
**20.45 Д/ф "Ҡайтыр". [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.15 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**23.15, 5.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 "Башҡорт йыры" представляет. [12+]**
**3.00 Спектакль "Керчь". [12+]**
**4.30 Ҡурай-шоу. [12+]**
**5.30 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**

### 11 МАЯ
### ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.20 "Жизнь своих". [12+]
11.20 Д/ф Премьера. "Железный фронт: дороги жизни". [16+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Д/ф Премьера. "Плечом к плечу за Родину и веру". [16+]
13.30 Х/ф "Они сражались за Родину". К 50-летию фильма. [12+]
16.35 Д/ф "Звезды кино. Они сражались за Родину". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Поле чудес". Праздничный выпуск. [16+]
21.00 "Время".
23.00 Премьера. "Я люблю тебя, жизнь!" Концерт к 80-летию Великой Победы. [0+]
0.20 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

6.10, 2.20 Х/ф "Сердечных дел мастера". [16+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00 Вести.
12.00 "Наши. Военкоры". [12+]
12.30 Фестиваль детской художественной гимнастики "Алина".
14.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.20 "Песни Победы на Мамаевом кургане".
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.35 Д/ф "Маршал Рокоссовский. Война без цензуры". [12+]
4.02 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15, 18.30 Легенды Урала. [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 Ҡурай даны. [12+]**
**9.15 Мама. [12+]**
**9.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45, 21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Асыш. [6+]**
**11.30 Сулпылар. [6+]**
**12.00 Атайсал. Знай наших! [6+]**
**12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**13.15, 1.45 Д/ф "Красноармеец Якупов". [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.00 Дорога к храму. [6+]**
**15.30 Честно говоря. [12+]**
**16.15 Спектакль "Помилование". [12+]**
**18.15, 20.00 Квадратные метры. [12+]**
**19.00 Әлләсе… [12+]**
**19.45 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Д/ф "Один из тринадцати". [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт Айнура Аминева. [12+]**
**0.15 Спектакль "Звезда Героя". [12+]**
**2.30 Колесо времени. [12+]**
**3.30 Башкирские каникулы. [12+]**
**4.15 Д/ф "Кайтыр". [12+]**
**5.00 Д/ф "Вывести на чистую воду". [16+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Май (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 5 (7) дүшәмбе | 3:07 | 5:29 | 13:30 | 18:28 | 20:58 | 23:20 |
| 6 (8) шишәмбе | 3:06 | 5:27 | 13:30 | 18:29 | 21:00 | 23:21 |
| 7 (9) шаршамбы | 3:04 | 5:25 | 13:30 | 18:30 | 21:02 | 23:22 |
| 8 (10) кесе йома | 3:03 | 5:23 | 13:30 | 18:31 | 21:04 | 23:23 |
| 9 (11) йома | 3:02 | 5:21 | 13:30 | 18:32 | 21:06 | 23:24 |
| 10 (12) шәмбе | 3:01 | 5:19 | 13:30 | 18:34 | 21:07 | 23:25 |
| 11 (13) йәкшәмбе | 3:00 | 5:17 | 13:30 | 18:35 | 21:09 | 23:26 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 2 МАЙ - БЕРЛИНДЫ АЛҒАН КӨН



**1945 йылдың 2 майы - Ҡыҙыл Армия фашистик Германияның баш ҡалаһы Берлинды алған көн.**

Фашистар Рейхстаг районында айырыуса ныҡлы ҡаршылыҡ күрһәтә. Ҡыҙыл Армия был объектты алыуға өлгәшә - 30 апрель кисендә совет һалдаттары Рейхстаг көмбәҙенә Еңеү Байрағын ҡаҙай. Ундағы алыш 1 майға тиклем дауам итә, подвалдарҙа урынлашҡан фашист һалдаттары 2 майҙа ҡорал һала.

Быйыл Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығын ҡаршылайбыҙ. Илебеҙҙең азатлығы өсөн көрәшкән, ғүмерҙәрен ҡорбан иткән, ҡаһарманлыҡ күр-һәтеп, ил рәхмәтен алған яҡташ яугирҙарыбыҙ - Ватаныбыҙҙы һаҡлаусылар күп булған. Был башваткыста шулар араһынан Берлинды фашистарҙан азат итеүҙә ҡатнашҡандарын телгә алып китергә булдыҡ.




1 "Берлинды алған өсөн"миҙалы булған яҙыусы-ветеран

2 Гитлерҙың бункерын һәм рейхканцелярияһын алған 1050-се полк командиры

3 Өфө урамына исеме бирелгән осоусы

4 Рейхстаг башына флаг ҡаҙаған

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**16-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Аксаков. Маяковский. Негр. Предмет. Мәҡәлә. Матросов. Кәзә. Тәмәкесе. Ресторан. Шовинист. Йүнәлеш. Андорра. Ринг. Мосафир. Кавалер. Нан. Алап. Лунатик. Гәли. Юлаев. Демократ. Уҡсы. Аҙап. Буран. Ленин. Яфа. Такси. Лото. Исмәгилев. Болот. Шына.

**Вертикаль буйынса:** Атай. Физкультура. Нуриев. Сол. Әрәсә. Аталғц. Еңгә. Марыл. Практикант. Рәүеш. Ариозо. Аккредитив. Ляпис. Итәғәш. Елкән. Абсент. Вәкил. Илаш. Мәрт. Дебет. Йырҙа. Аҡмулла. Вена. Лайм. Сауҙа. Оторо. Пушкин. Рефрен. Ағуна . Ванна. Рейн. Тыуа.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**3 май "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова, А. Абушахманов), мелодрама. 16+

**4 май "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, инсц. Ш. Ғилманова). 16+

**6 май "...Ат уйнатып алдан бара..."** (З.Бураҡаева, Х. Үтәшев), театрлаштырылған тамаша. 12+

**7 май "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 12+

**8 май "Мин - Марат"** (У. Ғәлиев, А. Абушахманов), провинциаль проза. 16+

**9 май "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш, Ф. Ғарипов). 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**3 май "Хужа Насретдин мажаралары"** (Л. Соловьев, В. Виткович, М. Күлбаев), комедия. 12+

**4 май "У ковчега в восемь"** (У. Хуб, М. Күлбаев), ғаилә спектакле. 11:00. 6+

**6 май "Звезда Героя"** (Ф. Әхмәдиев, О. Мусина, ), һуғыш осоро хроникаһы. 12+

**7 май "Спасите Леньку!"** (М. Икрамова, М. Күлбаев), драма. 12+

**8 май "Синяя-синяя речка"** (Б. Вахтин, М. Күлбаев), йыр. 12+

**9 май "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим, М. Күлбаев), иҫтәлектәр. 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**3 май "Муха Цокотуха"** (К. Чуковский). 12:00 һәм 15:00. 0+

**4 май "Русалочка"** (Г. Андерсен). 12:00 һәм 15:00. 12+

**7 май "Ваҡыт аша ғәжәип сәйәхәт"** (В. Щербакова). 19:00. 12+

**8 һәм 9 май "Живи!"** (Р.Сванидзе). 18:00, 12:00 һәм 15:00. 6+

**9 май "О героях былых времен"** (М.Батурин). 18:00. 12+

## Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**4 май Монах Авель:** Бахатан алып Пьяццоллаға тиклем донъя хиттары. Концерт. 16+

**6 май "Ышанам, һин ҡайтырһың..."** Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына ҡарата концерт. 12+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**6 май "Ярлыҡау"** (М. Кәрим, И. Ҡаҙаҡбаев), баллада. 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**6 май "Янып һүнгән ғүмерҙәр"** (А.Дударев, Ф.Кәримов), драма. 12+

**7 май "Трагедия в Сокольниках"** (А.Рева, А. Газимова). 6+

**9 май "Ҡорос. Яугир ат яҙмышы"** (М.Ҡунафин), драма. 6+

## Сибай концерт-театр берекмәһе

**6 һәм 7 май "Ҡанатлы генерал"** (Х.Ирғәлин, Д. Нурғәлин), драма. 12+

## БР Милли музейы

**2 май "Тамбур сигеүе"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 7+

**3 май "Ҡот билбауы"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 5+

**6 май "Еңеү көнө"** акцияһы. 11:00-16:00. 0+

**8 май "Еңеү көнөнә брошка"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 7+

**9 май "Еңеү көнө"** акцияһы. 12:00-16:00. 0+

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Өфө Рәсәйҙә беренсе булып "Бөтөн донъя һөнәрселек ҡалаһы" исеменә лайыҡ булды. Ысынлап та, лайыҡлы баһа, сөнки республиканың баш ҡалаһында талантлы һөнәрмәндәр бихисап. Уларҙың бер нисәһенә үҙҙәренең эшмәкәрлеге тураһында һөйләүҙәрен һорап мөрәжәғәт иттек.



***Мәҙинә ҠАЛДАМАНОВА, кәрзиндәр үреү оҫтаһы:*** Үҙем яратып башҡарған, теләге булған һәр кем менән оҫталыҡ серҙәрен дә бүлешкән шөғөлөм, һөнәрем - яһалма ротангтан гөл, сәскә һауыттары, кашпо, кәрзин үреү. Ротангтан әйберҙәр эшләүҙе мин бары тик ҡул эше генә тип әйтмәҫ инем, ул, мәҫәлән, талдан кәрзин үреү кеүек үк, сыҙамлыҡ, ҡул көсө, ваҡыт һәм нығышмаллыҡ талап иткән һөнәр. Ул шулай уҡ иғтибарлы булыуҙы талап итә. Тәбиғи ротангты Каламус пальмаһы лианаларынан алалар. Уны икенсе төрлө "Ротанг пальмаһы" тип тә атайҙар. Ләкин тәбиғи ротанг бик ҡиммәтле, шуға күрә уны яһалма материал менән алыштыралар. Ул ағастың тышҡы ҡиәфәтенә һәм структураһына тура килтереү (имитациялау) өсөн төрлө синтетик һәм полимер сүстәр ярҙамында эшләнә. Яһалма ротанг һаулыҡ өсөн зарарлы түгел, шуға күрә унан эшләнгән әйберҙәр күптәрҙең өйҙәрендә урын ала. Мин эшләгән сәскә һауыттары, кашпо, кәрзиндәр, шыршы ултыртыу өсөн һауыттар күптәрҙең өйөн, ихатаһын биҙәп тора.

Ротангтан әйберҙәр үреү серен интернет селтәрендәге күп һанлы оҫталыҡ дәрестәрен ҡарап үҙләштерҙем. Тәү ҡарашҡа ауыр тойолһа ла, эштең бөтә рәтен-сиратын өйрәнеп алһаң, бөтә нескәлектәренә төшөнһәң, эш бик ырамлы бара. Мин, мәҫәлән, уртаса бер кәрзинде бер сәғәттә үрәм. Бары тик ваҡыт һәм илһам ғына кәрәк. Яҡын киләсәктә ротангтан мебель йыһаздары үреп ҡарарға уйым бар. Үҙе еңел, үҙе ныҡ ротангтан мебель өйҙә лә, урамда ла киң ҡулланыла. Уны оҙайлы ваҡыт үҙ формаһын юғалтмайынса ҡулланырға була. Һәм ротангтан мебель һәр ваҡытта ла модалы булып ҡала. Хәҙер был һөнәргә башҡаларҙы ла өйрәтәм. Бындай оҫталыҡ дәрестәре ҙур һорау менән файҙалана, шуға күрә дәрес тураһындағы иғлан биреү менән күптәр шылтыратып яҙылып та ҡуя. Үҙем белгән шөғөлдә башҡаларға өйрәтә алыуыма шатланам, сөнки ни тиклем күберәк кеше үҙе тирәләй матурлыҡ тыуҙырһа, шул тиклем донъя ла йәмләнә.

***Айгөл ҠУЖАХМӘТОВА, биҙәүестәр яһау оҫтаһы:*** Мин фриволите ысулы менән төрлө биҙәүестәр эшләйем. Бала саҡтан ҡул эштәрен яраттым. Әнә һәм ырғаҡ менән төрлө әйберҙәр бәйләй, сигә инем. Декрет ялында тәүге тапҡыр фриволите ысулы тураһында ишеттем һәм улым тыуғас, интернет аша оҫталыҡ дәрестәре ҡарап, был һөнәргә ылығып киттем. Фриволите - әллә ни киң таралмаған ҡул эше. Миңә иң оҡшағаны - унда ниндәйҙер ҡәтғи ҡағиҙәләр, сикләүҙәр юҡ, биҙәүестәрҙе мин үҙем нисек күҙ алдына килтерәм, шулай эшләй алам. Иреклелек, нескәлек хас уға. Ниндәйҙер кимәлдә фриволите макрамеға яҡын, ләкин ул нәфисерәк һәм эше лә мәшәҡәтлерәк. Ярым түңәрәк, түңәрәк, дуғалар бер-береһе менән киҫешеп, бәйләнеп, матур һәм нәзәкәтле әйберҙәр барлыҡҡа килә. Әҙер әйберҙәрҙе биҙәүес итеп тағырға, шулай уҡ кейемде, мебелде матур итеп биҙәү өсөн ҡулланырға була. Тәү ҡарашҡа үтә лә нәфис күренгән әйберҙәр үҙ формаһын тота, емерелмәй, һынмай.

Һәр ҡул эшенең үҙенең айырым эш ҡоралдары булған кеүек, фриволите өсөн дә махсус ҡорамалдар бар. Уларҙың иң мөһиме "челнок" тип атала, ул ике оҙонса формалы пластинанан тора. Улар араһындағы ҡоролмаға ептәр урала, ә пластиналар иһә эш ваҡытында епкә ыҫҡынып китергә бирмәй. Шулай уҡ был төр ҡул эшендә махсус ырғаҡ һәм энәләр ҡулланыла.

Фриволите өсөн лавсан, мамыҡ, полиэстер, кроше, ирис һәм башҡа ептәр ҡулланыла. Иң мөһиме улар сифатлы булырға, тағы ла ҡулда тегеләй-былай шыуып йөрөмәҫкә тейеш. Был ҡул эшенә яңы тотонғандарға иң ҡулай материал - "Ирис" мамығы, ҡатмарлы биҙәктәр булдырыу өсөн ҡатыраҡ һәм ялтырап торған ептәр - лавсан, полиэстер кәрәк булаҫаҡ. Уларҙан формаларын яҡшы тотҡан әйберҙәр эшләргә була. Фриволите ысулын ныҡлап үҙләштергәндә уникаль әйберҙәр үрергә мөмкин. Эш техникаһын аңлап алыуы ныҡ ҡатмарлы түгел, бары тик теләк, тырышлыҡ һәм үҙ-үҙеңә ышаныс кәрәк. Нәфис әйберҙәр эшләү ҡабаланыуҙы яратмай, ентекле, иғтибарлы булыу мөһим. Был еңел булмаған ҡул эше, ләкин оҫтарып алып матур-матур әйберҙәр тыуа башлаһа, үҙеңдең хеҙмәт емешеңде күреү ҙур ҡыуаныс килтерә. Матурлыҡҡа ынтылайыҡ, ҡул эштәре менән булайыҡ, төрлө кәсептәргә "йәшәргә" мөмкинлек бирәйек.



ТЕЛҺӨЙӘР

## МӨНЙӨМӘ КЕШЕ

**Беҙҙең үҙенсәлекле лөғәтебеҙҙә һирәгерәк ҡулланыу арҡаһында онотола барған һүҙҙәр урын ала. Ә беҙ уларҙы онотторма у яҡлы. Шуға ла иҫкә төшөрөп торабыҙ, хәтергә һеңдерәбеҙ.**

**Монтар.** Аҡмай торған һыуҙа барлыҡҡа килгән бысраҡ "монтар" тип атала. *Монтарҙа балыҡ үрсемәҫ. Аҡҡан һыуҙа монтар юҡ, ташҡын кисмәҫ толпар юҡ.*

**Монтоҡ, монтоҡлау.** Ҡайһы бер һөйләштә "мөнтәлеп бөткән нәмә, мөнтәү" тигәнде белдергән һүҙҙәр. *Монтоҡ кейем. Монтоҡланған әйбер.*

**Мөнйөмә.** Мәғәнәһе - "юҡ-барҙан ғәйеп табып, өҙләкһеҙ һөйләнеп, әрләп йөрөүсән". *Мөнйөмә кеше. Без мөнйөмә түгел.*

**Мөрәҙ.** "Мөрәҙ"ҙең ҡырмыҫҡа майы икәнен беләйек. Мөрәҙ файҙаһы. *Халыҡта электән мөрәҙҙе дауаға ҡулланғандар.*

**Мөрәүәт. 1.** "Мөрәүәт" "егетлек" тигән һүҙ урынында йөрөй. *Көсһеҙҙе ҡурсыу - мөрәүәт ул. Тормошта мөрәүәткә сәбәп сығып тора.* **2.** Йомарт күңеллелек, кешелеклек хаҡында һөйләгәндә лә, "мөрәүәт" һүҙе тура килә. *Мөрәүәт күрһәтеү. Хайуандарға ҡарата ла мөрәүәт белдереү кәрәк.* **3.** Ә "мөрәүәтле", тимәк, "яҡшылыҡ эшләй торған, кешелекле"; "күңелгә яҡын, ғәзиз, изге". *Мөрәүәтле зат. Мөрәүәтле башҡорт теле. Мөрәүәтле тыуған яҡ.*

**Шулай итеп, "Мөрәҙ - тәнде, мөрәүәт йәнде имләр", тигән мәҡәл дә бар икәнен онотмайыҡ.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## БЕР ҠАТЫНДА...

### ҡырҡ ир хәйләһе

Бер ҡатынға ҡәнәғәт - ғүмер буйы хуш ҡалған, башҡаларҙы эҙләгән - ҡатынынан буш ҡалған.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Яһалма етдилек икейөҙлөлөк кеүек үк насар.

**(Карло Гольдони).**

Ғашиҡтар һәр саҡ шундайҙар: йә бик ныҡ һуҡырҙар, йә бик ныҡ үткер күҙлеләр.

**(Иван Гончаров).**

Күҙҙәр сәбәпте эҙләргә тейеш.

**(Иоганн Кеплер).**

Әгәр ҙә һеҙ булғандар менән бәхетһеҙ икән, күберәк булдырып, бәхетле була алырһығыҙмы?

**(Тибет мәҡәле).**

Был донъянан мәжлестән киткәндәге кеүек - ас та түгел, туйып та етмәгән көйө китергә кәрәк.

**(Диоген).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бына автобуста бер ҡарсыҡ китеп бара. Ул шул тиклем тынысһыҙлана һәм водителдән һәр туҡталыш тураһында һораша. Эргәһендә ултырған ҡатын уны тынысландырырға итеп: "Тынысланығыҙ. Кондуктор туҡталышты иғлан итер. Хәҙер беҙ унан һеҙҙең туҡталыш тураһында иҫкәртеүен һорарбыҙ..." - ти һәм кондуктор эргәһенә барып, ҡарсыҡтың үтенесен еткерә. Хәҙер инде ҡарсыҡ әленән-әле кондукторға мөрәжәғәт итә һәм: "Минең туҡталышыма еткәс, әйтерһегеҙ инде, зин-һар. Мин туҡталышымды уҙып китә күрмәйем. Мин унда мотлаҡ барып етергә тейешмен..." - тип ҡабатлай. "Ярай-ярай, мин һеҙҙе иҫкәртермен. Ләкин һеҙ ниндәй туҡталышта төшөргә тейешлегегеҙҙе аныҡ ҡына әйтмәнегеҙ бит. Ҡана, яҙып ҡуйыйым..."- ти кондуктор. Әммә ҡарсыҡ көсөргәнеүҙән ҡалтырай һәм байтаҡ ваҡыт ҡайһы туҡталышта төшөргә икәнен хәтерләй алмай ултыра. Шунан иҫенә төшөрөп, ҡысҡырып уҡ ебәрә: "Һеҙ, зинһар, иҫегеҙҙә ҡалдырығыҙ инде, мин автовокзалда төшөргә тейешмен..." - ти...**

**...Әгәр ҙә һин ниндәйҙер бер шәхси маҡсатты ғына алға һөрәһең икән, тимәк, һин шул тиклем ныҡ көсөргәнеш кисерәсәкһең, һөҙөмтәлә аңың тараясаҡ һәм күңелең ябыласаҡ. Ә бит ҡайһы саҡта Йәшәйешкә һине етәкләп барырға мөмкинлек бирергә лә кәрәк. Шул саҡта ғына, Йәшәйеш юғары үрҙәр яулай-яулай, алға хәрәкәт итә һәм һин Уның бер өлөшө икәнен иҫләп, тәрән тынныслыҡ хәлендә булғанда ғына, аң һәм күңел асыҡлығына өлгәшәсәкһең. Тыныс бул!"**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттән Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 25017

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
30 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2857
Заказ - 833